ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

21-27 ноябрь (ҡырпағай) 2025

№46 (1190)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!* **Баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл бөгөн: 2026 йылдың 1-се яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы бара. ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә ярты йылға яҙылыу хаҡы - 1054 һум 50 тин. Күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле "Киске Өфө"гә яҙылырға ашығығыҙ - үкенмәҫһегеҙ.**

*Мөхәрририәт.*

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Аҡсаның күҙе лә... үҙе лә юҡ**



4

**Ишембай - аҫыл педагогтарға бай,**
**йәки Мәктәп-интернат системаһы ҡаҙаныштары хаҡында**



8-10

**Интернатым, һиңә хөрмәт, һиңә дан!**



11

**Тәрбиә һабаҡтары эпоста инде**



13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

АФАРИН!

## ГЕЛ ЕҢӘЛӘР!

**Төркиәлә йөҙ шаҡмаҡлы шашка буйынса донъя чемпионаты һәм беренселеге үтте. Башҡортостан шашкасылары донъя чемпионатында һәм беренселегендә 21 миҙал яуланы**



Өфөнән халыҡ-ара гроссмейстер Айнур Шәйбәков донъя чемпионы исеменә лайыҡ булды, тип хәбәр итте республика вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов. Стәрлетамаҡтан Муродулло Амриллаев һәм ете тапҡыр донъя чемпионы Тамара Танһыҡкужина ике көмөш миҙал яуланы. Ишембайҙан Әлиә Әминева бронза миҙал алды. Стәрлетамаҡтың йәш шахматсылары ла уңыштары менән айырылып торҙо. Розалина Яушева йөҙ шаҡмаҡлы шашка буйынса донъя беренселегендә - алтын, ә Мелания Мөләкова бронза миҙалға лайыҡ булды.

## УҠЫТЫУСЫЛАР НӘҪЕЛЕ



**Учалы районынан уҡытыусылар династияһы Бөтә Рәсәй конкурсында еңеүсе булды һәм "Иң яҡшы педагогик династия" номинацияһында беренсе урынды яуланы.**

Ғаилә ағзаларының дөйөм хеҙмәт стажы - 139 йыл. Был династияның башында педагогик хеҙмәт ветерандары Дилара Ғөбәй ҡыҙы һәм Әсғәт Әкрәм улы Нуретдиновтар тора. Балалары һәм ейәндәре лә уларҙың юлын һайлаған. Нуретдиновтарҙың ҡыҙы Зөлфиә Әминева Мулдаҡай ауылы мәктәбендә уҡытыусы булып эшләй. Ейәне Заһир Әминев - Өфө машиналар эшләү колледжы уҡытыусыһы. Ейәнсәре Ләйсән Золотарёва ла Башҡорт дәүләт педагогия университетының филология факультеты студенты. Конкурсҡа Рәсәйҙең 36 төбәгенән 205 ғариза килде, 15 ҡатнашыусы финалға үтте, тип хәбәр итә ойоштороусылар.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## КИҘЕҮ КИЛӘ

**Башҡортостанда ноябрь аҙағына тиклем киҫкен респиратор инфекциялар йоҡтороу осраҡтары артыуы көтөлә.**

Роспотребнадзор белгестәре уҙған йылдарҙағы һандарға таянып, ошондай һығымта яһаған. Әлегә һалҡын тейҙереү һәм киҙеү миҙгелдең был осорона хас. Ведомство белгестәре сирҙәрҙе иҫкәртеү өсөн киҙеүгә ҡаршы прививка яһатыу, шәхси гигиена ҡағиҙәләрен үтәү, сәләмәт тормош алып барыу мөһимлеген иҫкә төшөрә. Быға тиклем коронавирус менән сирләүселәр һаны кәмей биргәйне. Һуңғы арала 30 яңы сирле асыҡланған. Сағыштырыу өсөн: октябрь аҙағында ошо уҡ тәүлек эсендә 73 кешелә COVID-19 анализы ыңғай булған.

## ҺАЛҠЫНЫРАҠ БУЛЫРМЫ?

**Рәсәйҙең Гидрометеорология үҙәге киләһе ҡыштың һалҡын булмаҫын фаразлай. Температураның нормаға ярашлы йәки унан бер аҙ юғарыраҡ булыуы көтөлә.**

Гидрометүҙәктең ғилми етәксеһе Роман Вильфанд һүҙҙәренсә, үтә йылы 2024-2025 йылғы ҡыш менән сағыштырғанда иһә быйылғы ҡыш бер аҙ һалҡын250раҡ булмаҡсы. Вильфанд ҡыш епшек көндәрҙең күп, әммә шул уҡ ваҡытта -20 градусҡа тиклем һәм унан түбәнерәк температуралы осорҙар булыуы мөмкинлеген билдәләй. Бындай сценарийҙың тормошҡа ашыу ихтималлығы 65-68 процент тип баһалана. Хәбәр ителеүенсә, республикала октябрҙән ғинуарға тиклемге осор - нормаға яҡын, февраль һәм март айҙары норманан юғарыраҡ булыуы күҙаллана. Хәүефле метеорологик күренештәр өсөн шарттар тыуҙырған "температура тирбәлеүе" көтөлә.

"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ!




*"Киске Өфө"лө халыҡ булыуыбыҙ менән бәхетлебеҙ: төрлө йәштәге уҡыусыларының зауығын ҡәнәғәтләндерерлек илһамлы, шифа булырҙай һүҙ тылсымы йөрәктәрҙе шаҡый, кешелеклелек, мәрхәмәтлелек, шәфҡәтлелек орлоҡтары сәсә, бер-береңдең ҡәҙерен белергә өндәй.*

12+

✓ Быйылғы йыл Башҡортостан өсөн еңеүҙәргә бик бай булды, тип иҫкә төшөрҙө Килсенбаев: Парижда Шүлгәнташ мәмерйәһен тарихи таныу, "Торатау"ҙы глобаль геопарктар селтәренә индереү...



ҠЫҪҠАСА

# ЭТИКАНЫ БОҘМА!

**Башҡортостан Мәғариф министрлығы ҡарамағында педагогтарҙың намыҫын һәм абруйын яҡлау буйынса комиссия булдырылды.** Тейешле бойороҡҡа республиканың мәғариф министры Илдар Мәүлетбирҙин ҡул ҡуйҙы. Комиссия ағзаларына профессиональ этика нормаларын боҙоу факттары тураһында ғаризаларҙы ҡарарға тура киләсәк. Ултырыштар комиссия рәйесе раҫлаған график буйынса үткәрелә, әммә кварталға бер тапҡырҙан да кәм түгел. Шулай уҡ педагогтарҙан хоҡуҡтарын боҙоу билдәләре һәм хоҡуҡ боҙоусыларҙың мәғлүмәттәрен күрһәтеп, яҙма ғаризалар килһә лә ултырыш үткәреләсәк. Комиссия составына төбәктең Мәғариф министрлығы белгестәренән тыш, мәғариф хеҙмәткәрҙәре профсоюзы, хеҙмәт инспекцияһы, йәмәғәт ойошмалары ағзалары инә ала. Комиссияның бөтә ҡарарҙары ла тәҡдим итеү төрөндә була.

✓ **2026 йылда республиканың агросәнәғәт комплексында бәләкәй хужалыҡ итеү формаларына ярҙам итеү өсөн 440 миллион һум ҡаралған, был уҙған йылға ҡарағанда 20 миллион һумға күберәк, тип хәбәр иттеләр Ауыл хужалығы министрлығынан.** Ошо сумманан: 162,9 миллион һум - "Агростартап" гранттарына; 29,4 миллион һум - Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға "Агромотиватор" гранттарына; 23 миллион һум - ауыл хужалығы ҡулланыусылар кооперативтарының матди-техник базаһына ярҙам итеүгә; 130,6 миллион һум - ғаилә фермалары сығымдарын ҡаплауға; 98,2 миллион һум - кооперативтар сығымдарын компенсациялауға; 4,6 миллион һум - ауыл хужалығы кооперацияһы һәм фермерҙарға ярҙам өлкәһендәге Компетенция үҙәгенә; 20 миллион һум - "Агротуризм"гранттарына.

✓**Башҡортостанда креатив индустриялар өлкәһендә "Ижадсылар" премияһы булдырылды. Республика премияһының маҡсаты - заманса ижади мөхитте формалаштырған иң яҡшы идеяларҙы, проекттарҙы һәм командаларҙы асыҡлау.** Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, заманса креатив иҡтисадты формалаштырған иң яҡшы идеялар һәм проекттар авторҙарын асыҡлау һәм дәртләндереү был премияның төп маҡсаты булып тора. Ижади иҡтисадҡа архитектура, дизайн, мода, журналистика, әҙәбиәт һәм нәшриәт, реклама, гастрономия, халыҡ художество кәсептәре һәм башҡа йүнәлештәр ҡарай, тип иҫкә төшөрҙө республика етәксеһе. Премияла ҡатнашыуға ғаризалар 23 ноябргә тиклем ҡабул ителә. Ҡатнашыусылар өсөн түбәндәге номинациялар ҡаралған: "Креатив продукт", "Цифрлы проект", "Йыл ваҡиғаһы", "Креатив территория", "Остаз", "Медиа", "PR-кампания", "Команда", "Креатив эшҡыуар". Конкурсты ойоштороусы - Башҡортостандың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм министрлығы.

✓**Башҡортостанда уртаса пенсия күләме бер йылда 11,5 процентҡа артҡан. Республика буйынса ул яҡынса 23 мең һум тәшкил иткән.** ЕМИСС мәғлүмәттәре буйынса, ағымдағы йылдың 1 сентябренә Башҡортостанда уртаса пенсия 22 894 һум булған. Шул уҡ ваҡытта эшләмәгән пенсионерҙарҙың уртаса пенсияһы - 23 129 һум, эшләгәндәрҙең - 21 570 һум. Башҡортостан буйынса Социаль фонд мәғлүмәттәренә ярашлы, республикала 1,127 миллиондан ашыу пенсионер йәшәй. Шуларҙың 262-һе - 100 йәште үткән, 17 мене - 90-100 йәшлек, 90 мендән ашыуы - 80 йәштән 90 йәшкә тиклем. 80 йәш тулғас, страховка пенсияһына түләү ике тапҡырға арттырыла һәм 17 815 һум була.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# ТУРАХАН ӘҘЕРЛӘНӘ...



**Башҡортостандың күренекле ҡомартҡыһы Турахан кәшәнәһе ЮНЕСКО-ның Бөтә донъя мираҫы исемлегенә индерелә. Был хаҡта республика Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев белдерҙе.**

Турахан кәшәнәһе - Алтын Урҙа осоронда төҙөлгән боронғо таш ҡоролма, ритуаль комплекстың үҙәге. Кәшәнәнең ысын икәнен уның төп атрибуттары ла раҫлай. Ҡоролма урындағы әҙбизташтан һалынған, Алтын Урҙа осоронон үҙенсәлекле төҙөлөш техникаһы ҡулланылған. "Беҙ әүҙем эшләйбеҙ: визит-үҙәк астыҡ, тикшеренеүҙәр алып барабыҙ һәм ЮНЕСКО өсөн досье әҙерләй башланыҡ, - тип һөйләне Урал Килсенбаев. - Мавзолей Исламдың таралыуының үҙенсәлекле дәлиле, архитектураның күренекле өлгөһө һәм ете быуат йәшәп килгән йәнле рухи традицияның урыны булараҡ ойошманың төп критерийҙарына тап киләләр тип ышанабыҙ".

Беренсе вице-премьер тарихи мираҫты һаҡлау темаһы менән ҡыҙыҡһынған һәр кемгә мөрәжәғәт итте һәм материалдарҙы өйрәнеүҙәрен, комментарийҙар, фекерҙәр һәм тәҡдимдәр ҡалдырыуҙарын һораны. Был мөһим проект буйынса эксперт фекере оло әһәмиәткә эйә, тип билдәләне ул. Быйылғы йыл Башҡортостан өсөн еңеүҙәргә бик бай булды, тип иҫкә төшөрҙө Килсенбаев: Парижда Шүлгәнташ мәмерйәһен тарихи таныу, "алтын ҡаҙаҡтар" (стратиграфик эталондар) асыу, "Торатау"ҙы глобаль геопарктар селтәренә индереү, Өфө фән һәм технологиялар университетында ЮНЕСКО-ның яңы кафедраһы асылыуы. Ошо көндәрҙә Рәсәй Федерацияһының ЮНЕСКО эштәре буйынса комиссияһының яуаплы секретары Александр Алимов ҡатнашлығында комитеттың яңыртылған составының беренсе ултырышы уҙҙы. Унда почетлы рәйес Радий Хәбиров етәкселек итте.

Ләйлә АРАЛБАЕВА.

# СПОРТ ҺАУЛЫҠТЫ НЫҒЫТҺЫН

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Һамарҙа Владимир Путин етәкселегендәге физкультура һәм спортты үҫтереү советы ултырышында ҡатнашты.**

Президент әйтеүенсә, спорт менән даими шөғөлләнгән балалар проценты әлеге ваҡытта 90 проценттан ашып китә. Әммә, уның фекеренсә, был һандар иң мөһим нәмәне - был шөғөлдәрҙең баланың һаулығына, уҡыу һөҙөмтәләренә, физик һәм дөйөм үҫешенә йоғонтоһон сағылдырмай. Был йоғонтоно анығыраҡ билдәләү һәм балаларҙы физик тәрбиәләү һәм спортта ҡатнашыуға артабан ярҙам итеү өсөн һаулыҡ һаҡлау, спорт һәм мәғариф системалары, шулай уҡ урындағы үҙидара органдары эшмәкәрлеген берләштерергә тәҡдим ителә. Хөкүмәткә был маҡсатҡа ирешеүҙе тәьмин итеү бурысы йөкмәтелгән.

Шуныһы иғтибарға лайыҡ, Башҡортостанда 3 йәштән 17 йәшкә тиклемге 726 мендән ашыу бала даими рәүештә физкультура һәм спорт менән шөғөлләнә. Һуңғы дүрт йылда спорт менән шөғөлләнеү өсөн шарттар булдырылыуы һөҙөмтәһендә был күрһәткес 38 мең кешегә артҡан. Төбәктә йәштәр спортын үҫтереүгә йоғонто яһаусы мөһим фактор булып махсус учреждениеларҙың тренерҙары һәм штат буйынса хеҙмәткәрҙәре һана тора. Уларҙың һаны республикала - 7902. Рәсәйҙә беренсе булып Башҡортостан башлап ебәргән "Ауыл тренеры" программаһы был өлкәгә тәжрибәле белгестәрҙе йәлеп итеүгә ҙур өлөш индерҙе. Ул эшләй башлағандан алып ауылдарҙа эшләгән 179 тренерға дөйөм суммаһы 137,8 миллион һумлыҡ ярҙам күрһәтелгән. 2024 йылда республикала ошондай уҡ "Кала тренеры" программаһы эшләй башланы.

Башҡортостан йыйылма командалары составында булған 18 йәшкә тиклемге спортсылар һәм уларҙың тренерҙары йыл һайын стипендия ала. 2024 йылда 208 спортсы дөйөм суммаһы 31,6 миллион һум булған бындай ярҙамды алған. Бынан тыш, спортсылар һәм уларҙың тренерҙары ярыштарҙа еңгән өсөн өҫтәмә матди дәртләндереү саралары ала.

Төбәктә йәштәр спортына булышлыҡ итеү сараларының береһе - спорттың 12 төрө буйынса спорт әҙерлеге хеҙмәте күрһәтеү буйынса дәүләт социаль заказын тормошҡа ашырыу. Өс йыл эсендә был маҡсатта республика ҡаҙнаһынан 187,5 миллион һум аҡса бүленгән. Был социаль механизм Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡуйған маҡсатҡа - йәштәр спорты системаһында коммерциялаштырыуҙы кәметергә ярҙам итә.

Инсаф ХУЖАБИРГӘНОВ.

# ИЖАДСЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөлә күсмә "Креатив индустриялар сәғәте"н үткәрҙе. "Территория 3000" бизнес-үҙәгендә үткән кәңәшмәлә республиканың Продюсерҙар клубының яңы проекттары менән таныштырҙылар.**

Берләшмә етәксеһе һәм "Фабрика" универмагына нигеҙ һалыусы Анна Уварова клубтың эше тураһында һөйләне. 2025 йылдың апрелендә ойошторолған клубта 67 ағза - музыка индустрияһы, кино, фото һәм видеопроизводство, башҡарыу сәнғәте һәм башҡа өлкәләр вәкилдәре йыйыла. Берләшмә ағзалары даими осрашып, тәжрибә уртаҡлашып, яңы ижади проекттар тәҡдим итә. Артабан фекер алышыуҙарҙа эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеген ойоштороу һәм ижади башланғыстарҙы һәм продукцияны пропагандалау менән бәйле системалы мәсьәләләр ҡарала.

"Территория 3000" бизнес-үҙәгенә нигеҙ һалыусы Әҙил Юлдашев төрлө ижади тармаҡтарҙы берләштергән яңы кластер концепцияһы менән таныштырҙы.

Был башланғыс ижади лабораториялар һәм тематик саралар өсөн махсуслаштырылған киңлек булдырыуҙы күҙ уңында тота. Майҙанда эш майҙансыҡтары һәм студиялар, шулай уҡ презентациялар, фестивалдәр һәм фекер алышыуҙар өсөн күп маҡсатлы йәмәғәт урындары буласаҡ. Бер нисә сараны халыҡ өсөн асыҡ үткәреү планлаштырыла. Был алым ижади продукция етештергән эшҡыуарҙарға үҙҙәренең көсөн берләштерергә һәм

Н И М Ә ?  Ҡ А Й Ҙ А ?  Ҡ А С А Н ?

✓Республика Башлығы Радий Хәбиров етәкселегендә Башҡортостан делегацияһы Мәскәүҙә "Транспорт аҙналығы 2025" XIX Халыҡ-ара форум-күргәҙмәлә ҡатнаша. "Транспорт аҙналығы" РФ Транспорт министрлығы, Росавтодор, РЖД етәкселеге һәм эре инвесторҙар менән туранан-тура һөйләшеүҙәр алып барыу өсөн стратегик майҙансыҡ булып тора. Тап бында Башҡортостандың юл инфраструктураһын артабан үҫтереү мәсьәләләре хәл ителә. 19 ноябрҙә форум сиктәрендә Радий Хәбиров транспорт өлкәһендә күҙәтеү буйынса Федераль хеҙмәт етәксеһе Виктор Гулин менән осрашты.

✓Радий Хәбиров педагогия белгеслектәренең сығарылыш курстары студенттары һәм йәш уҡытыусылар, "Мин - киләсәк педагогы" слётында ҡатнашыусылар менән осрашты. "Уҡытыусы - ҡатмарлы һәм абруйлы һөнәрҙәрҙең береһе, - тине Радий Хәбиров. - Тиҙҙән һеҙ мәктәптәргә килеп, үҫеп килгән быуынды тәрбиәләй башларһығыҙ. Шуға күрә бөгөнгө осрашыуҙа беҙ һеҙҙең өсөн мәғариф системаһына файҙалы экскурс яһарға һәм һеҙҙе борсоған темаларҙы тикшерергә теләйбеҙ". Осрашыуҙа студенттар республика етәксеһенең инклюзив уҡытыуға һәм киләсәк мәктәбе образына ҡарашы, педагог һөнәренең абруйын күтәреү, яңы белгестәргә дәүләт ярҙамы саралары менән ҡыҙыҡһынды.

✓Иглин районы хакимиәте башлығы Гүзәл Насирова Башҡортостандың Ҡатын-ҡыҙҙар союзы рәйесе итеп һайланды. Был хаҡта ул үҙенең телеграм-каналында хәбәр итте. Башҡортостан Ҡатын-ҡыҙҙар союзының элекке рәйесе Рәшиҙә Солтанова 28 йыл ошо вазифаны биләне. Ошо йылдар эсендә Ҡатын-ҡыҙҙар союзы әйҙәүсе көскә әүерелде, тип билдәләне Гүзәл Насирова һәм уға эше өсөн рәхмәт белдерҙе.

✓Башҡортостандан МХО-ла ҡатнашыусы, "Терек" казак разведка бригадаһы һалдаты Максим Баль генерал Шайморатов миҙалына лайыҡ булды. Уны республика етәксеһе Радий Хәбиров хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә бүләкләне. "Беҙҙең һаҡлаусылар Оборона министрлығының төрлө подразделениеларында һәм ирекле батальондарҙа хеҙмәт итә. Яңыраҡ мин яҡташыбыҙ Максим Баль күрһәткән батырлыҡ тураһында белдем. Ул үҙ ғүмерен аямайынса, яралы яугирҙарҙы алғы һыҙыҡтан сығарған. Ҡаһарманлығығыҙ өсөн һеҙҙең алда баш эйәм", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓26 ноябрҙә, мышы, ҡоралай һәм башҡа хайуандар, шулай уҡ айыу аулау хоҡуғына ҡабаттан йәрәбә һалына. Был хаҡта Башҡортостандың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы хәбәр итә. Республиканың дөйөм ҡулланылыштағы ерҙәрендә уларға һунар рөхсәт ителә. Еңеүселәрҙе махсус программалар ярҙамында билдәләйҙәр. Йәрәбә Өфөнөң Ленин урамындағы 86-сы йортта урындағы ваҡыт буйынса иртәнге 10-сы 30 минутта башлана.

үҙҙәренең мөмкинлектәрен тулыһынса тормошҡа ашырырға мөмкинлек бирәсәк. Проектты тормошҡа ашырыу өсөн ер участкаһы һайланырға һәм яҙам саралары билдәләнергә тейеш. Башҡортостан Башлығы республиканың Ер һәм мөлкәт министрлығына Өфө хакимиәте менән берлектә яңы объект өсөн майҙансыҡ табырға ҡушты.

# ЯМАН СИРГӘ ҠАРШЫ...

**Башҡортостан икенсе тапҡыр "Онкопатруль" акцияһын уҙғарыу эстафетаһын ҡабул итте.**

"Онкопатруль" Бөтә Рәсәй мәғлүмәт-ағартыу проекты белгестәрҙең киң даирәһенә онкология ауырыуҙары менән көрәш өлкәһендәге заманса ҡаҙаныштар менән танышырға, онкология хеҙмәтен ойоштороуҙың төп мәсьәләләре буйынса фекер алышырға мөмкинлек бирә. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Онкопатруль" проектының Граждандар диалогы ултырышында белдерҙе. Республика тәүге тапҡыр "Онкопатруль" акцияһын уҙғарыу эстафетаһын 2019 йылда ҡабул иткәйне. Ул саҡта "Башҡортостан сода компанияһы" һәм "Салауатбыяла" предприятиеһының 500-ҙән ашыу хеҙмәткәре онкология сирҙәрен иртә асыҡлау буйынса диагностика үтте. Быйыл акцияға Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһе лә ҡушылды.

"Республикабыҙҙа халыҡтың үлем осраҡтарының төп сәбәптәренең береһе булған онкология ауырыуҙарына ҡаршы көрәш мәсьәләләренә айырым иғтибар бирелә. Табиптарыбыҙ башҡарған эш һөҙөмтәһендә республикала яман шештән үлем осраҡтары кәмей. 2020 йылда был күрһәткес 100 мең кешегә 169,6 булһа, былтыр - 156,8. Был эш бер нисә йүнәлеш буйынса алып барыла. Алыҫ райондарҙа йәшәгән халыҡты сирҙәрҙе, шул иҫәптән онкологияны иртә асыҡлау өсөн 2019 йылдан "Сәләмәтлек поезы" акцияһы үткәрелә. Былтыр ғына 170 мең самаһы кеше ҡаралған, 200-гә яҡын яман шеш осрағы асыҡланған. Йыл һайын ойошторолған диспансеризация барышында быйыл ғына 3 меңдән ашыу кешелә яман шешкә шик тыуған. Башҡортостан Рәсәй төбәктәре араһында "Колоректаль яман шеш скринингы" программаһын индереү буйынса лидерҙар иҫәбенә инде. Шуның һөҙөмтәһендә скрининг ваҡытында ауырыуҙы иртә стадияла асыҡлау күрһәткесе 57-нән 74 процентҡа тиклем артты", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Унын һүҙҙәренсә, Республика онкология диспансерының радиология хеҙмәте Рәсәйҙә иң ҙур нур терапияһы үҙәге булып тора. Йыл һайын беҙҙең медицина университеты 30-ға яҡын белгес-онколог әҙерләй. Әлеге көндә онкология хеҙмәтенең кадрҙар менән тәьмин ителеше - 77 процент тирәһе һәм республикала был проблеманы хәл итеү өҫтөндә эшләйҙәр. Онкопациенттарҙы дарыуҙар менән тәьмин итеү маҡсатында быйыл 2,5 миллиард һум самаһы аҡса бүленде. Был иһә льготалы дарыуҙар менән тәьмин итеүгә йүнәлтелгән аҡсаның өстән бер өлөшөн тиерлек тәшкил итә.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

## ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# МИҘХӘТ ШАКИРОВ СКВЕРЫ...

**Өфөлә республика Башлығы Радий Хәбиров ҡушыуы буйынса Башҡортостан Өлкә комитетының беренсе секретары Миҙхәт Шакиров исемендәге сквер төҙөлөшө аҙағына яҡынлаша.**

Әле төҙөлөш 90 процентҡа тамамланған, тип хәбәр итә баш ҡала мэры Ратмир Мәүлиев. Әлеге ваҡытта йәшелләндереү эштәре бара, гранит тротуар һалынған, яҡтыртыу бағаналары, ҡоймалар ҡуйылған. Мәр иҫкәртеүенсә, киләсәктә бында Миҙхәт Шакировҡа һәйкәл ҡуйыласаҡ. Ул дәүләт эшмәкәренең күренекле ҡаҙаныштарын һынландырасаҡ һәм Совет осоронда Башҡортостанды төҙөгән барлыҡ хеҙмәтсәндәргә арналасаҡ. Сквер төҙөү 2016 йылда ҡарар ителгәйне, 2020 йылда бында асфальт һалыу эштәре башҡарылды.

# ТАҒЫ ИКЕ КҮПЕР...

**Өфөлә Ағиҙел һәм Дим йылғалары аша яңы күперҙәр проекттары "Башҡортостан Республикаһы Өфө районында ғәмәлдәге "Р-240" автомобиль юлына терәлгән Ленин районында Рига урамынан һәм Дим районында Ағиҙел йылғаһы аша күпер үткәүелдәре төҙөү" объекты буйынса дәүләт экспертизаһының ыңғай һығымтаһын алды.**

Был хаҡта ҡала хакимиәте хәбәр итә. Проектта оҙонлоғо 7,63 километрлыҡ автомобиль юлы, шулай уҡ Дим йылғаһы аша (күперҙең оҙонлоғо 95 метр) һәм Ағиҙел йылғаһы аша (күперҙең оҙонлоғо 790 метр) ике күпер үткәүеле төҙөү ҡаралған. Хәбәр ителеүенсә, яңы транспорт объекты әүҙем үсешкән Ағиҙел арьяғы территорияларының Нижегородка бистәһе менән тура бәйләнешен тәьмин итәсәк. Объект төҙөлөшөн концессия килешеүе сиктәрендә тормошҡа ашырыу планлаштырыла. Республика Хөкүмәте Росавтодор менән финанслауҙы йәлеп итеү буйынса эш алып бара.

# ЖИРИНОВСКИЙ УРАМЫ

**Башҡортостандың баш ҡалаһы урамдарының береһенә билдәле сәйәсмән Владимир Жириновский исеме бирелеүе ихтимал.**

Был турала 2026 йылда ЛДПР партияһына нигеҙ һалыусының тыуыуына 80 йыл тулыуҙы билдәләүгә әҙерлек буйынса ойоштороу комитеты ултырышында иғлан ителде. Юбилей саралары сиктәрендә Өфөлә күсмә фотокүргәҙмә ойоштоурола, мәктәптәрҙә асыҡ дәрестәр, шәхестең ил үсешенә индергән өлөшөнә арналған конкурстар һәм викториналар үткәрелә. "Рәсәй Президенты Владимир Путиндың Владимир Вольфович Жириновскийҙың 80 йыллығын байрам итеү тураһында указы уның Рәсәй парламентаризмы һәм дәүләтселегә үсешенә индергән өлөшөн таныуын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Беҙҙең бурыс - ошо датаға лайыҡлы әҙерләнеү һәм күп йылдар ил мәнфәғәтенә эшләгән сәйәсмән тураһында хәтерҙе һаҡлау өсөн саралар ойоштороу", - тип белдерҙе республика парламенты рәйесе Константин Толкачев.

## БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# РИШҮӘТ - ҘУР ЕНӘЙӘТ



**Рәсәй Федерацияһы Енәйәт кодексының 291-се статьяһының 3-сө өлөшөнә ярашлы, вазифалы кешегә шәхсән йәки аралашсы аша ришүәт биргән өсөн ришүәт суммаһының утыҙ тапҡырҙан алтмыш тапҡырға тиклем күләмендә штраф һалына йәки ришүәт суммаһының утыҙ тапҡырға тиклем күләмендә штраф менән һигеҙ йылға тиклем иректән мәхрүм итеү язаһы ҡаралған.**

Дәүләт автоинспекцияһы хеҙмәткәрҙәре йыш ҡына юл ҡағиҙәләрен боҙоусы водителдәрҙең килеп тыуған хәлде ришүәт ярҙамында хәл итергә ынтылыуына юлыға. Полиция хеҙмәткәренә ришүәт биргән өсөн яуаплылыҡ хаҡында иҫкәртә Башҡортостан Республикаһы буйынса Дәүләт автоинспекцияһының матбуғат хеҙмәте. Автоинспекцияның патруль автомобилдәре видеотеркәү саралары менән йыһазландырылған, улар юлда ла, автомобиль салонында ла нимә барғанын теркәй. Хеҙмәткәргә ришүәт бирергә маташыуҙар теркәлә һәм енәйәт эше ҡуҙғатыу өсөн нигеҙ булып тора. Был енәйәтсел аҙым ҙур штраф алыуға, хатта иректән мәхрүм ителеүгә килтереүе ихтимал.

ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре үҙҙәренең хоҡуҡтарын, бурыстарын һәм бындай осраҡтарҙа нисек эш итергә кәрәклеген яҡшы белә. Дәүләт автоинспекцияһы юл хәрәкәтендә ҡатнашыусыларҙың барыһын да юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙмаҫҡа һәм административ яуаплылыҡтан ҡасып ҡалырға маташып, вазифалы кешеләргә бүләктәр тәҡдим итмәҫкә саҡыра.

## ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ҺУНАРСЫЛАРҒА



**Яңы ҡағиҙәләр беренсе тапҡыр һунар билеты алған граждандарҙы, шулай уҡ был документтан мәхрүм ителгәндәрҙе имтихан тапшырырға мәжбүр итә. Үҙгәрештәр 2025 йылдың 1 сентябренән көсөнә инде.**

Элек билет алыу өсөн минимум талаптары менән танышыу етә ине, әммә был һунарсының тәбиғәт һәм закон алдында үҙ яуаплылығын аңлау өсөн етерлек сара түгел тип танылды. Хәҙер һунарсылар хайуандар биологияһын, хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен, һунар итеүҙең рөхсәт ителгән ысулдарын һ.б. белергә тейеш. Белемде тикшереү буйлай үткәрелә. Ғариза формаһы, имтихан үткәреү даталары һәм урындары тураһында мәғлүмәт министрлыҡ сайтында баҫылаҫаҡ.

Башҡортостанда 83 меңдән ашыу һунарсы теркәлгән, уларҙың һунар билеты һәм ҡорал һаҡлауға һәм йөрөтөүгә рөхсәте булырға тейеш. Һунар ваҡытында был документтарҙы, шулай уҡ дөйөм ҡулланылыштағы ерҙәрҙә һунар ресурстарын табыуға рөхсәт алырға кәрәк. Беркетелгән һунар биләмәләрендә өҫтәмә юллама кәрәк буласаҡ. Был документтарһыҙ һунар итергә ярамай, ҡануниәтте боҙған өсөн административ һәм енәйәт яуаплылығы ҡаралған.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ Мәғариф һәм фән өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын үткәреү теҙмәһенә үҙгәрештәр индерҙе. 2026 йылдан Төп дәүләт имтиханы һәм Берҙәм дәүләт имтиханы 1 июндән һуң башлана. Имтихан кампанияһын һуңыраҡ башлау ваҡыты сығарылыш уҡыусыларына уҡыу процесын ҡыҫҡартмайынса уҡыуын тамамларға мөмкинлек бирәсәк. Рәсәйҙең Мәғариф министрлығы һәм Рособрнадзорҙың 2026 йылға имтихандар теҙмәһен раҫлаған бойороҡтары әҙерләнгән, тип асыҡлыҡ индерҙеләр ведомствола.

✔ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөлә Совет районының 80-се полиция участка пунктында эшләгән полицияның участка вәкилдәре Ульяна Хәйретдинованы һәм Динар Хәйбрахмановты һөнәри байрамы менән ҡотларға килде. Республика етәксеһе участковыйҙарҙың эше, халыҡтың уларға ниндәй һорауҙар һәм проблемалар менән мөрәжәғәт итеүе менән ҡыҙыҡһынды. Ульянаның тормош иптәше (позывнойы "Башҡорт") әле Махсус хәрби операцияла ҡатнаша, уларҙың кескәй ҡыҙҙары бар. Полиция майоры Динар Хәйбрахманов үҙенең 15 йылдан ашыу участковый булып эшләүе хаҡында һөйләне.

✔ Башҡортостанда Баймаҡ - Аҡморон юлында асфальт япмаһы яңыртыла. Был хаҡта район башлығы Азамат Иҙрисов хәбәр итте. Унын һүҙҙәренсә, юлдың бер өлөшөндә асфальт ҡубып сыҡҡан. "Миңә асфальт ҡубыуы хаҡында хәбәр еткерҙеләр. Мин шунда уҡ подрядсы ойошманың эшен тикшерергә килдем. Эшселәр тиҙ арала проблеманы хәл итеүгә тотондо - асфальт япмаһы алынды, әле ер өҫтөн тигеҙләйҙәр, ҡырсынташ тултыралар. Мәсьәләне даими тикшереүгә алдыҡ, халыҡҡа борсолорға урын юҡ", - тип билдәләне район башлығы.

✔ Рәсәй Президенты Владимир Путин Башҡортостандың Асҡын районы башлығы Динис Йосоповты эшендәге уңыштары һәм күп йыллыҡ намыҫлы хеҙмәте өсөн Маҡтау грамотаһы менән бүләкләне. Динис Йосопов 2021 йылда Асҡын районы хакимиәте етәксеһе итеп тәғәйенләнде. Быға тиклем ул башлыҡтың социаль мәсьәләләр һәм эске сәйәсәт буйынса урынбаҫары, шулай уҡ Башҡортостан Башлығы хакимиәтенең муниципаль берәмектәр менән үҙ-ара эш итеү идаралығының урындағы үҙидара органдары менән эшләү бүлегенең баш кәңәшсеһе була.

✔ Ишембай районының "Торатау" геопаркында Дуҫлыҡ аллеяһы барлыҡҡа килде. Геопарк хеҙмәткәрҙәре "Йәшел Башҡортостан" ойошмаһы вәкилдәре менән бергә Торатау итәгендә 100-гә яҡын шыршы һәм ҡарағай ултыртты. "Геопарк - территорияның индустриаль булмаған үҫеш формаһы. Беҙ үҙебеҙгә килеп еткән мираҫты һаҡлап ҡына ҡалмайбыҙ, төрлө ысулдар менән экологияны һаҡлауға үҙ өлөшөбөҙҙө индерергә тырышабыҙ", - тип билдәләне "Торатау" геопаркының генераль директоры Заһир Хәҙимуллин.

***✓ Аҡсаның яңы төр вариантының кире яҡтары күберәк тип табылды. Мәҫәлән, беренсе урында - персональ мәғлүмәттәргә хәүеф янауы, унан ҡала интернетҡа бәйлелек һәм уның тотороҡло булмауы аталды.***



*ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ*



## ХӘРБИҘӘРГӘ ЯРҘАМ

**МХО контрактсылары хеҙмәт стажы өсөн пенсияның 100 проценты күләмендә компенсация аласаҡ.**

Һүҙ Оборона министрлығы менән контракт төҙөгәнгә тиклем төрлө көс структураларының пенсионерҙары булған Оборона министрлығы, Эске эштәр министрлығы, Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы, Федераль яза башҡарыу хеҙмәте, Росгвардия һәм башҡа хәрбиҙәр тураһында бара. Элек, контракт төҙөлгәндән һуң, улар пенсия алыу хоҡуғын юғалта ине, әммә хәҙер уны компенсация түләүҙәре рәүешендә аласаҡ. Бынан алда был түләүҙе Президент Хөкүмәткә Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ғына түләргә ҡушҡайны, ә хәҙер сик буйы төбәктәрендә Украина ҡораллы формированиеларының һөжүмен кире ҡаҡҡандарға ла бирелә. Ҡарар 2024 йылдың 6 авгусынан барлыҡҡа килгән хоҡуҡи мөнәсәбәттәргә ҡағыла һәм илдең именлеген яҡлаусы хәрбиҙәргә ярҙам итеүгә йүнәлтелгән.

## "БУЛА" БУЛДЫРА

**Архангел районынан "Була" позывнойлы яугир МХО биләмәһендә лейтенант исемен алған. Ул 2022 йылдың апреленән Махсус операцияла ҡатнаша.**

"Мин заводта эшләп йөрөй инем. Ағайым шылтыратып, контракт төҙөргә һәм МХО-ға китергә тәҡдим итте. Йыйындыҡ та хәрби комиссариатҡа барҙыҡ", - тип офицерҙың һүҙҙәрен килтерә "Z махсус операция геройҙары" телеграм-каналы. Хәрби юлының башында "Була" ҡаты яраланған. Оҙайлы реабилитациянан һуң яңынан сафҡа баҫҡан. Быйыл башҡорт яугиры лейтенант исемен алған. Алғы һыҙыҡта күрһәткән ҡаһарманлығы өсөн Жуков һәм "Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыға" миҙалдары, Шайморатов миҙалы менән бүләкләнгән. Өйҙә уны ҡыҙы һәм улы еңеү менән ҡайтыуын көтә.

## ХӘТЕР - АЛЛЕЯЛА

**Баймаҡ районының Темәс ауылында МХО-ла ҡатнашыусылар аллеяһы булдырылған. Был эшкә МХО ветерандары, урындағы халыҡ һәм эшҡыуарҙар күп көс һалған.**

Улар аллея өсөн урын әҙерләгән, биләмәне кәртәләп алған, ерен һөргән, һуңынан ағастар ултыртҡан. Темәс ауыл советы башлығы Айгөл Байрамғолова әйтеүенсә, тиҙҙән аллеяла иҫтәлекле стела ҡуйырға йыйыналар, уны әҙерләй башлағандар.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, әгәр ҙә Башҡортостан халҡы Махсус операцияла ҡатнашыусыларҙың хәтерен мәңгеләштерергә теләй икән, бындай мәсьәлә муниципаль кимәлдә хәл ителергә тейеш, тип белдергәйне Башҡортостан Башлығы тура бәйләнеш ваҡытында. Махсус операция тамамланғас, Өфөлә МХО геройҙарына арналған дөйөм республика мемориалы ҡуйыла, тип өҫтәне Радий Хәбиров.

*КӨН ТЕМАҺЫ*

# АҠСАНЫҢ КҮҘЕ ЛӘ... ҮҘЕ ЛӘ ЮҠ

**Йәмғиәттә бик күп бәхәстәр һәм хатта хәүеф тыуҙырыусы цифрлы һум - ҡулаҡса һәм ҡулаҡсаһыҙ төр аҡсалар менән бер рәттән, Рәсәй милли валютаһының өсөнсө төр варианты. Бөтөн был төрҙәр ҙә 1:1:1 нисбәтендә бер-береһенә тигеҙҙәр. Цифрлы һумдар коммерция банкылары иҫәбендә түгел, ә Рәсәй Банкының цифрлы "аҡса янсығы"нда һаҡланасаҡ. Шул уҡ ваҡытта граждандар цифрлы һумдарҙа иҫәп аса һәм уны көнегелгән банк ҡушымталары рәүешендәге платформалар аша файҙалана аласаҡ.**



Әлегә цифрлы һумдар менән эш итеүҙә тиҫтә ярымдан ашыу Рәсәй банкы, 1,2 мең компания һәм 9 мең граждан тәжрибә-һынау үтә. Киләһе йылдан был төр һумдар киң файҙаланыуға индерелә башлаясаҡ, ләкин Үҙәк Банк башлығы Эльвира Нәбиуллина вәғәҙәләүенсә, граждандарҙы яңы төр валюта менән файҙаланыуға мәжбүр итеү булмаясаҡ.

Тик бына был вәғәҙәгә ышанырғамы, юҡмы? Ни өсөн тигәндә, әлегә күпселек кеше араһында "цифрлы һум" тигән һүҙ үгеҙгә ҡыҙыл сепрәк болғаған кеүек тәьҫир итә. Бер яҡтан, йылдар буйы күнегелгән тәртиптәрҙе байтаҡтар өсөн таныш булмаған вариантҡа алмаштырыу, яңылыҡҡа күсеү һәр ваҡыт ризаһыҙлыҡ һәм протест тыуҙыра. Өҫтәүенә, интернет технологияларын үҙләштереүҙә ауырлыҡ кисереүсе кешеләр һәм айырыуса өлкән быуын вәкилдәре өсөн был яңылыҡ "ҡара урман" булып тойола. Улай ғына ла түгел, Бөтөн Рәсәй йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү үҙәге (ВЦИОМ) үткәргән һорау алыуҙарҙа 1,5 меңдән ашыу кеше ҡатнашып, шуларҙың 51 проценты Үҙәк Банктың был яңылығын ҡабул итергә әҙер булмауын белдергә, 35 процент респондент ыңғай ҡараште.

Шуныһы ҡыҙыҡ: халыҡтың өстән бер өлөшө фәҡәт ҡулаҡсаға ғына ышаныс белдерә. Үҙәк Банк иһә Рәсәй граждандарының ниндәй ҙә булһа берәй яңылыҡҡа ҡарата тәүҙәрәк ана шундай төшөнкө мөнәсәбәттә булыуын аңлап ҡабул итеүен, ләкин шул һүрәттә лә цифрлы һумды бойомға ашырыу буйынса мәғлүмәти кампанияны дауам итәсәген белдерә. Бынан алдараҡ "Һаҡлыҡ банкы" башлығы Герман Греф та хатта цифрлы һумға ҡарата икеләнеүҙәрен белдергәйне: "Мин әлегә был мәсьәләнең бер ниндәй киләсәген күрмәйем, нимәгә кәрәк булды ул - физик шәхес булараҡ, уны аңламайым, банк өсөн дә шулай уҡ", - тигәйне ул.

Нисек кенә булмаһын, быйыл йәй Дәүләт Думаһы банктарҙы һәм һатыусыларҙы 1 сентябрҙән эҙмә-эҙлекле рәүештә цифрлы һум платформаһына күсерә башлау тураһында закон ҡабул иткәйне. Финанс буйынса эксперт Андрей Чирков Рәсәйҙең ярты халҡының ғына түгел, хатта банкирҙарҙың да күпселегенең цифрлы һумдың нимәгә кәрәк булыуын аңлап бөтмәүҙәренә аптырамауын белдереп, һәр хәлдә бының банктар өсөн әллә ни яҡшы түгеллеге хаҡына яҙып сыҡҡайны. Сөнки әле ғәмәлдә булған банк клиенттарының ҡулаҡсаһыҙ һумдары коммерция банктарында түгел, ә Үҙәк Банк балансында асыласаҡ. Шул сәбәпле Һаҡлыҡ банкылары физик һәм юридик шәхестәрҙең һаҡламдарын юғалтасаҡ һәм элеккесә аҡса эшләп, килем алыуҙан мәхрүм ителәсәк. Ә физик шәхестәргә килгәндә, улар өсөн дә цифрлы һум бер ниндәй ҙә ғәмәли отош килтермәйәсәк, ти Чирков.

Плеханов исемендәге Рәсәй иҡтисад университеты деканы, иҡтисад фәндәре докторы Константин Ордов әйтеүенсә, цифрлы һум әлегә бер аҙ томанлыраҡ күҙалланһа ла, уның финанс системаһы етди мәсьәләгә әйләнеүе бар. Мәҫәлән, ҡайһы берәүҙәрҙең цифрлы валютаны "банктарҙың башына етеүсе" тип атауҙарын әйтеп китте. Ә бына ябай граждандарға цифрлы һумдан хәүефләнергә кәрәкмәй, ти ул. Цифрлы һум дәүләт күҙлегенән сығып ҡарағанда, бюджет процесында ҙур өҫтөнлөккә эйә буласаҡ.

ВЦИОМ һорау алыуҙарында ҡатнашыусылар яңы рәүешле аҡсаның ыңғай һәм кире яҡтарын да әйтеп бирҙе. 10 процент кеше яңы форманың иң беренсе сиратта бурҙар һәм муттарҙан хәүефһеҙлеген, ә 3 процент кеше хисаплашыуҙа уңайлығын һәм дәүләт тарафынан контроль булыуын атаны. Ә бына аҡсаның яңы төр вариантының кире яҡтары күберәк тип табылды. Мәҫәлән, беренсе урында - персональ мәғлүмәттәргә хәүеф янауы, унан ҡала интернетҡа бәйлелек һәм уның тотороҡло булмауы аталды, сөнки Рәсәйҙә интернет йыш ҡына

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан 2025 йылдың 10 айында 271 миллион долларға торошло 428 мең тоннанан ашыу ауыл хужалығы продукцияһын сит илдәргә һатҡан. Был уҙған йылдың ғинуар - октябренә ҡарағанда 8 процентҡа күберәк. Тотороҡло сауҙа бәйләнеше 31 ил менән урынлаштырылған. "Традицион партнерҙар менән эшләйбеҙ, шулай уҡ экспорт өсөн яңы баҙарҙар үҙләштерелә", - ти ауыл хужалығы министры вазифаһын башҡарыусы Рәмил Нуриәхмәтов

✓Мәскәүгә, унда белем алған студенттар һәм аспиранттар өсөн, "Башҡортостандан һөйөү менән" тип исемләнгән ылау ойошторолдо. Илебеҙҙең баш ҡалаһына ата-әсәләрҙән 100-ҙән ашыу посылка барып етте. Акция студенттарҙың үтенесе буйынса Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбировтың ярҙамы менән башланып киткәйне. Бындай ылауҙар уҡыу йылы барышында кәм тигәндә өс тапҡыр ойоштороласаҡ: ноябрь байрамдарынан, ҡышҡы каникулдарҙан һуң һәм йәйге сессия башланыр алдынан.

✓Дыуан, Баҡалы райондарында "Рәсәй эше" модулле кадрҙар үҙәге асылды. Башҡортостан халыҡ мәшғүллеге хеҙмәтен комплекслы яңыртыу буйынса федераль проекттың икенсе өлөшөндә 2024 йылдан ҡатнаша. Һөҙөмтәлә республикала эшләп килгән 69 кадрҙар үҙәгенең 51-е яңыртылған. Әйткәндәй, 2025 йылдың аҙағына Рәсәйҙең 46 төбәгендә 1200 самаһы яңыртылған кадрҙар үҙәге эшләй башлаясаҡ.

✓Республиканың ауыл хужалығы министры вазифаһын башҡарыусы Рәмил Нуриәхмәтов белдереүенсә, биш йыл эсендә Башҡортостанда аҙыҡ-түлек етештереү 70 проценттан ашыуға артҡан. 2025 йылдың туғыҙ айында иһә, былтырғы осор менән сағыштырғанда, күрһәткес 122 процент менән билдәләнгән. Рәсәйҙә ул уртаса - 99,4 процент.

✓Мәғариф һәм фән өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт 2026 йылғы имтихан кампанияһына БДИ предметтарының береһен ҡабаттан тапшырыу хоҡуғын һаҡлап ҡала. "Был башланғыс һаҡлана, ул хәҙер даими рәүештә", - тип ведомство башлығы Анзор Музаевтың уҡыусыларҙың ата-әсәләре менән осрашыуҙағы әйткән һүҙҙәрен килтерә РИА Новости агентлығы. Анзор Музаев әйтеүенсә, ҡайтанан тапшырған ваҡытта өҫтәмә предметтар индереү планлаштырылмай. Быға мохтажлыҡ юҡ, тип өҫтәне ул.

✓Рәсәй эске эштәр министры, полиция генералы Владимир Колокольцев Рәсәй Эске эштәр министрлығының XV "Халыҡ участковыйы" Бөтә Рәсәй конкурсы еңеүселәрен бүләкләү тантанаһында ҡатнашты. Ярышта өсөнсө урынды Рәсәй Эске эштәр министрлығы Нефтекама буйынса бүлегенең полиция участка вәкиле, полиция майоры Айрат Ямалов алды. Яҡташыбыҙға ведомствоның "Хеҙмәт батырлығы өсөн" миҙалы, маҡтау грамотаһы һәм ҡиммәтле бүләктәр тапшырылды.

*✓ Үткән быуаттың күптәрҙе төп башына ултыртҡан "аҡса яныуы" ваҡиғалары халыҡ хәтеренән юйылмаған әле. Аҡса мәсьәләһендә ябай халыҡтың тапҡан-таянғанын ҡурсылап, шик-шөбһәгә бирелеүе бик тә аңлашыла.*



йә тотҡарланып ҡаҡшата, йә бөтөнләй "бикләп" ҡуйыла. Ә бына 3 процент кеше өҫтөнлөк тип иҫәпләгән властар тарафынан контролде икенсе төркөмдәге 8 процент, киреһенсә, етешһеҙлек тип белдерә. ВЦИОМ анкетаһына бәйле булмаған тағы бер объектив етешһеҙлек тип цифрлы һумдың ни икәнен һәм уның нисек эшләйәсәген Рәсәй халҡының яртыһының тиерлек бөтөнләй күҙ алдына ла килтерә алмауы атала, сөнки күпселек аңында цифрлы һум абстракт категория булараҡ һынлана. Был граждандарҙың финанс грамоталылыҡ кимәленең түбән булыуына ла бәйле, әлбиттә. Һорау алыуҙарҙа ҡатнашҡан 18-24 йәшлек респонденттарға был ҡағылмай, сөнки улар йүргәктән сыҡҡандан алып интернет киңлектәрендә балыҡтай "йөҙгәнлектән", күп мәсьәләләрҙә яҡшы хәбәрҙар.

Тағы ла шуныһы бар: аҡсаның был формаһы һаҡланма, йәғни депозит була алмай һәм уға проценттар түләнмәйәсәк. Ул шулай уҡ Рәсәй иҡтисадының да аҡса миҡдарына үҙгәреш килтермәйәсәк, тип хәбәр итте 1 ноябрҙә Үҙәк Банктың матбуғат хеҙмәте. РФ Банкы белдереүенсә, Рәсәй һумының бөтөн төрҙәре лә: ҡулаҡсалы, ҡулаҡсаһыҙ һәм цифрлыһы ла бер-береһен алмаштыра ала. Үҙәк Банк етәксеһе Эльвира Нәбиуллина 30 октябрҙә белдереүенсә, цифрлы һум бюджеттағы аҡсаның нимәгә тотонолоуын күҙәтеү мөмкинлеге бирә. Әлеге ваҡытта цифрлы һумды капиталь төҙөлөштә һынап ҡарау башланды, тине Банк башлығы. Рәсәй финанс министры Антон Силуанов һумдың яңы төрөнөң ышаныслы булыуын һәм был форманың нигеҙҙә бюджет үтәлеше мәнфәғәтен күҙәтеүен билдәләй, сөнки, ти ул, уны контролләү юғары кимәлдә алып барыласаҡ.

Иҡтисадсылар цифрлы һумды ғәмәлгә индереүҙе тиҙләтеүҙең төп өс сәбәбен атаны: 1) геосәйәси шарттар һәм халыҡ-ара түләү системалары менән файҙаланыуҙы сикләүсе санкция баҫымы; 2) Үҙәк Банктың цифрлы валюта (CBDC) өлкәһендә Ҡытай, Евросоюз һәм башҡа илдәр яғынан көнәркәшлектең үҫә барыуы; 3) Милли иҡтисадтың транзакцион сығымдарын кәметеү маҡсатында финанс инфраструктураһын яңыртыу кәрәклеге.

Әбына ябай граждандар өсөн был системаның ниндәй өҫтөнлөктәре хаҡында һүҙ алып барыла һуң? Беренсенән, цифрлы һум менән файҙаланыусыларҙың аҡсаһын һаҡлау ышаныслы кимәлдә буласаҡ, тип вәғәҙәләнә. Тик был тәңгәлдә айырым-асыҡ әйтелмәй: халыҡ аҡсаһын муттарҙан һаҡлаумы, әллә... Хоҙай күрһәтмәһен, дефолт-фәлән хәтәренәнме? Үткән быуаттың күптәрҙе төп башына ултыртҡан "аҡса яныуы" ваҡиғалары халыҡ хәтеренән юйылмаған әле. Аҡса мәсьәләһендәге һәр төрлө яңылыҡ-тәжрибәләрҙән шуға күрә лә ябай халыҡтың тапҡан-таянғанын ҡурсылап, шик-шөбһәгә бирелеүе бик тә аңлашыла.

Өҫтәүенә, граждандарҙың шәхси сығымдары һәм аҡса күсереүҙәренең ентекле күҙәтеү аҫтында буласағы ла һорауҙар тыуҙырмай ҡалмай. Шул уҡ ваҡытта бая үрҙә әйтеп кителеүенсә, цифрлы һумды файҙаланыуҙа кешенең шәхси мәғлүмәттәренең асыҡлығы ла борсоуға һала күптәрҙе. Иҡтисад даирәләрендә пенсия, социаль түләүҙәр һәм эш хаҡтарын цифрлы һумдарға күсереү буйынса ла бәхәстәр бара. Рәсәйҙәр аҡсаларын цифрлы һумдарҙамы, әллә, элеккесә, картала йәки Рәсәй почтаһы аша ҡулаҡсала аламы - был йәһәттән һәр кемгә үҙе теләгән форманы һайлау хоҡуғы бирелә, тип ышандырыуҙары ғына күңелде бер аҙ тынысландыра төшә. Ә шулай ҙа киләсәктә тәжрибә көндәлек ғәмәлиәткә әүерелеп, кеше күҙе яңылыҡ өҫтөнлөктәрен үҙе күреп инанмай тороп, күпселектең ыңғай хуплауына өлгәшеү өсөн ваҡыт бар әле.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ЕРЕНӘН АЙЫРЫЛҒАН - ЕЛГӘ ОСҠАН

**Үткән йәкшәмбе Рәсәйҙең "Үҙәк" төркөмө подразделениелары Донецк Республикаһының Красноармейск торaҡ пунктында ҡаланың төньяҡ-көнбайыш һәм көнсығыш кварталдарында ҡамауҙа ҡалған Украина Ҡораллы көстәре ғәскәрҙәренең блокаданы йырып сығырға маташыуына юлды өҙҙө һәм утыҙлаған украин һалдаты менән уларҙың хәрби техникаһын юҡ итте.**

Артабан дошман оборонаһы эсенә үтеп инеүҙе дауам итеп, Донецк Республикаһының Артемовка, Родинское, Октябрьское, Яңы Александровка һ.б. тораҡ пункттарында, шулай уҡ Днепропетровск өлкәһе төбәктәрендә тағы ла дүрт механизациялы, десант-штурмлаусы, ике егерь һәм штурмлаусы полк менән диңгеҙ пехотаһы бригадаһы, ике милли гвардия көстәренә һөжүм итте, 6 атаканы кире ҡаҡты. Сумы һәм Харьков өлкәләрендә ВСУ көстәре ваҡытлыса урынлашып тороу пункттары итеп аңлы рәүештә мәктәп биналарын һәм торлаҡ йорттар араһын һайлай. Пленға төшкән боевик Антон Чернявский һөйләүенсә, мәктәптәрҙең спорт залдары казармаға әйләндерелгән. Ошондай юл менән дошман ғәскәрҙәре тыныс граждандар артына боҫоп, ҡотолоп ҡалырға уйлай. Был әхлаҡһыҙлыҡ, ти тотҡон.

Шулай уҡ плендағы икенсе бер боевик Александр Самодай Украина командованиеһының ябай һаладаттарҙы кешегә лә иҫәпләмәүҙәре хаҡында һөйләй. Боевиктар фронттың алғы һыҙығына ебәрмәһендәр өсөн командирҙарға үҙҙәренең эш хаҡын түләргә мәжбүр. Украина армияһында коррупция киң таралған. Марьян Мороз исемле боевик һөйләүенсә, ул үҙенең бөтөн аҡсаһын командирына биреп торған һәм аҙаҡ иҫәпләүенсә, ришүәт өсөн 8 мең доллар аҡсаһы киткән, шуға ҡарамаҫтан, уны барыбер, һалдат үҙе әйтеүенсә, "бер граната менән" һуғыштың иң ҡыҙыу нөктәһе - Сумы өлкәһенә ебәрәләр. Ләкин украин һалдаты һуғышырға теләмәй, һәм ул беҙҙең ғәскәрҙәргә бирелеүҙе өҫтөн күрә.

Коррупция тигәндән, үткән аҙнала Украинала ошо йәһәттән ғауға ҡупты: илдең Коррупцияға ҡаршы прокуратураһы менән Коррупцияға ҡаршы милли бюро Владимир Зеленскийҙың яҡын әшнәләрен энергетика өлкәһендә 100 млн доллар дәүләт аҡсаһын үҙләштереүҙә ғәйепләне. Тентеү ваҡытында сит ил валютаһы менән тыңҡыслап тултырылған сумка табыла, ундағы аҡсаның иҫәбен әлегә әйтмәйҙәр. Һөҙөмтәлә биш кеше ҡулға алына, ә бына енәйәти пландарҙың идеологы, бөтөн ҡырын эштәрҙе ойоштороусы һәм халыҡ араһында "Зеленскийҙың кәшәлүге" ҡушаматлы бизнесмен Тимур Миндич менән финансист Александр Цукерман тентеүҙәр алдынан ғына Израилгә ҡасып өлгөрә. Зеленскийҙың ярҙамсылары бөтөн ғәйепте Миндич өҫтөнә япһарырға итһә лә, Financial Times гәзите яҙып сығыуынса, халыҡ алдында Киев лидерының үҙенә лә яуап тоторға тура киләсәк, сөнки ошоға тиклем дә Зеленскийҙың ҡырын-мырын эштәре хаҡында хәбәрҙәр таралған була. Ә бына был хаҡта Европа элитаһы менән АҠШ президенты Дональд Трамп нимә тиерҙәр - әлегә билдәһеҙ.

Үткән шәмбелә Киевтың үҙәк майҙанында ошо хәл айҡанлы Зеленскийға һәм власть эшелондарында коррупцияға ҡаршы митинг булып үтте. Украина Радаһы депутаты Ирина Геращенко әйтеүенсә, Киев был хәлдән һуң Көнбайыш ярҙамынан ҡолаҡ ҡағыуы бик ихтимал. Австралиялағы бойондороҡһоҙ Conversation баҫмаһы, Украинала энергетика өлкәһендәге коррупция ғауғаһы Зеленский өсөн ваҡытһыҙыраҡ - Украина Ҡораллы көстәренең фронттағы еңелеүҙәре һәм украин энергетика объекттарының Рәсәй һөжүменән һуңғы эшлектән сығыу осорона тура килде, тип яҙып сыҡты. Украин олигархы Игорь Коломойский (Росинмониторингтың террористар һәм экстремистар исемлегенә индерелгән) Украина президенты Владимир Зеленскийҙың сәйәси карьераһы ахырын фаразлай. Тап ошо мәлдәрҙә Киевҡа килгән Die Welt хәбәрсеһе Кристоф Ваннер фекеренсә, Киев, ысынлап та, Зеленский өсөн хәүефле урынға әүерелде. 16 ноябрҙә Францияның сит ил эштәре министры Жан-Ноэль Барро белдереүенсә, әгәр Украина Евросоюз ярҙамына иҫәп тота һәм уның составына инергә теләй икән, коррупция менән аяуһыҙ көрәшергә тейеш. Ләкин, шуға ҡарамаҫтан, шул көндө үк Финляндия, Дания, Эстония, Исландия, Латвия, Литва, Норвегия һәм Швеция НАТО һәм АҠШ башланғысы сиктәрендә Украинаға "инселәнгән" 500 млн доллар ярҙам пакетын хуплауҙарын белдерҙе.

Башҡа ҡайһы бер темаларға хәбәрҙәрҙән. Мәғлүм булыуынса, 3 ноябрҙә үк әле АҠШ президенты Трамп Штаттарҙың ядро һынауы үткәрергә ниәтләүе хаҡында белдергәйне. Шуның менән бергә ул үҙенең бындай ниәте өсөн яуаплылыҡты, йәнәһе лә, улар үҙҙәре лә бындай һынауҙар үткәрә, тип, Рәсәй менән Ҡытайға япһарҙы. Ләкин был ысынбарлыҡҡа тап килмәй, тип яҙа АиФ гәзите үҙенең "Рәсәй АҠШ провокацияһына бирелмәйәсәк" тигән күҙәтеү материалында. Ҡытай иң һуңғы һынауҙарҙы - 1996-ла, ә Рәсәй һуңғы тапҡыр уны совет осоронда уҡ - 1990 йылда үткәрҙе. РФ Хәүефһеҙлек советы ултырышында Владимир Путин Рәсәйҙең ядро һынауҙарын АҠШ һәм башҡа илдәр башҡарған хәлдә генә үткәрәсәге хаҡында белдерҙе. Шул уҡ ваҡытта президент Сит ил эштәре, Оборона министрлыҡтарына, махсус хеҙмәттәргә һәм граждандар ведомстволарына ядро ҡоралын һынауҙарға әҙерлек ихтималлығы хаҡында тәҡдимдәр индерергә ҡушты һәм Рәсәйҙең Ядро һынауҙарын тыйыу хаҡындағы килешеүҙән тайпылмаясағын әйтте. Ә бына Трамп һәм уның командаһының 3 ноябрҙәге белдереүе ысынлап та нигеҙлеме һәм ул планлаштырыламы, юҡмы - улар тарафынан бер ниндәй аңлатма булманы. Шулай ҙа Рәсәйҙә бындай хәлдәргә лә әҙер булырға хәл ителде, юғиһә, АҠШ һуңғы ваҡытта агрессив холҡон күрһәтә башланы. Мәҫәлән, Трамп Венесуэлала хәрби операция ихтималлығын ҡарауын белдерҙе.

Telegram-канал таҫмаһынан бер хәбәр: рәсәйҙәрҙең 2008 йылда Египетта һатып алған элиталы фатирҙарын тартып алғандар. Был торлаҡ комплексы алып ултырған ер урындағы Housing and Development банкы милкендә булған. Торлаҡ комплексы хужаһы үлгәс, уның банк алдында бурыстары ҡалған. Судтан һуң банк фатирҙарҙың йоҙаҡтарын алмаштырып, уның хужаларын ҡыуып сығарған. Был хәл "Ер кемдеке булһа - ел шуныҡы, бей кемдеке булһа - ил шуныҡы" тигән халыҡ аҡылын иҫкә төшөрҙө. Ысынлап та, еренән айырылған - елгә осҡан...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Инженер селтәрҙәрен ремонтлауға бәйле Өфөнөң ҡайһы бер урамдарында хәрәкәт ваҡытлыса сикләнә, тип иҫкәртә мэрия. 28 ноябрҙә 89-сы йорт эргәһендә Салауат Юлаев проспектының бер өлөшө ябыла. Блюхер урамы буйлап 1/1-се һанлы бина менән 1-се йорт араларында юл хәрәкәте 25 февралгә тиклем сикләнә.

✓Баш ҡалала яңы йыл шыршыһын ҡуя башланылар. Затон биҫтәһенең шәхси йорттарының береһендә ҡырҡылған ҙур ағас "Тулҡын" паркына ингән урында ҡуйыласаҡ. Уны бысҡанда, тирә-яҡ йорттарға хәүеф янамаһын өсөн, төҙөлөш краны ярҙамында тотоп торалар. Был хаҡта Ленин районы хакимиәтенән хәбәр иттеләр.

✓Башҡортостандан Мальвина Әминева мас-рестлинг буйынса Европа чемпионатында көмөш призер булды. Республика Хөкүмәте вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов яҡташыбыҙҙы еңеүе менән ҡотланы. Словакияла уҙған турнирҙа донъяның 11 иленән атлеттар ҡатнашты. Мальвина Әминева Рәсәйҙең милли йыйылма командаһы составында сығыш яһаны. Бүләкләү тантанаһына ул илебеҙ флагы менән сыҡты.

✓"Башнефть" яғыулыҡ ҡойоу станцияһында бензинға һәм дизель яғыулығына хаҡтар артҡан. Мәҫәлән, АИ-92 маркалы яғыулыҡтың бер литры өсөн водителдәргә хәҙер 59 һум (+10 тин), АТUM-92 өсөн 60,30 һум (+10), АИ- 95 АТUM өсөн 64,15 һум (+20), АИ-95 өсөн 62,90 (+20) түләргә тура килә. Дизель яғыулығының хаҡы 50 тингә ҡиммәт - 72,90 һум. АИ-100 бензинының хаҡы үҙгәрмәгән (83,65 һум).

✓Республика бадминтонсылары Рәсәй чемпионатында алтынсы тапҡыр ҡатнаш парлы разрядта бадминтон буйынса Рәсәй чемпионы булды. Финалда Башҡортостан бадминтонсылары Мәскәүҙән Александр Зинченко һәм Виктория Воробьеваны еңде. Был хаҡта республика Хөкүмәте вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов хәбәр итте. Шулай уҡ Алина Дәүләтова һәм Родион Алимов ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар парлы разрядтарында алтын миҙал яуланы. Улар Мәскәү спортсылары Анастасия Акчурина һәм Максим Оглоблин менән бергә сығыш яһаны.

✓2025 йылда Башҡортостанда Рәсәйҙә беренсе булып, һуҡыр һәм насар күргән кешеләр өсөн спорттың уңайлылығын арттырыу маҡсатында, адаптив физик культура өлкәһендә пилот проекты старт алды. Проектта кәм тигәндә 300 кеше ҡатнашасаҡ тип күҙаллана. Улар - 6 - 17 йәшлек күреү һәләте боҙолған балалар, шулай уҡ 18 йәштән 70 йәшкә тиклемге I, II һәм III күреү һәләте буйынса инвалидлыҡ төркөмөнә ҡараған өлкәндәр.

**“БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.**

**✓ Кеше банктан аҡса алып та, уны түләп бөтә алмаҫ борон яҡты донъянан киткән хәлдә, уларҙың бурысын балалары ҡаплап бөтөргә тейеш икән. Уның бурыстары шул көйө генә "һауала аҫылынып" тороп ҡалмайҙыр инде.**



ТУРИСТ ҺУҠМАҒЫ



# ШҮЛГӘНТАШ

Шүлгәнташ - Уралда иң билдәле һәм иң ҙур карст мәмерйәләренең береһе. Ул Бөрйән районы биләмәһендәге "Шүлгәнташ" ҡурсаулығында, Ағиҙел йылғаһының уң ярында урынлашҡан. Атамаһы ҡыуышлыҡҡа ингән ерҙә Ағиҙелгә ҡушылған Шүлгән йылғаһы исеменән һәм башҡорт телендәге "таш" һүҙенән килеп сыҡҡан. Йылға башта ер өҫтөнән аға, мәмерйә ауыҙы урынынан төньяҡҡа табан 2,5 километр алыҫлыҡта ер аҫтына инеп юғала. Атамаһына килгәндә иһә, боронғо башҡорт диалектында "һыу үлгән" ("һыу ташта үлгән" йәки "һыу таш аҫтына киткән") "шу үлгән" булып яңғырай.

Мәмерйәгә инеү урыны бейеклеге һәм киңлеге 25-кә 40 метр тәшкил иткән арка рәүешендә һарыҡсыҡан тауынын көньяҡ битендә урынлашҡан. Унын һул яғында Шүлгән йылғаһы урғылып кире көн битенә сыҡҡан яҫылығы өс метр самаһындай Зәңгәр күл ята. Күлдең тәрәнлеге 80 метрҙан ашыу. Дөрөҫөрәге, ул күл түгел, ә ер аҫты йылғаһы юлағының вертикаль өлөшө. Һыу үтә күренмәле, әммә минераль ҡушылмаларға бай булғанлыҡтан, эсергә яраҡһыҙ. Уның ҡараһы, һыу ванналары өсөн файҙалы.

Шүлгәнташ өс ҡаттан тора, дөйөм оҙонлоғо өс километр самаһы. Ҙур һәм бәләкәй залдарҙан, коридорҙарҙан, галереяларҙан тора. Ер аҫты күлдәре, ер аҫты йылғаһы (Шүлгән), сифон һыу аҫты ҡыуышлыҡтары бар. Залдарҙың береһендә бейеклеге - өс, төбөндә киңлеге һигеҙ метр самаһы булған уникаль сталагмит һаҡланған.

Мәмерйәнең беренсе ҡатының оҙонлоғо ҙур түгел - яҡынса 300 метр. Икенсе ҡаты 500 метрға тиклем һуҙыла. Мәмерйәгә ингән ерҙән 120 метр үткәс, һул яҡтан юғарыға тура коридор китә. Баҫҡыс буйлап 20 метр күтәрелгәс, өсөнсө ҡатҡа аяҡ баҫаһың. 500 метрға һуҙылған ҙур залдар ер аҫты күленә барып тоташа.

1954 йылда зоолог А.В. Рюмин мәмерйәлә боронғо ҡая һүрәттәрен таба. Был асыш фән донъяһы өсөн ысын сенсация була. Сөнки ул ваҡытта палеолит осорондағы юҡҡа сыҡҡан хайуандарҙың һүрәттәре Францияла һәм Испанияла ғына осрай тип иҫәпләнгән.

Һуңғараҡ үткән тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә Шүлгәнташтың түбәнге ярусында шулай уҡ боҙлоҡ дәүере аҙағына ҡараған һүрәттәр ҙә табылған.

Заманса уран-торий тикшеренеүҙәре ярҙамында Шүлгәнташ мәмерйәһендәге һүрәттәрҙең 14,5 - 36,4 мең йыл элек төшөрөлгәне раҫлана. Һүрәттәр һаны ике йөҙгә яҡын, әммә өс тиҫтәгә яҡыны ғына сағыштырмаса яҡшы һаҡланған. Уларҙың ҙурлығы 44-тән 112 сантиметрға тиклем. Мәмерйә стеналарына төшөрөлгән мамонттар, аттар һәм башҡа төрлө хайуан һәм фигура һүрәттәренең бөтәһе лә тиерлек ҡыҙыл охра менән эшләнгән.

Мәмерйәнең һәр ҡатында, йыл миҙгеленә ҡарамай, тәүлек әйләнәһенә дымлылыҡ режимы, температура һәм һауа әйләнеше меңәр йылдар буйы үҙгәрешһеҙ ҡала килә. Шуға мәмерйәлә боронғо һүрәттәр һаҡланған да инде.

2022 йылда "Шүлгәнташ" тарихи-мәҙәни музей комплексы асылды. Ул музей ғына түгел, ә ғилми-тикшеренеү лабораторияһы ла. Комплекс экспозициялары "Таймлайн", "Медиазал", "Ҡаяға төшөрөлгән рәсемдәр", "Археология", "Тәбиғи-фәнни", "Һаҡлау", "Урал-батыр эпосы" тип аталған ете тематик блоктан тора. Музейҙың төп экспонаты - ҡаяға төшөрөлгән боронғо һүрәттәр.

Музей комплексы "Шүлгәнташ" мәмерйәһенә ингән ерҙән ике саҡрым алыҫлыҡта Морат тућайында урынлашҡан.

Шүлгәнташҡа өс яҡтан барып була. Ҡайҙа йәшәүеңә ҡарап маршрутты Өфөнән Инйәр, Сәрмән (Аҫҡар юлына боролош) аша, Өфөнән Стәрлетамаҡ, Мораҡ һәм Иҫке Собханғол аша һәм Баймаҡ районы аша һайларға мөмкин.

**Рәсүл БАЙГИЛДИН әҙерләне.**

УЙЛЫҒА - УЙ!

# ҒӘЗИЗ БАЛАЛАРЫБЫҘҘЫ...

## бурысҡа батырып китмәйек!




**Әҙәм балаларының бәғзе ваҡыт кредит бурысына батып, уны нисек ҡайтарып түләргә белмәй, ауыр хәлгә тарыған осраҡтары хаҡында йыш ҡына ишетеп, төрлө матбуғат сараларында уҡып торабыҙ. Барыһы ла аҙмы-күпме пенсия алып ғүмер иткән оло йәштәге кешеләрҙең дә шундай мәшәҡәттәре килеп сыҡҡылап тора икән.**

Күптән түгел интернет яңылыҡтарының береһендә, ноябрь айынан башлап кредит алған ҡарттарҙың вариҫтарына атаһы йә әсәһенең бурысы хаҡында банктарҙан белдереү ҡағыҙы (уведомление) килә башлаясағы тураһында мәғлүмәт күреп ҡалғайным. Тегеийәки был оло кеше банктан аҡса алып та, уны түләп бөтә алмаҫ борон яҡты донъянан киткән хәлдә, уларҙың бурысын балалары ҡаплап бөтөргә тейеш икән. Мин элегәрәк ошо хаҡта уйлай торғайным, әммә ул турала артыҡ ҡыҙыҡһынғаным юҡ ине. Кеше вафат булғас та, уның бурыстары шул көйө генә "һауала аҫылынып" тороп ҡалмайҙыр инде, моғайын, тип тә уйлай торғайным.

"Мираҫ итеүселәрҙең бурысы буйынса вариҫтарҙың яуаплылығы" ("Ответственность наследников по долгам наследователя") тураһындағы Рәсәй Федерацияһының Граждандар кодексының 1175-се статьяһының 1-се пунктына ярашлы, вариҫ (кем исеменә мираҫ малы, өй-ҡура, һ.б. ҡалдырылған кеше) ошо хаҡта белергә тейеш. Мираҫ итеүсе вафат булып ҡалған хәлдә, вариҫ ошо хаҡта һис кисектермәй банкка хәбәр итергә һәм үҙе артабан түләп барырға бурыслы. Юғиһә, артабанғы айҙарҙа түләнмәгән бурыстар өсөн "пеня" тигән нәмә йыйылып барасаҡ. Мираҫ итеүсе тере сағында пеня йыйылған булһа, уны ла вариҫ түләргә бурыслы. Бер нисә вариҫ булған осраҡта, улар бүлешеп түләй икән... Олоғайған көнөндә кредит алырға йөрөп иткән кеше, үҙе үлгәс, балаларының бына ошондай сетереклe мәсьәләне сисеп, үҙ-ара низағлашып йөрөү ихтималлығы хаҡында уйланырға тейеш, минеңсә.

Элегерәк, өлкә гәзиттәребеҙҙең береһендә, билдәле журналист Илдар Ғәбитовтың "Бурысын йәшергән бөлөр..." исемле бер мәҡәләһе сыҡҡаны хәтеремдә. Шул мәҡәләлә кредит һаҙлығына батып, Рәсәйҙә йылына, яҡынса, 240 (айына 20) кеше үҙ-үҙенә ҡул һалыуы хаҡында мәғлүмәт уҡып тетрәнгәйнем. Эйе, һәр кемдең, "башҡаларҙан ҡалышмай", етеш йәшәгеһе килә. Әммә, бурысҡа алған аҡсаға, кемдер әйтмешләй, унынһын-быныһын алып, уның күп кенә бирәсәге йыйылып та китә икән шул. Бәғзе берәү бурысын түләй алмаҫлыҡ сиккә етә. Урыҫ әйтмешләй, "Долг платежом красен". Бурысҡа алғанһың икән - шартлап кит, әммә бурысыңды түлә!

Был мәсьәләне ни өсөн күтәрәм әле мин? Беренсенән, башта әйткәнемсә, бурысҡа балаларыңды батырып, донъянан китеү бик тә насар нәмә булһа, икенсенән - бурыстарың өсөн Ахирәттә ғазап кисереү хаҡында ла уйланыу кәрәк, айырыуса олпат йәшкә еткәндәргә.

Беҙ, гәзит уҡыусылар, барыбыҙ ҙа үҙебеҙҙе мосолман тип тойоп йөрөгән кешеләрбеҙ. Шуға күрә, хаҡ динебеҙҙең ошо мәсьәләгә ҡағылышлы мөһим бер үҙенсәлеген сираттағы мәртәбә иҫебеҙгә төшөрөп алайыҡ әле, тимәксемен. Динебеҙ ҡанунына ярашлы, әгәр мәрхүм булған кеше кемгәлер бурыслы булып ҡала икән, берәй яҡыны уны түләп ҡуймаған хәлдә, Ҡиәмәт көнөнә ҡәҙәр бурысы был кешенең "муйынында" торасаҡ һәм ул шуның өсөн Аллаһ Тәғәлә алдында яуап тотасаҡ! Бурыслы булып үлеү - бик ҡурҡыныс.

Бынан тыш, белеүебеҙсә, кредит - бурысҡа аҡса алып, күпмелер ваҡыттан уға ниндәйҙер процент өҫтәп кире ҡайтарыу. Изге Ҡөрьән теле менән әйткәндә, бындай нәмә "риба" тип атала. Ришүәт алыуы һәм биреүсе йәки зина ҡылыусы ир һәм ҡатын - икеһе лә берҙәй яуаплы булған һымаҡ уҡ, шәриғәт ҡанунына ярашлы, процентҡа аҡса биргән генә түгел, ә алып торған кеше лә шундай уҡ гонаһлы. Бәйғәмбәр (с.ғ.с.) хәҙисенә ярашлы, рибасылыҡ гонаһы хатта зина ҡылыуға ҡарағанда 36 мәртәбәгә ауырыраҡ. Дин юлында булған, динебеҙ ҡанундарын өйрәнеп, уларҙы үтәп ғүмер иткән мосолмандар был хаҡта яҡшы белә. Автомобиль, торлаҡ һымаҡ ниндәйҙер бер ҙур нәмә һатып алған хәлдә лә, улар, аҡсаһы еткән ҡәҙәре, арзанырағын алырға тырыша. "Күлдең тәрәнлегенә ҡарап сум" тигән боронғолар. "Аяғыңды юрғаныңдың оҙонлоғона ҡарап һуҙ", тип тә әйтәләр. Кредитҡа ай һайын процентлап өҫтәп бирер урынға, бер аҙ сабырлыҡ ҡылып, аҡсаһын өйҙә йыйып, шунан ғына әйбер алған кеше отошта була.

Бик тә бик ашығыс кәрәк була икән, бәғзеләр туғанынан бурысҡа ла алып тора. Быныһы, әлбиттә, иң һуңғы сара, сөнки, һәр кемдең "бай" туғаны булмауы ла мөмкин. Ике-өс, хатта дүрт-биш йыллап та аҡса йыйып, Мәккә ҡалаһына хаж ҡыла мосолмандар. Бөгөнгө көндә илебеҙҙә (уҙған быуаттың 90-сы йылдарында артынан ҡыуып етеп булмаған) инфляция тигән нәмәне, әлхәмдулиллаһ, хөкүмәт "ҡороҡлап" алырға, әллә ни үҫтермәҫкә тырыша. Минеңсә, барыбер өйҙә "ойоҡ эсенә йыйылған" аҡса күпкә отошлораҡ. Элегерәк бер танышым Өфө ҡалаһында төҙөлөп бөтмәгән бер бүлмәле фатир алып, ипотека бурысына батҡайны. Тырышып эшләп, ахырҙа, ана шул һаҙлыҡтан сыҡтысығыуға. Әммә... шулай уҡ тырышып эшләп, әлеге ипотекаға түләгән аҡсаһын өйҙә йыйып барған хәлдә, шул уҡ суммаға бер түгел, ә ике-өс бүлмәле фатир алырға булыр ине. Бер ниндәй ҙә бурысҡа батмай ғына! Ул ғына ла түгел, көсәнеп бурыс ҡайтарыу дәүерендә ғаиләһендәге үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙә лә һәр төрлө аңлашылмаусанлыҡтар килеп сыға торҙо. Унан танышым: "Ошо һаҙлыҡтан имен-һау сығып алһам, башҡаса "кредит", тип ауыҙ ҙа асмаясаҡмын", - тине. Был өлкәлә динебеҙ ҡанундары хаҡында ла мин уға, әлбиттә, әйттем. Бөгөнгө көндә шундай-шундай һатып алыуҙар мәсьәләһенә ул ифрат та һаҡ ҡарай, әллә ни ашыҡмай, уйлап ҡына эш итә. Бер мәртәбә "ауыҙы бешкәс", һалҡын һыуҙы ла "өф" итеп кенә эсерҙәй булған ул.

Ҡөрьән-Кәримдә Аллаһ Тәғәлә рибасылыҡ хаҡында кешеләрҙе ныҡ иҫкәртә. Күптәрҙең "һатыу итеү ҙә шул - уҡ риба бит" тип уйлап хаталаныуы, алыпһатарлыҡтың рөхсәт ителеүе, ә рибасылыҡтың ҡәтғи тыйылыуы хаҡында ла әйтелә был изге китапта. Әгәр, кем дә кем рибанан баш тартмай икән, Аллаһ ул кешегә "һуғыш иғлан итеүе" турында (Әл-Бәҡәрә сүрәһе, 279-ы аят) әйтә. Шулай уҡ ошо аят аша тәүбәгә килгән мосолмандың төп малы һаҡланып ҡалыуы хаҡында уҡып беләбеҙ. Ипотека бурысын ваҡытында түләй алмай, кешеләрҙең һәр төрлө уңышһыҙлыҡтарға осрауын, Раббыбыҙҙың шул тыйыуын үтәмәгәндәр өсөн булған яҙаһылыр, тип фекерләп, Унын алдында тәүбә ҡылып, башҡаса был гонаһлы эшкә яҡынламау хәйерлерәктер. Ҡөрьән-Кәримдең һәр һүҙе - Аллаһтыҡы! Уға беҙ һис шикһеҙ һәм икеләнеүһеҙ ышанырға тейешбеҙ. Ә Бәйғәмбәрҙең (с.ғ.с) һүҙҙәре тик Аллаһ Тәғәләнең бойороғо буйынса ғына әйтелгән. Бына ошо хаҡта белгән, дин ҡанундарын үтәп йәшәгән кешеләрҙең, әлбиттә, күңелдәре лә тыныс. Ундайҙар, бәлки, "теҡә" автомобилдәрҙә лә елдермәй, ябайыраҡтары менән ҡәнәғәт, әммә, улар бурыс һаҙлығына төшмәй, төндәрен тыныс йоҡлай. Коллекторҙар ҙа уларҙың ишеген шаҡып бимазаламай.

Күптән түгел интернеттан ике ҡулы ярҙамында ғына хәрәкәтләнеп, тауҙа кәзә көтөүен көтөп йөрөгән йәш егетте күреп, таң ҡалдым. Аяҡтары бөтөнләйгә һулыған был кеше шул хәлдә йәшәргә тырышып ята. Икенсе берәүҙең ҡулдары юҡ, бөтә эшен аяҡтары менән башҡара, өсөнсөләр - ғүмерлеккә һуҡыр, тағы кемдер һөйләшеүҙән мәхрүм. Уларға, әлбиттә, батша һарайы һымаҡ ике ҡатлы йорт та, затлы иномарка ла, алтын-көмөш тә кәрәкмәй... Ә беҙ, Аллаһ Тәғәлә биргән аяҡ-ҡулдарыбыҙ, күҙҙәребеҙ, телебеҙ, ғөмүмән, һаулығыбыҙ менән мөрхәтһенмәй һәр саҡ ниҙер менән ҡәнәғәт түгелбеҙ. Был донъяға мәңге йәшәргә килгән һымаҡ, хатта оло гонаһтарға батып, процентҡа аҡса алып, һаман да үҙебеҙгә матди байлыкты арттырырға тырышабыҙ, ә Раббыбыҙға ғибәҙәт ҡылыуҙы инҡар итәбеҙ...

Һүҙ аҙағында. Дағстан, Чечня, Ингушетия һымаҡ ҡайһы бер республикаларҙа халыҡтың кредит һаҙлығына батмауҙары хаҡында ла мәғлүмәттәр уҡығаным бар. Был республикаларҙағы кешеләрҙең шундай бурыстарҙан азатлығы унда дин талаптарын үтәргә тырышып йәшәгән мосолмандарҙың күпселек булыуына бәйләлегендә шигем юҡ...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ТАРИХИ ЙЫЛЪЯҘМА

# ӨС ЙЫЛҒА САТЫНДАҒЫ ҠАЛА,

## йәки Нисә йәш һиңә, Өфө?

**(Салауат Хәмиҙуллиндың видеофильмы буйынса)**



***Салауат Хәмиҙуллин:*** Өфө ярымутрауы территорияһында ҡала ландшафтының бер өлөшөнә ҡағылған топонимдар бар. Улар иҫәбенә Шугуровка гидронимы ла инә. Уның боронғо тарихи атамаһы - Үрьяҙы. Йылғасыҡ баш ҡалаһының төньяҡ өлөшөнән ағып сыға һәм Өфө (Ҡариҙел) йылғаһына ҡушыла. XVI - XVII быуаттар сигендә хәҙерге Өфө нефть эшкәртеү заводтары районы тирәһендә, йылғаның өҫкө ағымы янында, Шөғөр исемле ауыл була, шуға күрә йылға ла ошолай атала башлай. Рустар уны Татар биҫтәһе (Татарская слобода) тип тә атап йөрөтә. "Отводная книга по городу Уфе" тип аталған кенәгә документында хеҙмәткә ялланған кешеләргә ер бүлеп биреү тураһында яҙмалар теркәлгән, унда бына ошондай мәғлүмәт бар: "Да по приказу отделили слобоцким татарам Шугур-Алею Кокузову да ево племяннику Карабаю да Монгатаю Шугуровым детям под усад и на пашню пустотные заложные земли по 10 чети в поле". Шулай итеп, Шугуровка биҫтәһенең Шөғөрғәли Күккүҙев тигән башҡорттоң исеме менән аталыуы асыҡлана.

***Булат Азнабаев:*** Өфө ҡәлғәһенең төньяғында урынлашҡан Шөғөр ауылы йәғни Шугуровская слобода кешеләре, һис шикһеҙ, башҡорттар була. XVI быуат аҙағында Өфөлә йәшәүселәр исемлегендә батша хеҙмәтенә ялланған тархандар булмай, ә урындағы башҡорттар "вожи", йәғни оҙатып йөрөтөүселәр статусында теркәлә. Һуңынан "Отводная" кенәгәһендә уларҙы "служилые татаровья Шугура Коккузева, Гелишки Зиманова сотоварищи" тип теркәп ҡуялар. Шөғөр Күккүҙевтың улы тарафынан 1622 йылда яҙылған челобитнаяла атаһының башҡорт кенәзе булыуы һәм Урал аръяғындағы аҫаба ерҙәре хаҡында мәғлүмәт теркәлгән.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Билдәле булыуынса, XV-XIX быуаттарҙа "татар" термины бары тик социаль мәғәнәлә ҡулланылып, хеҙмәтсе ("служилые"), яһаҡ түләүсе ("ясачные"), тау аръяғы ("захребетные"), сумаҙанлы ("чемоданные") һәм башҡа "татарҙар"ҙы белдергән. Пермдә йәшәгән тыуған яҡты өйрәнеүсе Василий Шишонко үҙе төҙөгән, "Пермская летопись" тип аталған документтар һәм материалдар йыйынтығында ошо осорға ҡараған, "Уфимского уезда Сибирской дороги Улу-Катайской и Салзаутской волостей башкирцев" тигән челобитнаяны яҙыусыларҙың батшалар Иоанн һәм Петр Алексеевичҡа мөрәжәғәтендә уларҙың ата-бабаларының лайыҡлы хеҙмәттәре хаҡындағы мәғлүмәтте килтерә: "...о строении дедом их Шугуром ... города Уфы и о подгоборе под высокую державную руку блаженныя памяти великого государя и великого князя Михаила Федоровича всея России касимовского царя Арслана Алексеевича, за то де пожаловали его Шугура княжьим именем..." Шулай итеп, Өфө ярымутрауы тамағында урынлашҡан Шөғөр биҫтәһе Өфөгә инеү юлындағы һаҡ форпосты ғына түгел, ә воевода хакимиәтенең башҡа телле халыҡтар менән бәйләнеш тотоусы мөһим дипломатик пункты ролен дә үтәгән.

***Булат Азнабаев:*** Мин Өфө ҡәлғәһе төҙөлә башлағандан алдараҡ та ошо тораҡ пункты булған, тип уйлайым. Ни өсөн? XVI быуаттың 90-сы йылдарында Өфө дворяндарына поместный дачалар (ер участкалары) өсөн ер бүлеп биреү осраҡтары теркәлгән кенәгәләрҙә ошо ерҙәрҙең әүәләрәк Шөғөр Күккүҙев кешеләре тарафынан эшкәртелеүе хаҡында мәғлүмәт бар. Ҡәлғәнән төньяҡтараҡ барса һөрөнтө ерҙәр башҡорттар тарафынан ҡулланылышҡа индерелгән була. Ул осор сәйәсәтендә бындағы башҡорттар мөһим урын биләй, сөнки Өфө ҡәлғәһе төҙөлгән тәүге йылдарҙа Шөғөр Күккүҙев һәм уның кешеләре дипломатик миссия менән һәр даим Себергә һәм Өфө өйәҙенең көньяҡ тарафтарына барып йөрөй. Күрәһең, улар башҡа башҡорт ырыуҙарын Рус дәүләте яғына сығарыуға йәлеп ителгән.

**(Дауамы. Башы 37-44-се һандарҙа).**

ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!

# БАШҠОРТ АБЫЗДАРЫ ҺӘМ БАТЫРҘАРЫ

XVIII быуаттың тәүге яртыһында бер-бер артлы ҡалҡҡан башҡорт яуҙарында ҡатнашҡан абыздарҙан, мәҫәлән, Рәсәй чиновниктарының тикшереү, хөкөм итеү ҡағыҙҙарына ингәндәрҙән шундай исемдәрҙе уҡыйбыҙ: Абдулла Йосопов абыз, Абызгилде, Әзей абыздар, Айыҭкол абыз, Әлекәй абыз, Арыҫлан абыз Бикмәтов, Асанғол абыз, Әхмәт абыз, Аҡтай абыз, Баҡай абыз, Бәпәнәй абыз, Исмәкәй абыз, Ҡанабей абыз Сәйетҡолов, Ҡара абыз Рәғимғолов, Ҡарағази абыз, Килмәк абыз, Ҡылы абыз, Хафизгилде абыз Ҡудашов, Йәрмөхәммәт абыз һ. б.

Бына Килмәк абыз Нурышовты алайыҡ. Ул Нуғай юлы Юрматы волосы кешеһе. Килмәк ҙур мәҙрәсә тотҡан, шуның мөҙәрисе булған шөһрәтле абыз. Башҡорт илселеге составында 1706 -1707 йылдарҙа Ҡырымда һәм Төркиәлә булған. 1735 йылда Бөтә башҡорт ҡоролтайын ойоштороусыларҙың башлығы. Унда 1735 йылда азатлыҡ өсөн яуға күтәрелеүгә ҡарар ҡабул ителә. Үҙе аҙаҡ был 1735-1736 йылдарҙағы яу менән етәкселек итә. Оло яу башлығы һәм батыры булып дан ҡаҙана. 1737 йылда Табын ҡәлғәһендә ҡулға алына һәм Өфөгә, Минзәләгә, аҙаҡтан Санкт-Петербургка ҡаты һаҡ аҫтында оҙатыла. Артабанғы яҙмышы билдәле түгел.

Бәпәнәй абыз Төрөпбирҙин Себер юлы Ҡыуаҡан волосы башҡорто. Ул 1735 йылдан 1740 йылға тиклем бер ҡабынып, бер һүрелеп ҡалҡҡан өс-дүрт ихтилалдың Себер юлындағы күтәрелештәре менән етәкселек иткән абыз. Уның атаһы Төрөпкилде һәм ҡартатайы Ҡамаҡай данлы тархандар булып, 1704-1711 йылдарҙағы башҡорт восстаниелары уртаһында ҡайнаған батырҙар.

Уҡымышлы һәм абруйлы абыз булараҡ, Бәпәнәй Рәсәй хөкүмәте аппараты, Ырымбур экспедицияһы начальнигы В. Н. Татищев менән башҡорт халҡы исеменән бәйләнеш урынлаштыра, мөрәжәғәт хаттары яҙа. Был мөрәжәғәттәрендә ул, Рәсәй хөкүмәтенең башҡорттар менән төҙөгән килешеүҙе (договорҙы) боҙоуы, шул арҡала халыҡтың үҙ иркен яҡлап яуға күтәрелергә мәжбүр булыуы, Рәсәйҙән айырылып сығыу ихтималы мәсьәләһе ҡуйылыуы хаҡында ла рәсми һүҙ алып бара. 1737-1738 йылдарҙағы күтәрелештә Красноуфимск, Көңгөр, Бөрө, Уса кеүек ҡала һәм ҡәлғәләргә һөжүмдәр ойоштороуҙа, Башҡортостандың төрлө тарафтарында башланған ихтилал хәрәкәте менән тығыҙ бәйләнеш булдырыуҙа ҙур эштәр башҡара. Тимәк, башҡорттарҙың ирек, азатлыҡ өсөн көрәшен дипломатик саралар аша ла юлға һалыуға тырышлыҡ күрһәтә, улар һөҙөмтә бирмәгәс, халыҡты яуға күтәрә. Ихтилал баҫтырылғас, Бәпәнәй абыз үҙ ирке менән баш һалһа ла, уны ярлыҡамайҙар. 1739 йылда Минзәләлә аҫып үлтерелә.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**
**"Башҡорт халҡының рухи донъяһы" китабынан.**
**(Дауамы. Башы 42-44-се һандарҙа).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# БАШҠОРТТАР

## Солоҡсолоҡ һәм умартасылыҡ, малсылыҡ һәм ҡошсолоҡ, ер эшкәртеү

Боронғо замандарҙа, Т.Г. Байышев һүҙҙәренсә, байҙарҙың хужалығында аттарҙың һанын арттырыу өсөн ҡур малы бүленгән. Улар һайлап алынған бейәләрҙән һәм айғырҙарҙан торған. Был малдар эш өсөн файҙаланылмаған һәм һатылмаған. Даими яңырып торған аттар ҡур малы фондында билдәле йәшкәсә (15-17 йыл) тотолған. Улар фондтан бары тик йәрәхәт алғанда йәки ауырығанда ғына сығарылған. Бындағы бейәләр һауылмаған. Ҡур малдары һәр ҡайһыһында 20-40 бейә һәм бер айғыр булған бер нисә өйөрҙән торған.

Ҡур малдарынан алынған артымдан хужалыҡ-тотоноу өйөрҙәре тупланған. Һуңғылары хужалыҡта ҡулланылған, бейәләрен ҡымыҙ эшләү өсөн һауғандар.

Яҙғыһын ҡур малдары өйөрө лә, хужалыҡ аттары ла, айғырҙар үҙ-ара талашмаһын өсөн, бер-береһенән айырылған. Өйөрҙәргә имеүсе ҡолондарҙан тыш, йәш малдар яҡын ебәрелмәгән. Дүрт йәшкә тиклемге аттар һәм төрлө йәштәге эш аттары, шул иҫәптән һимертеүгә ҡуйылғандары, ҡыҫыраҡ өйөргә тупланған. Улар тоҡом ҡалдырыусы булып тормаған.

Көҙгө һәм ҡышҡы миҙгелдә, енси ихтыяж туҡтау менән, көтөргә уңайлы булһын өсөн аттар бер табунға тупланған, уларҙың һәр береһендә бер нисә өйөр булған. Аттар өсөн йылы биналар төҙөлмәгән, аҙыҡ әҙерләнмәгән, ҡар күпләп яуғанда, оҙайлы бурандар ваҡытында, тайғаҡ ваҡытта улар күпләп үлгән.

Башҡорттарҙа, ҡаҙаҡтар һәм башҡа малсылыҡ менән шөғөлләнгән халыҡтарҙағы кеүек үк, аттарҙың һәм башҡа хужалыҡ малдарының йәше һәм енесе буйынса номенклатура эшләнгән. Уларҙың атамаһын төҫтәре билдәләгән. Шулар араһында иң киң таралғаны: туры (гнедой), ерән (рыжий), саптар (саврасый), ҡара (вороной), күк (серый, голубой), һары (буланый), аҡбуҙ (белый, сивый), ала (сивый), бүртә (в яблоках) булған. Аттарҙы йәше буйынса ла төрлөсә атап йөрөткәндәр: яңы тыуған ике енестәге малдарҙың дөйөм атамаһы ҡолон булған. Енескә айырып, уларҙы айғыр ҡолон һәм бейә ҡолонға бүлгәндәр. Яҙғыһын тыуған һәм бер йәшкә тиклемге, яҙғыһын ялы һәм ҡойроғо ҡыҫҡартылған йәш аттар ҡырҡмыш (ябаҡ) тип аталған: айғыр ҡырҡмыш, бейә ҡырҡмыш. Бер йәштән 2 йәшкә тиклемге ат тай була. 2 йәштән 3 йәшкә тиклемге айғыр - ҡонан, бейә малы - ҡонажын; 3 йәштән 4 йәшкә тиклемгеһе - дүнән-дүнәжен. 4 йәштән өлкән айғыр (тоҡом ҡалдырыусы) - айғыр; енси өлгөргән һәм беренсе тапҡыр ҡолонлағанға тиклемге бейә - байтал; өйөрҙәге тоҡом айғыры - өйөр айғыры; беренсе тапҡыр ҡолонлаған бейә - бейә; өйөргә ебәрелмәгән теләһә ниндәй йәштәге айғыр - һәүерек; ҡолонламаған бейә - тыу бейә; оҙаҡ йылдар өйөрҙә булған һыналған өйөр айғыры - аҙау айғыр; ағымдағы йылда ҡолонламаған бейә - ҡыҫыр; теләһә ниндәй йәштәге алаша - алаша.

**(Дауамы бар).**

✓ *Ишембай ҡалаһының Ә.З.Вәлиди исемендәге 2-се гимназия-интернаты Башҡортостан мәғариф системаһында иң тәүге милли мәктәптәрҙең береһе булараҡ барлыҡҡа килә.*

# ИШЕМБАЙ - АҪЫЛ

## йәки Мәктәп-интернат системаһы

**Уҡыусыларыбыҙ иғтибарына Ишембай ҡалаһының Ә.З.Вәлиди исемендәге 2-се гимназия-интернаты ветерандары - Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы Гөлназ Ғәфир ҡыҙы ӘХМӘҘИЕВА һәм Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы Нурия Нәжип ҡыҙы МОРАТОВА менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ. Әңгәмәбеҙ уҡыу йортоноң ойошторолоуына 90 йыл тулыуға арнала, әммә бер үк ваҡытта башҡорт милли мәғарифы менән бәйле проблемалар ҙа күтәрелә.**

**Беҙ, совет осоро кешеләре, башлыса, башҡорт ауылдары мәктәптәрендә белем алдыҡ. Белеүегеҙсә, ул саҡтарҙа барса фәндәрҙе лә туған телебеҙҙә уҡыттылар. Шуға ҡарамаҫтан, замандаштарыбыҙ араһында арҙаҡлы шәхестәр - ғалимдар, яҙыусылар, шағирҙар, журналистар, сәнғәт әһелдәре, табиптар, педагогтар, әллә нисә төрлө башҡа һөнәр эйәләре бик күп булды. 1959 йылда СССР космосҡа яһалма юлдаш карабын осорғас, 1961 йылдың апрелендә Юрий Гагарин йыһан киңлеген байҡап ҡайтҡас, ул саҡтағы АҠШ президенты Джон Кеннеди ошо ҡаҙаныштарҙы совет мәғариф системаһының һөҙөмтәһе, тип баһалай. Әйҙәгеҙ, әңгәмәбеҙ башында совет мәғариф системаһын иҫкә алып китәйек: уның ниндәй сифаттарын әлеге заманда ла өлгө итеп ҡарарға булыр ине?**

**Гөлназ Әхмәҙиева:** Беҙҙең гимназиябыҙ - совет милли мәғариф системаһының аҫыл емештәренең береһе. Әйтергә кәрәк, ул саҡта беҙҙән - уҡытыусы-тәрбиәселәрҙән профессионаллыҡ талап ителде. Үҙ эшеңдең оҫтаһы булыу - бына шундай маҡсат ҡуйып эшләнек. Классик уҡытыусы, үҙ предметы менән бер рәттән, тәрбиә өлкәһендә лә уңышлы эшләүсе шәхес ул. Шәхесте тик шәхси яҡтан юғары кимәлгә өлгәшкән профессионал тәрбиәләп үҫтерә ала. Беҙҙең уҡытыусыларыбыҙ ошондай шәхестәр булды, тиһәк, һис арттырыу булмаҫ. Бына нисек бит ул: совет системаһында белем биреү менән тәрбиә ҡуша башҡарылды, тап шуның өсөн ул саҡтағы мәктәптәрҙе тамамлаусы бик күп уҡыусылар аҙаҡтан илебеҙҙең күренекле шәхестәре булып танылыу тапты.

**Мин башҡорт лицейында эшләгән саҡта бик оҫта, маһир математика уҡытыусыһының әйткән бер фекере иҫтә ҡалған: "Математика буйынса иң яҡшы, өлгөлө дәреслектәрҙе совет мәғарифы осоронда сығара инеләр, улар менән сағыштырғанда, хәҙергеләре күпкә ҡайтыш".**

**Гөлназ Әхмәҙиева:** Бына хәҙер бер туҡтауһыҙ, мәғарифта алдынғы технологиялар ҡулланылырға тейеш, тип ҡабатлайҙар. Заманында башҡортса, башҡорт телендә уҡытыуҙың үҙенсәлекле технологиялары булды: төптән уйланып эшләнгән программалар һәм уларға ярашлы бик шәп дәреслектәр бар ине. Ә беҙ хәҙер белем биреү стандарттарына ярашлы уҡытырға тейешбеҙ. Ә шул уҡ совет мәғариф системаһында ҡулланылған программалар, бөтөн ил мәктәптәре өсөн әҙерләнгән дәреслектәр ул йылдарҙа ла дәүләт стандартына тап килгән бит. Һәр бер предмет буйынса белем биреү концентрик рәүештә төҙөлгән уҡыу программаларына ярашлы ғәмәлгә ашырылды: башланғыс кластарҙа үҙләштерелгән төшөнсәләр, ҡағиҙәләр артабан тағы ла юғарыраҡ кимәлдә өйрәнелде, вуздарҙа юғары белем алыуҙың төплө, ныҡлы базаһы булдырылды. Юғары уҡыу йортон тамамлап, мәктәпкә эшкә килгән йәш педагогтарҙа үҙ предметтары буйынса ниндәй программалар, дәреслектәр, методикалар ҡулланылыуын яҡшы белде. Әлбиттә, дөйөм дидактик талаптарҙы үтәүҙән тыш, һәр кемгә ижади эшләү, уҡытыу процесында үҙ йөҙөн билдәләү, күңелен һалып эшләү мөмкинлектәре бирелде. Тимәк, ул саҡтағы уҡытыу методикалары бик тә һөҙөмтәле булған, шулай булмаһа, башҡорт мәктәптәрен тамамлаған йөҙәр меңләгән уҡыусылар араһынан һанап бөткөһөҙ профессионалдар, оло ҡаҙаныштарға өлгәшкән арҙаҡлы заттар сыҡмаҫ ине. Шуға күрә лә үҙемдең уҡытыусыларымды хөрмәтләп иҫкә алам. Ул саҡта Ишембай районының Ғүмәр ауылында 8 йыллыҡ мәктәп эшләне, башланғыс кластарҙа уҡытҡан Мөхәмәтйәнов Әхсән Мәғәфүр улы (тыумышы менән Дыуан районынан) иҫ киткес талантлы шәхес булып иҫемдә ҡалған: уның һабаҡтарын һис онотолоҡ түгел.



Совет системаһының тағы ла бер ыңғай яғы - уҡыусыларҙы шәхси өлгө нигеҙендә тәрбиәләү. Әгәр ҙә балалар уҡытыусыны, йә иһә башҡа бер айырым шәхесте үҙҙәре өсөн өлгө итеп ҡарай икән, тәрбиә процесы уңышлы буласаҡ. Шуға күрә беҙ үҙебеҙ ҙә гимназияла эшләгән йылдарҙа төрлө күренекле шәхестәр менән осрашыуҙар ойоштора инек. Һуғышта ҡатнашҡан геройҙы ул, хеҙмәт алдынғыһымы, яҙыусымы, артисмы - улар уҡыусыларҙа ҡыҙыҡһыныу уята, үҙҙәре биргән һорауҙарға яуаптарын ихлас тыңлай, һөҙөмтәлә ошо шәхестәр уларҙың аң-зиһендәренә өлгө рәүешендә һеңеп ҡала.

**Совет мәғарифына хас булған, бөтөн илгә таралған бер күренеш бар ине - ул да булһа уҡытыусыларҙың новаторлыҡ хәрәкәте.**

**Нурия Моратова:** Хәҙер бына стандарт та стандарт тип тылҡыйбыҙ бит инде. Шул уҡ ваҡытта мәғарифта инновацион тип нарыҡланған ниндәй генә әсбаптар, дәреслектәр тәҡдим ителмәй. Яңыраҡ миңә 11-се класс өсөн рус әҙәбиәте буйынса яңы дәреслек менән танышырға тура килде: ул әле баҫылып та бөтмәгән, әммә иҫкергән инде. Мәҫәлән, Иван Бунин, йә иһә Александр Пушкин, башҡа классиктарҙың әҫәрҙәре өйрәнелә. Уларҙың һәр береһе буйынса вуз уҡытыусыларының, ғалим-ғөләмәнең ғилми мәҡәләләре дәреслеккә индерелгән. Уҡыусылар яҙыусыларҙың әҫәрҙәрен ниндәйҙер бер фән докторы яҙған мәҡәләне уҡып сығып ҡына өйрәнә аламы һуң? Ә икенсе береһе әҙәби стилдәр тураһында үҙе яҙған монографияны ҡулланыуҙы талап итә. Былар барыһы ла ана шул инноватикаға һылтанып тәҡдим ителә. Ә уҡыусыларҙың шул уҡ Пушкин шиғырҙарын, 5-се кластан башлап, үҙ йәшенә ярашлы аңлап, үҙ һүҙҙәре менән аңлатып өйрәнә алыуы ҡиммәтерәк. Совет осороноң дәреслектәре ҡат-ҡат уйланылып, тикшерелеп, ваҡытында тейешле үҙгәрештәр индерелеп ҡулланылды, улар, ысынлап та, үҙ заманының стандарттарына ярашлы булды.

Новаторлыҡҡа килгәндә, уны бит төрлөсә аңларға, үҙенсә бойомға ашырырға була. Устинов власҡа килгәс, совет мәктәбен реформаларға булдылар, уны Горбачев дауам итте. Плюрализм, күп төрлөлөк, мотлаҡ яңылыҡтар индереү талап ителде. Һәр уҡытыусыға ниндәйҙер бер педагог-новатор системаһын үҙләштереү һәм ҡулланыу бурысы йөкмәтелде. Ә әҙерлекһеҙ уҡытыусы новатор була аламы һуң? Был хаҡта артыҡ уйланып торолманы. Һөҙөмтәлә новаторлыҡ профанацияға әүерелде. Тап шул осорҙа совет мәғариф системаһы тамырынан ҡырҡып ташланды, тип һығымта эшләргә ерлек бар.

**Гөлназ Әхмәҙиева:** Шәхсән новаторлыҡты уҡытыусының ижади эшләй алыу һөҙөмтәһе итеп ҡарайым. Мәктәп - уҡыусыларҙы үҙаллы тормош юлына алып сығыусы баҫҡыс. Предмет буйынса алынған белемде үҙ тормошонда ҡуллана белергә лә кәрәк бит. Уҡытыу процесын тормош, яҡындағы мөхиттәге етештереүсе хеҙмәт менән тығыҙ бәйләнештә алып барыу талап ителде. Мәктәп уҡыусыларынан торған хеҙмәт бригадалары, хеҙмәт лагерҙары ошо маҡсатҡа ярашлы булдырылды. Мәктәп эргәһендәге участкаларҙағы баҡсалар, еләк-емеш үҫтереү, колхоздарға ярҙам итеү ғәҙәти күренеш ине. Ишембай ҡалаһының 2-се башҡорт гимназия-интернатының да профилле лагерҙарында уҡыусыларыбыҙ, ял итеү менән бер рәттән, яҡшы хеҙмәт тәрбиәһен алды.

**Әйткәндәй, һеҙҙең гимназиягыҙҙа заманында биология фәненә генә түгел, уҡыусыларҙың уны ауыл хужалығында ҡуллана белеүенә айырым иғтибар бүленгән...**

**Гөлназ Әхмәҙиева:** Уҙған быуаттың 50-се йылдарында биология уҡытыусыһы Хаҡбирҙин Хөсәйен Ғәббәс улы мәктәп яны участкаһында уҡыусыларҙың селекцион эшен ойоштора. Улар бойҙайҙың яңы сорттарын үҫтерә, тут ебәк күбәләген үрсетеү менән шөғөлләнә. 1952 йылда ошо уҡыусылар Мәскәүҙә Бөтә Союз йәш натуралистар слетында ҡатнаша, ә 1954 йылда мәктәптең йәш биологтары уның етәкселегендә Мәскәүҙә Бөтә Союз халыҡ хужалығы ҡаҙаныштары күргәҙмәһенә саҡырыла, уларҙың эше күргәҙмәнең алтын миҙалына лайыҡ була. Әүҙем натуралистарҙың береһе Клара Мөхәмәт ҡыҙы Сәйфетдинова һуңынан туған мәктәбендә физика предметын уҡыта, 1960 - 1983 йылдарҙа директор урынбаҫары булып эшләй.

**Нурия Моратова:** Мин Хөсәйен ағайҙың улы Салауат Хаҡбирҙинде яҡшы белә инем, күрше генә торҙоҡ. Ул атаһы менән бәйле бер ҡыҙыҡлы хәтирәһе менән уртаҡлашҡайны. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында мәктәп-интернат бинаһында госпиталдәр урынлаштырыла, тәүгеһе - беҙҙең яралылар өсөн булһа, икенсеһендә әсиргә алынған яралы немец, венгр, румын һалдаттары дауалана. Шулай, бер йылдың йәйендә госпиталдә мамыҡ бөтә, ә ул көн һайын кәрәк. Шул саҡта Беренсе бөтә донъя һуғышы йылдарында госпиталдә дауаланып ятҡанында булған бер ваҡиға Хөсәйен ағайҙың иҫенә төшә, уны ошо хәрби дауаханала эштә ҡалдырған булалар. Госпиталдә мамыҡ бөткәс, улар Волга йылғаһының һайыраҡ урынынан ләм сығаралар һәм, уны киптергәндән һуң, ыуалап, тетеп, мамыҡ формаһына индерәләр. Беҙҙең Тәйрүк йылға-



***✓ Ул саҡта уҡ ошо гимназияны тамамлап сығыусылар араһында бик күп күренекле шәхестәр булыуын бар республика белә ине, шуға күрә юғары уҡыу йорттары менән тығыҙ бәйләнештә эшләнек.***



һы һай, унда ләм күп. Хөсәйен ағай уҡыусылары менән йылғанан байтаҡ ҡына ләм йыйып алып киптерә, госпиталгә ҡыш буйына етерлек ярарға һала торған материал тапшырыла. Күрәһең, ошо киптерелгән ләмдә ҡанды туҡтата, эренләгән яраны бөтәйтә торған матдәләр булғандыр инде. Был тормошта халыҡ тәжрибәһен оҫта ҡуллана алыуы хаҡында һөйләй.

Мин Хөсәйен Ғәббәс улын ысын классик уҡытыусылар иҫәбенә индерәм: ул оҫта белем биреүсе лә, маһир тәрбиәсе лә була. Ундай шәхестәргә эске гуманлылыҡ, юғары әхлаҡлылыҡ хас.

Салауат Хөсәйен улы шулай уҡ уҡытыусы булды, унең хәтирәләренән тағы ла бер эпизодты һөйләп китәйем әле. Бөйөк Ватан һуғышының иң ауыр йылдары, йәйҙәрен ауылда бесән әҙерләү ҡатын-ҡыҙҙар, балалар иңенә төшә. Колхозсыларға үҙ малдарына ла ҡышҡа бесән әҙерләп өлгөрөргә ҡәрәк бит инде. Бер көндә Салауаттың әсәһе иренә былай ти: "Көнөтөнө госпиталгә ярҙам итеүҙән бушамайһың, шул ниместәрендә бесән эшләшергә алып ҡайта алмайһыңмы ни?" Ысынлап та, тиҙҙән Хөсәйен ярҙамға конвой аҫтында һауығып килгән йәш кенә 4 немецты килтертә. Улар гитлерюгенд булып тәрбиләнеп, һуғышта яраланып, әсирғә алынған немец һалдаттарынан була. Бөтәһе лә нык ябыҡҡандар. Салауаттың әсәһе уларға картуф бешереп ашата, өҫтәлгә һын быуындан-быуынға тапшыра килә. Беҙ улар менән хаҡлы рәүештә ғорурланабыҙ.

**Нурия Моратова:** Ә гимназия-интернатыбыҙ тарихына килһәк, бына нимәләрҙе иҫкә алыу фарыз. 1932 йылдың 16 майында Ишембай тигән башҡорт ауылы янында ҡоролған 702-се скважинанан ҡеүәтле нефть фонтаны атылып сыға. Шул ваҡыттан башлап бында нефть промыслалары барлыҡҡа килә, уларҙы хеҙмәтләндереү өсөн эшселәр килтерелә, нефтселәргә ҡасабалар һалына. Эшселәрҙең балалары өсөн 1932 йылда рус башланғыс мәктәбе асыла. Бында нефть промыслалары асылыуын белеп ҡалған байтаҡ ҡына ҡаҙаҡ ғаиләләре, мөлкәтләрен дөйәләргә тейәп, Ишембайға күсеп килә. Уларҙың балалары өсөн ҡаҙаҡ кластары ла асалар. 1935 йылда рус мәктәбе базаһында башҡорт һәм татар кластарын комплектлау тураһында Стәрлетамаҡ районы халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире Урманов махсус бойороҡ сығара. Уҡыусылар һанының бик күп булыуын иҫәпкә алып, 1935 йылдың 1 сентябрендә Ишембайҙа тулы булмаған айырым урта башҡорт мәктәбен асыу хаҡында ҡарар ҡабул ителә. Мәктәптең тәүге директоры вазифаһына Арыҫланов Ибраһим Ғариф улы тәғәйенләнә.

1937 йылда башҡорт мәктәбе яңы ғына төҙөлгән ике ҡатлы кирбес бинала эшләй башлай, ул 3-сө урта башҡорт мәктәбе тип атала. Мәктәптә заманыбыҙ Мөхәмәт Фәхри улы беҙгә иртәгә ҡайғылы митинг буласағы хаҡында әйтте, галстуктарыбыҙҙың ситенә ҡара ҡайма тегеп килергә ҡушты. Әсәйем илай-илай минең галстугымды ҡаймалап тегеп ултырғаны әле лә хәтеремдә. Иртә менән мәктәпкә килдек. Мәктәп алдында һуғышта һәләк булған Ғәйфуллин Йәүҙәт ағайҙың портреты эленеп тора, ул да беҙҙең мәктәпте тамамлаған, һуғыштың тәүге көндәрендә үк үҙ теләге менән фронтҡа киткән. Уның портретын Мөхәмәт Фәхри улы төнөн үҙе эшләгән. Портрет янына почетлы ҡараул килеп баҫты, митинг башланды. Йәүҙәт ағай иҫтәлегенә бер минутлыҡ тынлыҡ иғлан ителде. Барса уҡыусылар ҙа тыйыла алмай иланылар. Был линейкала Илкәев Абдулла ағайҙың фронттан яҙған хатын да уҡынылар. Шунан директорыбыҙ: "Кемдәр һуғышҡа доброволец булып китергә теләй?" - тип һораны. 7-9-сы класта уҡыған малайҙарҙың барыһы ла бер аҙым алға атланы. Директор бәләкәй малайҙарҙың баштарынан һыйпаны ла: "Һеҙ бәләкәйһегеҙ әле, һеҙгә был ҡот осҡос һуғышты күрергә тура килмәһен", - тине. Митингтан һуң директор сығарылыш класс егеттәре менән военкоматҡа китте".

**▸ Рәсәйҙә интернат тибындағы мәктәптәр 1917 йылғы революцияға тиклем дә була. Әммә граждандар һуғышынан аҙаҡ, иҡтисади бөлгөнлөк йылдарында,**

рәйесе вазифаһын биләй. 1958 йылда Ғ.Ғ. Хисмәтуллин кире 3-сө мәктәпкә директор булып ҡайта. Ул 1959 йылда мәктәптә спортзал төҙөтә. 1961 йылдың июлендә БАССР Министрҙар Советы ҡарары менән был уҡыу йорто интернат-мәктәпкә әйләнә, 1964 йылда, мәктәпкә тоҡатеп, өс ҡатлы яңы бина төҙөлә, кабинеттар йыһазландырыла. Интернатта яҡын-тирәләге ауылдарҙан, башҡа районлардан килгән уҡыусылар күп була, улар тәүге мәлдәрҙә элекке баракта йәшәй, ауылдан алып килгән аҙыҡ менән туҡлана. Һуңынан интернат өсөн 400 урынлыҡ дөйөм ятаҡ һалына.

Уҡытыусылар өсөн Ғабдрахман Ғәбит улы - ҙур абруй яулаған етәксе, уҡыусылар өсөн хәстәрлекле педагог була. Ауыл мәктәптәренән, күбеһенсә етем ҡалған, йәки күп балалы ғаиләләрҙән килгән балаларҙың киләсәген ҡайғыртып, төрлө иҫәпләнгән. Унда ауылдарҙан килгән 360 баланы урынлаштыра инек. 2005 йылда Ишембайҙа август кәңәшмәһе үҙғарылды, Хөкүмәт Премьер-министры Рафаэль Байдәүләтов та килгәйне. Интернаттың төп бинаһы 1937 йылда төҙәлгән бит инде. Байдәүләтов ошо бинаны ҡарағас, уны емерергә ярамай, арыу ғына реконструкция эшләргә кәрәк, тип әйтеп һалды. Ысынлап та, бина ул тиклем үк насар хәлдә түгел ине, уға реконструкция эшләп, янынан ике ҡат өҫтәп төҙөп, өлкән класс балалары өсөн бик шәп ятаҡ һалынды.



**▸ Рәсәй Мәғариф министрлығы "Рәсәйҙең алдынғы мәктәбе" тигән яңы концепция әҙерләй икән. Ошо концепцияға ярашлы, ни барыһы 12 элитар мәктәп асыу ҡарала. Маҡсаты - ошондай мәктәптәрҙә иң һәләтле балаларҙан Рәсәйҙең киләсәк элитаһын әҙерләү. Баҡтиһәң, беҙҙә шундай алдынғы мәктәптәр - гимназиялар, лицейҙар, интернаттар күп тиҫтә йылдар буйына эшләп килә бит. Яңыраҡ республика етәксеһе Р.Ф. Хәбиров Өфөлә махсус математика мәктәбе төҙөләсәге хаҡында белдерҙе. Минеңсә, был республикабыҙҙың мәғариф системаһы өсөн бик тә файҙалы яңылыҡ. Унда иң һәләтле балалар менән шулай уҡ иң һәләтле педагогтар шөғөлләнәсәк, тип өмөт итәйек.**

# ПЕДАГОГТАРҒА БАЙ,

## ҡаҙаныштары хаҡында

ҡаймаҡ та ҡуя. Быларҙың аптырауының сиге булмай - дошмандар бит! Атаһы немец егеттәрен бесән сабырға өйрәтә, ике көн төнгә тиклем эшләп, эште теүәлләйҙәр. Кире госпиталгә ҡайтҡандарында былар үкенес тә белдереп ҡуя: шулай шәп эшләмәнәк, тағы ла бер-ике көнгә ҡалыр инек, тиҙәр.

**▸ Ишембай ҡалаһында асылып, республикабыҙ кимәлендә танылыу тапҡан башҡорт мәктәбенең үҙ тарихы бар. Ошо хаҡтағы мәғлүмәтте уҡыусыларыбыҙға ла еткерәйек әле.**

**Гөлназ Әхмәҙиева:** Алдараҡ әйткәнемсә, Ишембай ҡалаһының Ә.З.Вәлиди исемендәге 2-се гимназия-интернаты Башҡортостан мәғариф системаһында иң тәүге милли мәктәптәрҙең береһе булараҡ барлыҡҡа килә. Әлеге ваҡытта һаны икенсе булһа ла, ул хәҙер ҙә республикабыҙҙың ҙур күләмле мәктәп-интернаттарының беренселәре иҫәбендә. Уҙған быуаттың 30-40-сы йылдарынан башлап хәҙерге көнгә тиклем, 9 тиҫтә йыл дауамында, бер нисә быуынды тәшкил иткән педагогтар милли мәктәптең даими үҫешен, яңыра барыуын тәьмин итә, уҡытыу-тәрбиә эстафетаҡарата бик яҡшы шарттар булдырыла, бинаның йылытыу һәм яҡтыртыу системаһы, вентиляцияһы, канализацияһы, бәҙрәфтәре лә була. Һуғыш йылдарында был бинала тәүҙә яраланған совет һалдаттарын дауалау өсөн госпиталь урынлаштырылһа, һуғыш аҙағына табан әсирғә төшкән ялаы дошман һалдаттарын да ошонда дауалайҙар. Мәктәп директоры Мусин Вахит Мөхәмәт улы, директор урынбаҫары Мөхәмәтйәнов, уҡытыусыларҙан Ғиләжев, Сафаров, Росляков, Кожуров, Платонов, Улумбеков Бөйөк Ватан һуғышы фронттарында һәләк була. 1942 йылдың мартынан башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Туҡтамышев Мөхәмәт Фәхретдин улы директор вазифаһын башҡара. Уҡыу йылы тамамланғас, 1942 йылдың июнь айында, М.Ф. Туҡтамышев һәм унынсы класы тамамлаған 10 уҡыусы үҙ теләктәре менән фронтҡа китә. Йәш егеттәрҙең барыһы ла ил азатлығы өсөн барған яуҙарҙа башын һала. Ошо хаҡта беҙҙең гимназияла уҡып сыҡҡан Сажидә Тәлғәт ҡыҙы Ишмөхәмәтованың (ул һуңынан мәғариф министры урынбаҫары итеп тәғәйенләнә) атаһы бына ниҙәр һөйләй: "Бер көндә директоры-

**етем ҡалған, ил буйлап ҡараһыҙ йөрөгән балалар өсөн балалар йорттары, хеҙмәт коммуналары, үҫмерҙәр колониялары ғына асыла. Шулай ҙа СССР етәксеһе Н.С. Хрущев 1956 йылда КПСС-тың XX съезында илдә күпләп мәктәп-интернаттар асыу маҡсатын иғлан итә, хөкүмәттең махсус ҡарарҙары барлыҡҡа килә. Һәр республика һәм өлкәгә ошо проблеманы хәл итеү буйынса заданиелар бирелә. 1961 йылда бөтә ил кимәлендә 3 мендән ашыу мәктәп-интернатта 700 меңдән ашыу бала белем һәм тәрбиә ала. СССР-ҙың мәғариф системаһын үҫтереүгә мәктәп-интернаттар тос өлөш индерә…**

**Нурия Моратова:** Беҙҙең гимназиябыҙҙың интернат системаһы форматында эшләй башлауы Хисмәтуллин Ғабдрахман Ғәбит улының исеме менән бәйле. Ул 1940 йылда, Башҡорт педагогия институтын тамамлағандан һуң, Ишембай ҡалаһының 3-сө башҡорт мәктәбендә уҡыта башлай. 1942 йылдың ғинуар айында мәктәп директоры итеп тәғәйенләнә, ә март айында фронтҡа китә. Фронтта политрук була, хәрби ордендар һәм миҙалдар кавалеры.

1948 - 1951 йылдарҙа Ишембай халыҡ депутаттарының ҡала Советы башҡарма комитеты уҡыу йорттары менән бәйләнеш тота. Мәктәптә спорт, музыка, бейеү түңәрәктәре эшләй, уҡыусы балаларҙан торған оркестр бөтә сараларҙы биҙәй. Ошо осорҙа мәктәпте тамамлаған күп кластар тотошлайы менән тиерлек юғары уҡыу йорттарына уҡырға инә. Улар араһында хәҙер республика кимәлендә билдәлелек тапҡан шәхестәр бик күп. Әйткәндәй, һуңынан күренекле философ булып танылған Баязит Ғәлимов менән этнолог Рим Йәнғужин дә бер ваҡытта ошо мәктәпте тамамлайҙар. Бындай шәхестәрҙе тәрбиәләүҙә, һис шикһеҙ, Ғабдрахман Ғәбит улының роле бик ҙур.

**▸ Мәғарифта интернат системаһы әлегә тиклем һаҡланып ҡалған, ул бөгөн дә актуаллеген юғалтмаған, тип әйтергә булалыр…**

**Нурия Моратова:** 2010 йылдарҙа Башҡортостандың мәғариф системаһында оптимизация сәйәсәтен ғәмәлгә ашырыу башланды. Ул саҡта республиканың бәләкәй ауылдарындағы бик күп мәктәптәр ябылды. Шуға күрә балаларын беҙҙең гимназияла уҡытырға теләүсе ата-әсәләр күбәйҙе. Гимназия булғас, әүәл балаларҙың әҙерлеген тикшереп, һайлабыраҡ ала инек. Гимназияның ике интернат бинаһы булды, береһе - 220 урынлыҡ, икенсеһе - 163 балаға

**Гөлназ Әхмәҙиева:** Әлбиттә, уҡыусыларҙың иң һәләтлеләрен элитар мәктәптәрҙә уҡытыу - заман талабы. Бына, Европа илдәрен алып ҡарайыҡ. Унда мәктәп йәшендәге балалар өсөн абруйлы махсус пансиондар эшләй, уларҙа хатта королдәрҙең, юғары вазифалар биләгән чиновниктарҙың балалары ла белем ала.

Европаның күп кенә илдәрендә - Англияла, Германияла, Францияла, Швейцарияла шундай мәктәп-пансиондар эшләп килә. Уларға Рәсәй чиновниктарының, олигархтарҙың балаларын бик теләп алалар, сөнки уларҙа белем алыу түләүле, һәм ул бик ҡиммәт тора. Ә уҡытыу-тәрбиә биреү барыбер беҙҙең интернет системаһын хәтерләтә, уларҙа уҡығандар унайлы шарттары булған махсус кампустарҙа йәшәй. Элитар мәктәптәр асыу тәжрибәһе күрше республикала - Татарстанда ла бар. Уҡытыу-тәрбиә системаһында юғары кимәлдә белем биреү маҡсатында уҡытыусыларға ла, уҡыусыларға ла талаптар күпкә юғарыраҡ ҡуйыла, яуаплылыҡ та көслө. Бындай шарттар булдырыуға беҙҙең гимназияларыбыҙҙа, интернат-мәктәптәрҙә һәр саҡта ла ныҡ иғтибар ителде, һәм улар үҙҙәренең һөҙөмтәлелеген күптән раҫланы инде.

**(Дауамы 10-сы биттә).**

✓ Уҡыусыларыма шулай тип әйтә торғайным: "Балалар, һеҙ беләһегеҙме, кемдәр менән бергә уҡып йөрөйһөгөҙ? Хатта берегеҙ Башҡортостан Президенты ла булып китер әле".



# ИШЕМБАЙ - АҪЫЛ ПЕДАГОГТАРҒА БАЙ,

## йәки Мәктәп-интернат системаһы ҡаҙаныштары хаҡында

(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

Шәхсән үҙем Ишембай гимназия-интернатының директоры вазифаһында эшләй башлаған саҡта ошо уҡыу йорто республика мәктәбе статусында ине. Элитар гимназия булыуҙың тағы ла бер уңайлы яғы булды: ул саҡта уҡ ошо гимназияны тамамлап сығыусылар араһында бик күп күренекле шәхестәр булыуын бар республика белә ине, шуға күрә юғары уҡыу йорттары менән тығыҙ бәйләнештә эшләнек. Һәр бер уҡыусының һәләттәре, ниәт-ынтылыштары педагогтарға билдәле булғас, уларға һөнәри йүнәлеш биреүгә етди иғтибар ителде: берәүҙәренә - физика-математика, икенселәренә - иҡтисад, өсөнсөләренә - техник, кемгәләр - тарих йә иһә филология, кемгәләр сәнғәт йүнәлешен һайлау тәҡдим ителә. Ул саҡта Башҡорт дәүләт университетынан махсус комиссия килеп, вузға алыу имтихандарын үҙебеҙҙә үҙгара алды. Шундай уҡ килешеү Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институты менән дә төҙөлгәйне. Республикала медицина университеты монополист булғас, бындай эш менән шөғөлләнмәне, әммә беҙ медицина өлкәһен һайлаған уҡыусыларыбыҙҙы унда үҙебеҙ алып барып урынлаштырырға ярҙам итә инек. Байтаҡ ҡына сығарылыш кластары уҡыусылары аттестат алмаҫтан алда уҡ ҡайһы вузға инеп уҡыясағын белде. Бына бит ниндәй булды беҙҙә элитар уҡытыу системаһы! Әлеге ваҡытта мәғарифта ошондай вертикаль бәйләнештәрҙе тергеҙеү идеяһы янынан ғәмәлгә ашырыла башланы, ул селтәрле хеҙмәттәшлек итеү системаһы тип атала. Бына әле генә БДМУ ректоры Валентин Павлов Сибай медицина колледжы базаһында университет программаһының тәүге ике йыллыҡ курсына ҡараған предметтар уҡытыла башлаясағы хаҡында белдерҙе, уны үҙләштергән студенттар һөнәри белем алыуын автоматик рәүештә вузда дауам итә аласаҡ.

Бына тағы ла бер эпизод иҫкә төшә. Күренекле яҙыусыбыҙ Ноғман ағай Мусин тыуған Ҡолғона ауылынан 4 бала интернатҡа уҡырға килде: Абдрахманов, Садыҡов, Ҡотоев һәм Ғилфанов. Ул ауыл шундай бер төпкөлдә, унда барып етер өсөн йүнле юл да юҡ ине. Тик малайҙар һаман ауылға тартыла. Бер мәлде улар интернаттан ҡасып, ауылға ҡайтырға булалар. Директор урынбаҫары уларҙы автовокзалдан тотоп алып ҡайтты. Уҡыттыҡ, тәрбиәләнек. Хәҙер Азамат Абдрахманов - вице-премьер, Земфир Ҡотоев - фән кандидаты, Эске эштәр министрлығының госпиталендә баш табип, Фәдис Садыҡов - БР-ҙың Юғары Суды судьяһы, Мансур Ғилфанов - "Самрау" нәшриәтенең генераль директоры.

Гимназияла уҡытҡанда балалар алдында яңы, юғарыраҡ маҡсаттар ҡуя белеү, уларҙың киләсәктә ҙур шәхестәр рәтенә инә аласағына инандырыу үтә мөһим. Линейкаларҙамы, башҡа бер тәрбиәүи сараларҙамы, уҡыусыларыма шулай тип әйтә торғайным: "Балалар, һеҙ беләһегеҙме, кемдәр менән бергә уҡып йөрөйһөгөҙ? Арағыҙҙа киләсәктең шәп дәүләт эшмәкәрҙәре, күренекле ғалимдары, яҙыусылары, талантлы табиптары, булдыҡлы эшҡыуарҙары ултыра бит! Хатта берегеҙ Башҡортостан Президенты ла булып китер әле", - тип тә өҫтәп ҡуямын.

**▸ Эйе, һеҙ бик шәп тәрбиә методын - психология өлкәһендә киң билдәле нейролингвистик программалау алымын ҡулланғанһығыҙ.**

**Гөлназ Әхмәҙиева:** Тап шулай. "Ҡарағыҙ әле, уң яғығыҙҙа кем ултыра? Һулда кем? Ысынлап әйтәм, бер 10 йыл үткәс, улар менән бергә уҡыныҡ, тип, ғорурланып иҫкә алырһығыҙ", - тимен.

**Нурия Моратова:** Ул саҡта беҙҙең гимназияла "Лидер тәрбиәләү" тип аталған медиапрограмма яҙылды, ул республикабыҙҙа үҙгарылған конкурста 2-се урынға лайыҡ булды.

**Гөлназ Әхмәҙиева:** Гимназияла ошо программаға ярашлы "Гимназия президенты" һайлау акцияһы үҙгарыла торғайны, унда ысын һайлауҙарға хас булған күп нәмәләрҙе уҡыусыларыбыҙ үҙҙәре ҡулланырға өйрәнде. Ошо акция барғанда уҡыусыларыбыҙҙың әүҙемлеге бермә-бер арта барыуына үҙебеҙ шаһитбыҙ. Үҙенә күрә бер тормош мәктәбе итеп ҡарарға ла була быны.

**▸ Һуңғы йылдарҙа республикабыҙҙа полилингваль мәктәптәр асылыуы күҙәтелә. Ә ошо принцип беҙҙең башҡорт гимназияларында күптән бирле ғәмәлгә ашырыла була бит инде...**

**Гөлназ Әхмәҙиева:** Эйе, тап шулай. Ваҡытында гимназиябыҙҙа башҡорт теле аҙнаһына 4-5 сәғәт уҡытылды, рус һәм инглиз телдәренә лә иғтибар ҙур булды, ә гуманитар класс уҡыусылары икенсе сит ил телен - ғәрәп йә иһә төрөк телен һайлап алып өйрәнде. Методик алымдарҙы оҫта итеп ҡуллана алған уҡытыусыларыбыҙҙың эше һөҙөмтәле булды.

**▸ Әңгәмәбеҙ аҙағында Рәсәйҙә генә түгел, бөтөн донъя кимәлендә танылыу тапҡан Ишембай шашка мәктәбе тураһында ла мәғлүмәт биреү урынлы булыр.**

**Нурия Моратова:** Бына яныбыҙҙа Гөлназ Ғәфир ҡыҙы ултыра, ул ошо мәктәпкә нигеҙ һалыусыларҙың береһе. Ул Ишембайҙа шашка мәктәбенең эшмәкәрлеген камиллаштырыу һәм үҫтереүгә тос өлөш индерҙе лә инде.

**Гөлназ Әхмәҙиева:** Мин 1982 йылда Башҡорт дәүләт университетының физика факультетын тамамлағандан һуң Ишембайҙағы 2-се интернат-мәктәпкә эшкә килдем. 1992-1994 йылдарҙа директорҙың уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса урынбаҫары булһам, 1994 - 2003 йылдарҙа гимназия-интернаттың директоры вазифаһын башҡарҙым. 2003 - 2005 йылдарҙа Ишембай ҡалаһы һәм районының мәғариф бүлеген етәкләргә лә тура килде. Ә төпкөлдәге артыҡ ҙур булмаған провинциаль ҡалала шашка спортының бик йылдам үҫеп китеүе Юрий Владимирович Черток исеме менән бәйле. Яңы ғына вуз тамамлаған йәш инженер Юрий Чертокты эшкә Ишимбай ҡалаһына ебәрәләр. Ул саҡтағы ҡала партия ойошмаһы секретары Уткин Олег Васильевич уның халыҡ-ара шашка спорты буйынса спорт мастеры, Ҡаҙағстан чемпионы икәнен белеп ҡала һәм Пионерҙар һарайы эргәһендә шашка буйынса түңәрәктә етәкләргә тәҡдим итә. Тренер булып эшләһә лә, үҙе лә төрлө ярыштарҙа ҡатнашыуын дауам итә, 1989 йылда - шашка буйынса РСФСР чемпионы, 1998 йылда халыҡ-ара спорт мастеры исеменә лайыҡ була, ә 1999 йылда Лондонда үҙгарылған Бөтөн донъя интеллектуаль Олимпиадаһының көмөш миҙалын яулай.

Бына шул данлы тренер бер көндә гимназиябыҙға килде, мине уҡыусыларҙы шашка уйнатырға өйрәтеүҙең ни тиклем файҙалы булыуына инандырҙы. Шашка уйынына әллә ниндәй финанс һалыу кәрәкмәй бит: шашка таҡталары, аҡлы-ҡаралы төймәләр һәм тренер булһа, бик тиҙ арала һәләтле спортсыларҙы үҫтереп була. Бында тағы ла бала үҫешенең психофизиологияһы менән бәйле бер мәғлүмәт иҫкә төштө: бала ҡулының ваҡ хәрәкәттәрҙе йыш башҡарыуы уның мейе эшмәкәрлеген дә әүҙемләштерә бит! Шулай итеп башланғыс кластарҙа шашка уйнау дәрестәрен индерҙек һәм гимназиябыҙҙа шашка клубы эшләй башланы. Черток беҙгә тренер ҙа тапты - спорт мастеры Александр Мельников шашка клубын етәкләне. Ысынлап та, шашка уйыны уҡыусыларҙың фекерләү ҡеүәһен тиҙ үҫтерә, үҙенсәлекле прогнозлау системаһын булдыра: ябай шашкасы уйындың нимәгә килтерәсәген 5-6 аҙымға алдан күрә алһа, беҙҙең чемпиондарыбыҙ уның бер юлы бер нисә вариантын алдан күҙаллай ала. Бына донъя чемпионы Айнур Шәйбәков бынан 20 йыл элек уйнаған матчтарын кисә генә уйнағандай итеп хәтерендә тота! Ә бер нисә тапҡыр донъя чемпионы Тамара Таныҡҡужина Ишембай шашка мәктәбенең данын бар донъяға таныты. Шулай уҡ Олеся Абдуллина, Әлия Әминова, Руфина Әюпова һәм башҡа шашкасыларыбыҙ ҙа ҙур уңыштарға өлгәште. Тағы ла бына нимә әйтер инем: шашка уйыны беҙҙең халҡыбыҙҙың психологияһына, менталитетына тура килә, сөнки тормошта беҙгә күҙәтеүсәнлек хас, ашыҡмайынса, уйлап, алдан күреп, баһалап эш итергә тырышабыҙ. Иң мөһиме бына ниҙә: шашка уйыны аша интеллектуаль кимәле үҫешкән уҡыусыларыбыҙҙың үҙ тормоштарында, ниндәй генә һөнәр һайламаһын, ҙур уңыштарға өлгәшеүенә шаһитбыҙ.

**▸ Шулай итеп, беҙ бөгөн 9 тиҫтә йыл дауамында меңәрләгән милләттәштәребеҙҙе оло тормош юлына сығарған, милли мәктәптәребеҙ араһында лайыҡлы юғары баһа алған һәм әлегә тиклем матур традицияларына тоғро булып ҡалған Ә.З. Вәлиди исемендәге гимназия-интернаттың педагогик коллективын, элекке һәм хәҙерге уҡытыусыларын, уҡыусыларын, ата-әсәләрен ошо мәғрифәт байрамы менән ихлас ҡотлайбыҙ. Һүҙ аҙағында ошо белем усағының баҡыйлыҡҡа күскән һәм әле лә иҫән-һау булған уҡытыусылары һәм шөһрәтле уҡыусыларының исемшәрифтәрен барлап сығыу урынлы булыр:**

***Мәктәп директорҙары:***

Ибраһим Арыҫланов, Вахит Мусин, Фәхри Буранғолов, Мөхәмәт Туҡтамышев, Ғабдрахман Хисмәтуллин, Мәфтуха Нагаева, Ләбиб Мәҡсүтов, Рәшит Мөхәтдинов, Ғәниулла Ҡәйепов, Миңлеғәрәй Өмөтбаев, Гөлназ Әхмәҙиева, Әлфис Фәйзуллин, Ләлә Шәрипова.

***Билдәле педагогтар:***

Нурмөхәмәт Сөйәрғолов - филология фәндәре кандидаты, ғәрәп теле уҡытыусыһы, Гөлнур Аҙнабаева - педагогия фәндәре кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Мәрйәм Солтанова - Рәсәй Федерацияһының һәм БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре, музыка уҡытыусыһы, мәктәп хоры етәксеһе.

***Билдәле уҡыусылар:***

Риф Мифтахов - билдәле шағир, Земфира Сәхипова - педагогия фәндәре кандидаты, Рәсәй Федерацияһы Педагогия фәндәре академияһы ағзаһы, Фирҙәүес Бәширова - шағирә, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, Баязит Ғәлимов - БДУ проректоры, философия фәндәре докторы, Рим Йәнгужин - тарих фәндәре докторы, этнограф, БДУ профессоры, Суфия Ҡорбанғәлиева - РФ-ның һәм БР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы, Өфө дәүләт сәнғәт институты профессоры, Асия Смаҡова - БР-ҙың халыҡ артисткаһы, Виллән Дауытов - Башҡорт АССР-ының мәҙәниәт министры, БАССР журналистар союзы рәйесе, Хәсәйен Мәжитов - күренекле опера йырсыһы, Башҡорт АССР-ының халыҡ артисы, Шәмсиә Нагаева - йырсы, БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре, Ишембай сәнғәт мәктәбе директоры, Рәсүл Ғүмәров - "Ишембайнефть" НГДУ-һы начальнигы урынбаҫары, СССР-ҙың нефть сәнәғәте алдынғыһы, Рафиҡ Ғүмәров - инженер-нефтсе, дәүләт эшмәкәре, СССР-ҙың нефть һәм газ сәнәғәте алдынғыһы, Ишембай ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайының беренсе рәйесе, Тәнзилә Хисамова - Башҡортостандың халыҡ артисы, Вельмир Аҙнаев - партия һәм дәүләт эшмәкәре, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайы депутаты, Наил Ҡотлогилдин - НПЗ директоры, "Салауаторгсинтез" ЯСАЙ-ының генераль директоры, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайы депутаты, Хәләф Ишморатов - БР Премьер-министры урынбаҫары, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайы депутаты, Римма Юлдашбаева (Мусина) - Өфө дәүләт сәнғәт институты профессоры, Гөлсирә Дәүләтшина - РСФСР-ҙың атҡаҙанған табибы, СССР-ҙың һаулыҡ һаҡлау алдынғыһы, Афзалетдин Иҫәнғолов - СССР дәүләт премияһы лауреаты, Социалистик Хеҙмәт Геройы, Марат Хәмиҙуллин - Социалистик Хеҙмәт Геройы, Әксән Хәмизуллин - Социалистик Хеҙмәт Геройы, Нурия Бикҡужина - БДУ профессоры, педагогия фәндәре докторы, Шамил Таһиров - медицина фәндәре кандидаты, БДМУ доценты, Радик Илебаев - техник фәндәр кандидаты, Рима Ниғмәтуллина - БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре, Рәмил Зарипов, Башҡорт дәүләт аграр университеты проректоры, фән кандидаты, Аэлита Миңнейәнова, педагогия фәндәре кандидаты, Ишембай халыҡ театры режиссеры, Зәкиә Фәйзуллина - БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре, Мәүлиҙә Закирова - БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре, Рима Шәһитова - Өфө дәүләт сәнғәт академияһы профессоры, Тамара Таныҡҡужина - ҡатын-ҡыҙҙар араһында шашка буйынса 7 тапҡыр донъя чемпионы, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайы рәйесе урынбаҫары.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, Башҡортостан Республикаһының беренсе, икенсе һәм бишенсе саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты, 1995 - 2005 йылдарҙа БР Премьер-министры урынбаҫары, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры Хәләф Хәлфетдин улы ИШМОРАТОВ 1976 йылда Ишембай ҡалаһының 2-се интернат-мәктәбен тамамлаған. Унын Башҡортостандың интернат тибындағы гимназия һәм лицейҙары хаҡындағы уй-фекерҙәрен гәзит уҡыусыларыбыҙ иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.**



# ИНТЕРНАТЫМ, ҺИҢӘ ХӨРМӘТ, ҺИҢӘ ДАН!

- Мин Бөрйән районының Яңы Уҫман ауылында тыуып үҫтем. Ауылыбыҙҙа башланғыс мәктәп кенә бар ине. Уны тамамлағас, атай-әсәйемдәр мине Ишембай ҡалаһының 2-се интернат-мәктәбенә ебәрергә булды, 1971 йылдан шунда уҡый башланым. Ишембай ул саҡтарҙа бөтә илгә танылған нефтселәр ҡалаһы булғас, йылдам үҫеш кисерә ине. Уҡыуҙар башланыу менән беҙҙе тәүге нефть вышкаһына экскурсияға алып барҙылар.

Класыбыҙҙа башлыса көньяҡ райондарҙан килгән балалар йыйылғайны, шулай ҙа бер класташыбыҙ әллә ҡайҙағы Салауат районынан килгәйне. Беҙ һәр саҡта ла бер-беребеҙгә ҡарата яҡшы мөғәмәләлә уҡыныҡ һәм йәшәнек. Башҡалар юбилей йылдарында ғына осрашһа, класташтарыбыҙ менән һәр йыл һайын йыйылышып, күрешеп торабыҙ. Бына быйыл да Ишембай ерендә осраштыҡ, Торатауға күтәрелдек, тирмә эсендә иркенләп һөйләшеп, хәтирәләребеҙҙе барлап ултырҙыҡ.

Уҡытыусыларыбыҙ ысын профессионалдар ине, бәлки, шуға күрәлер, байтаҡ ҡына ҡыҙҙарыбыҙ педагог һөнәрен һайланы. Ижад юлына баҫҡандарҙан Хәлиҙә Ҡотоева үҙенең шиғырҙар китабын сығарҙы, Салауат районының Арҡауыл ауылы ҡыҙы Гөлнур Һаҙыеваның да ижади ҡаҙаныштары бар. Уҡытыусыларыбыҙ араһында Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары байтаҡ ине, уларҙың береһе - Әхсән Нуриәхмәт улы тарих фәненән уҡытты. Ул Сталинград янында барған яуҙарҙа ҡатнашҡан. "Сталинград фронтында шоколадҡа туйынып ҡалдыҡ",- тип һөйләгәне хәтергә уйылып ҡалған. Баҡтиһәң, немец авиацияһы ҡамауҙа тороп ҡалған Паулюс ғәскәрҙәренә самолеттарҙан парашюттарға беркетелгән ҡорал, аҙыҡ-түлек ташлай башлаған. Көслө ел сығып, ҡайһы бер парашюттар беҙҙең һалдаттарыбыҙ урынлашҡан позицияларға килеп төшә. Ҡайһы бер тоҡтарға немец шоколадтары тултырылған була.

Ғөмүмән, уҡытыусыларыбыҙ үҙҙәренең дәрестәрен тормош менән бәйләп алып барырға тырышты. Мәктәп директоры Ғәниулла Шәрифулла улы Ҡәйепов беҙҙе милли-патриотик рухта тәрбиәләү өсөн күп көс һалды. Ул Баймаҡ районы кешеһе, ваҡытында комсомолдың Баймаҡ райкомы секретары ла була. Ул һәр даим башҡорт балалары булғаныбыҙҙы иҫкә төшөрөп, халҡыбыҙға хас матур сифаттарға эйә булыуыбыҙҙы теләне.

Мәктәп-интернатта йыш ҡына төрлө күренекле шәхестәр менән осрашыуҙар уҙғарылып торҙо, ул саҡта талантлы йәш шағиҙар Рәми Ғариповты, Рауил Бикбайҙы, Сафуан Әлибаевты һоҡланып тыңланыҡ, сәнғәт әһелдәренән композитор Шамил Ҡолбарисов, йырсы Асия Смакова, баянсы Наил Ғәлиевтарҙың сығыштары яҡты хәтирәләр ҡалдырҙы. Февраль айында, студенттарҙың каникулдары ваҡытында, элегерәк беҙҙең мәктәпте тамамлаған йәштәр менән осрашыуҙар күңелдәребеҙҙә яҡшы тәьҫораттар ҡалдыра, тырышып уҡып, улар һымаҡ студент булыу теләген тыуҙыра. Билдәле шәхестәр өлгөһөндә тәрбиәләү алымы бик һөҙөмтәле, уҡыусылар ошондай кешеләргә оло хөрмәт менән ҡарай, уларға оҡшарға тырыша. Мәктәбебеҙҙе тамамлаған күренекле шәхестәр менән беҙ ҙә ихлас ғорурлана инек.

Интернат тормошонда физик тәрбиәгә иғтибар көслө булды: иртә менән - физик күнекмәләр, спорт секциялары эшләй, беҙ бәләкәйҙән үк саңғы, еңел атлетика, волейбол буйынса ярыштарға теләп йөрөнөк, ә ҡалала уҙғарылған спорт сараларында мәктәп командалары йыш ҡына призлы урындарға лайыҡ булды. Хеҙмәт тәрбиәһенең ыңғай йоғонтоһон татып үҫтек: бүлмә иҙәндәрен үҙебеҙ йыуабыҙ, аҙнаға бер тапҡыр генераль йыйыштырыуҙа ҡатнашабыҙ. Көҙҙәрен Ишембай районы колхоздарына бәрәңге алышырға йөрөүҙе үҙебеҙҙең бурысыбыҙ итеп һананыҡ. Һөнәри йүнәлеш биреү маҡсатында Ишембай һәм Салауат ҡалаларының эре предприятиеларына экскурсияларға йөрөттөләр, сәнәғәттә ниндәй технологиялар ҡулланылыуын белеп үҫтек. Мәктәп-интернатты тамамлаусылар араһында нефтсе, нефтехимик, газовик һөнәрҙәренә эйә булыусылар байтаҡ булды. Беҙҙе һәйбәт итеп уҡыттылар ҙа, комплекслы тәрбиә лә бирҙеләр.

Башҡорт ауылдары элек-электән ҙурҙарҙан булмай. XX быуат башында ла ата-әсәләре балаларын сит ерҙәргә, ҙурыраҡ мәҙрәсәләре булған ауыл-ҡалаларға уҡытырға ебәргән, сөнки аң-белемгә ынтылыу халҡыбыҙға хас сифат. Мәжит Ғафури, Шәйехзада Бабич, Ә.З. Вәлидиҙәр, бик күп башҡа башҡорт зыялылары мәҙрәсәләрҙә уҡып сыға. Шул уҡ Әхмәтзәки Вәлиди Ҡаҙан ҡалаһына атаһынан ҡасып тигәндәй китә, сөнки белемгә, фәнгә ынтыла. Төрки телдәренән башҡа, ғәрәп, фарсы, рус, немец, француз телдәрен өйрәнә, әгәр ҙә шулай булмаһа, Мешхед ҡалаһына барып, Ибн Фаҙлан яҙмаларын да таба алмаҫ ине. Батша Рәсәйендә башҡорттарға кәмһетеберәк ҡарағандар, гимназия белеме булмағандар бер нисек тә университеттарға инә алмаған. Шулай ҙа тап мәҙрәсәләр системаһының уңышлы эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә башҡорттар араһындағы грамоталылыҡ кимәле иң юғарыларҙан була.

Совет осоронда мәктәп-интернаттар системаһы аша балаларға дөйөм белем биреү камиллаша бара. Әлеге ваҡытта ла заманса уҡыу һәм йәшәү шарттары булыуы, юғары квалификациялы педагогтар менән тәьмин ителеү гимназия-интернаттарҙы милли мәғарифыбыҙҙың йөҙөк ҡашы итә. Интернаттарҙа, ата-әсәләрҙән әллә ни күп финанслауҙы талап итмәйенсә, балаларҙы туҡландырыу, медицина ярҙамы күрһәтеү яҡшы ойошторолған. Матди яҡтан аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙән килгәндәргә ташламалар ҙа бар. Әүәл финанс мөмкинлектәре етеш булмаған уҡыусылар мәктәп формаһы, аяҡ кейемдәре, ҡышҡы һәм йәйге кейем-һалым менән бушлай тәьмин ителгән, быны совет мәғариф системаһының ни тиклем гуманлы булыуына асыҡ дәлил итеп ҡарау фарыз.

Башҡорт гимназия-интернаттарын тамамлап сығыусыларға урта йәки юғары һөнәри белем алыу өсөн юлдар асыҡ. Төрлө сәбәптәр арҡаһында минең тиҫтерҙәремдең күбеһе ауылдарҙа тороп ҡалды, улар башлыса ауыл хужалығында ябай эштәрҙе башҡарҙы. Был да кәрәк, әммә төрлө һәләттәре булып та, уларҙы үҫтерә алмағандарҙың булыуы үкенес тойғоһон тыуҙыра. Етмәһә, уҙған быуаттың 90-сы йылдары башында башланғыс һөнәри белем биреүсе ПТУ-лар күпләп юҡҡа сыҡты. Финанс ҡытлығына дусар булған "Востокнефтезаводмонтаж" предприятиеһы үҙенең ҡарамағындағы 28-се ПТУ-ны ябырға ҡарар итә. Ә уның базаһында лицей-интернат асып була бит! Тап шул саҡта Башҡортостанда интернат тибындағы яңы гимназиялар, лицейҙар асыу идеяһы хасил булды. Ул саҡтағы мәғариф министры Ф.Ғ. Хисамитдинова менән Президентыбыҙ Мортаза Ғөбәйҙулла улына ошо хаҡта һөйләшергә индек, иҡтисади йүнәлештә белем бирәсәк лицей-интернат асыу кәрәклеген белдерҙек. М.Ғ. Рәхимов был идеяны хупланы. Һөҙөмтәлә 1996 йылда Республика иҡтисад интернат-лицейы эшләй башланы. Һуңынан уны Республика Башҡорт интернат-лицейы (элекке Башҡорт-төрөк лицейы) менән ҡушып, Республика инженер интернат-лицейы форматында үҙгәртеп ҡорҙолар. Был уҡыу йорто әле лә алдынғыларҙан һанала, уны тамамлаусылар республикабыҙҙың һәм Рәсәйҙең иң абруйлы юғары уҡыу йорттарында һөнәри белем ала. Беҙ бының менән генә ҡәнәғәтләнеп ҡалманыҡ, Красноусолда, Мәсәғүттә, Оло Ыҡтамаҡта, Нефтекамала яңы интернаттар астыҡ.

Рәсәй Мәғариф министрлығында "Рәсәйҙең алдынғы мәктәбе" тип исемләнгән яңы концепция әҙерләнә, уға ярашлы 12 элитар мәктәп асыу ҡарала. Ә бит Башҡортостанда ундай элитар дөйөм белем биреү учреждениелары - интернат тибындағы гимназиялар һәм лицейҙар күптән бирле һәм бик уңышлы эшләп килә. Беҙҙе провинцияға тиңләһәләр ҙә, Башҡортостан байтаҡ ҡына мәсьәләләр буйынса Рәсәйҙең күп өлкәләренән алда бара. Һис шикһеҙ, беҙҙең интернаттар системаһы киләсәктә лә яңы ҡаҙаныштарға өлгәшер, юғары квалификациялы кадрҙар әҙерләүгә булышлыҡ итер, ә был - республикабыҙҙың иҡтисади, технологик һәм мәҙәни үҫешен тәьмин итеү өсөн иң мөһим шарттарҙың береһе.



*Гимназияның бөгөнгө педагогтар коллективы.*

ИНТЕРНЕТТАН



# ҠОЛАҠТЫ...

## нисә йәштә тиштерергә?

■ Ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡолаҡтарындағы алҡалар борондан гүзәллек билгеһе иҫәпләнә. Шуға ла ҡыҙ балаһы булған ата-әсәләр уның ҡолағын тиҙерәк тиштергеһе килә. Ҡолаҡ тишкәндә ауыртыу ныҡ тойола, шуға ла бала бәләкәй сағында ҡолаҡ тиштереү күпкә уңайлыраҡ тип иҫәпләй улар. Тик экспертар һәм педиатрҙар бала үҙе был тураһа һорамайынса, ҡолаҡ тиштереү кәрәкмәй, тип иҫәпләй. Бигерәк тә бер йәшкә тиклемге ҡыҙҙарҙың ата-әсәһе уйланырға тейеш, сөнки энә организмға берәй инфекция индереүе бар, ә йәш баланың иммунитеты уның менән көрәшә алмай әле. Икенсенән, ныҡ ауыртыу тойғоһо кисергән бала психологик тетрәнеү кисерә, бала тыныҫһыҙлана, бер туҡтауһыҙ илауы бар.

■ Организмды кальцийға байытам тип өҫтәмә рәүештә дарыуҙар ҡулланыуҙың бер файҙаһы ла юҡ, тип белдерә табиптар. Яңы Зеландиялағы Окленд университеты ғалимдары оҙайлы тикшеренеүҙәр үткәргән, унда өҫтәмә рәүештә кальций ҡабул иткән 50 йәште үткән ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-аттар ҡатнашҡан. Ҡабул ителгән фекерҙәр буйынса, һөйәктәре һынып яфаланыусылар тәүлегенә 1000-1200 миллиграмм кальций ҡабул итергә тейеш. Әммә һынауҙар күрһәтеүенсә, был кәңәш һәр ваҡытта ла һөҙөмтә бирмәй. Баҡтиһән, уның 1-2 проценты ғына үҙләштерелә икән. Етмәһә, кальций һөйәктәр һыныуы хәүефен булдырмай тигән раҫлауҙар юҡ. Киреһенсә, кальций ҡабул итеүҙән ашҡаҙан-эсәк тракты зыян күреүе ихтимал. Әйткәндәй, был яңылыҡ әлкәнәйгәс һөйәктәрҙә кальций һаҡламай, тигәнде дәлилләүсе икенсе асыш. 2010 йылда АҠШ-та остеопорозды иҫкәртеү һәм һөйәктәрҙең сәләмәтлеген һаҡлау буйынса киңәйтелгән эксперимент үҙҙарылғайны. Ул ваҡытта ғалимдар еләк-емештең һәм йәшелсәнең һөт аҙыҡтарына ҡарағанда организмға кальцийҙы күберәк биреүе тураһында белдергәйне. Быны шуның өсөн дә Азия илдәрендә остеопороз осраҡтары күп теркәлмәй. Япония халҡы Америка халҡына ҡарағанда оҙағыраҡ йәшәй һәм улар кальцийға бай һөт ризыҡтарын бөтөнләй тиерлек ҡулланмай. Ә Евросоюз илдәрендә һөт һәм һөт ризыҡтарын күп ҡулланалар һәм унда остеопороз менән күптәр ауырый.

■ Американың Корнелл университеты яңы асыш тураһында хәбәр итә. Белгестәрҙең фекеренсә, ул фән өлкәһен күпкә алға ебәрәсәк. Ғалимдар миллионлаған кешеләрҙе ҡотҡарасаҡ аппарат уйлап тапҡан. Оҙайлы эксперименттарҙан һуң, ғалимдар ҡан ҡыуыу һәләтенә эйә яһалма йөрәк эшләй алған. Ул пенопластан яһалған һәм был йөрәкте донор итеп ҡулланып буласаҡ. Әлеге мәлдә күп кенә медицина компаниялары ошондай уҡ ҡоролма яһау өҫтөндә эшләй. Уларҙың төп маҡсаты - яңы йөрәктең кеше организмына нисек тәьҫир итеүен өйрәнеү.

■ Стресс кисереп яфаланыусыларға ғалимдар яңыса дауаланыу сараһы өйрәтә. Тынысланырға һауыт-һаба йыуыу ярҙам итә, ти Американың Флорида университеты белгестәре. Быны өсөн һауыт-һабаны ентекләп, яйлап йыуыу кәрәк. Был шөғөлгә етди ҡараусыларҙа, ысынлап та, нервылар көсөргәнеше, тимәк, стресс кимәле лә түбәнәйә. Психологтар иҫәпләүенсә, уйланып тороп һауыт-һаба йыуыу медитацияға тиң.

ХӘТЕРЛӘП...

# БАШҠОРТ ЭТНОЛОГИЯҺЫНЫҢ...

## нигеҙ ташын һалыусы

**Ошо көндәрҙә Өфө ҡалаһында "Көнсығыш Европа, Себер һәм Төньяҡ-көнсығыш Азияның археологияһы һәм этнотарихы проблемалары" тигән халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференция уҙғарылды. Сара Сергей Руденконың тыуыуына - 140 йыл һәм уның "Башкиры. Опыт этнологической монографии" тигән хеҙмәтенең баҫылыуына 100 йыл тулыуға бағышланды.**



С.И. Руденконың башҡорт этнографияһын сағылдырған ғилми хеҙмәтенең бер өлөшө 1925 йылда баҫылып сыға һәм артабан, тулыландырып һәм ҡайтанан эшкәртелеп, 1955 йылда "Башкиры: Историко-этнографические очерки" исеме аҫтында донъя күрә. Әйтергә кәрәк, йөҙҙән ашыу Рәсәй халыҡтарының береһенең дә этнографияһына арналған ошондай ентекле һәм объектив ғилми хеҙмәт юҡ. *Ошо хаҡта күренекле башҡорт этнологы Ринат Йосопов ошолай тип яҙғайны:* "С.И. Руденконың ғилми ҡыҙыҡһыныу өлкәләренең ни тиклем киң булыуы иҫ китмәле. Танып белеүҙең ниндәй генә өлкәһендә эшләмәһен, этнографиялармы, археологияламы, антропологияламы йә иһә гидрологияламы (ул техник фәндәр докторы була), ғалим шул тиклем нигеҙле итеп, тикшеренеү предметын тәрәндән белеп эш итә. Ғилми эҙләнеүҙәре менән Көньяҡ Уралды, Ҡаҙағстанды, Көнбайыш Себерҙе, Таулы Алтайҙы һәм Камчатканы арҡырынан буйға гиҙеп сыға. Уға Төркиә, Сирия, Палестина, Египет, Италия һәм Франция музейҙарында, уҡыу йорттарында һәм лабораторияларында үҙенең белемен камиллаштырырға насип була. С.И. Руденко бер нисә сит ил телен бик яҡшы белә. Ул үҙенә ни барыһы 25 кенә йәш булғанда Францияның Ниме ҡалаһында уҙғарылған Антропологтарҙың һәм этнографтарҙың халыҡ-ара конгресында Рәсәй вәкиле булып ҡатнаша. Үҙе иҫән сағында уҡ ул һәр тикшеренеүсе хыялланған фән үрҙәрен яулай, уның хеҙмәттәре Рәсәй этнологияһы фәненең алтын фондына инә. С.И. Руденконың тормошонда һәм ғилми иждадында Башҡортостан, башҡорттар, уларҙың үҙенсәлекле мәҙәниәте һәм этник тарихы айырым урын биләй. Ул башҡорттар араһында үҫә, уларҙың мәҙәниәтен белә һәм яҡшы аңлай, уларҙы "йөҙҙәренән" таныш тип тә әйтергә була. Шуға күрә лә этнографик һәм антропологик материал йыйыу маҡсатында 1906 һәм 1907 йылдарҙа ойошторолған тәүге экспедицияһын башҡорттар араһында уҙғара. 1912 - 1913 йылдарҙа ул башҡорттарҙың физик типтарын өйрәнеү маҡсатында уларҙың барса тиерлек территориаль һәм ырыу-ҡәбилә төркөмдәрен йөрөп сыға, үҙенең публикацияларында ул осор өсөн бик яҡшы төшөрөлгән фотографияларҙы һәм үлсәү таблицаларын ҡуллана".

***Данир Ғәйнуллин, Башҡортостандың Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм ҡулланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге директоры***: "Был конференция Руденко уҡыуҙары тип тә нарыҡлана. Рәсәйҙең Владивостоктан алып Санкт-Петербургҡа тиклем бик күп төбәктәренән, Азия илдәренән, шул иҫәптән Ҡытайҙан, Ирандан, Ҡаҙағстандан, Ҡырғыҙстандан килгән йөҙҙән ашыу ғалим (онлайн ҡатнашыусыларҙы ла индереп) Өфө ҡалаһының Евразия фәнни-белем үҙәгендә йыйылды. Беҙ ошо конференцияны күренекле рус һәм совет ғалимы С.И. Руденконың рухына бағышланыҡ, уны һәр ҡатнашыусы ҙурлап иҫкә алды. Уны беҙ башҡорт этнологияһының нигеҙ ташын һалыусы, тип та атай алабыҙ. Уның ғилми мираҫын өйрәнеү дауам итә, ул ентекләп, берәмләп йыйып алған этнографик коллекцияларҙы хәҙер баһалап бөткөһөҙ, сөнки әлеге ваҡытта беҙ ошондай һирәк осрай торған уникаль экспонаттарҙы бер нисек тә таба алмаҫ инек. Ә уның ғилми мәҡәләләре, монографиялары әлеге көндә лә актуаль, ул яңы быуын тикшеренеүселәре өсөн классик уҡыу әсбабына тиң. Руденко башҡорттарҙы ғына түгел, сыуаш, мари, мордва, хант, алтай халыҡтарының этнографик үҙенсәлектәрен тикшергән, Таулы Алтайҙа пазырык ҡургандарын тәүләп асҡан археолог та бит".

***Андрей Владимирович Поляков, Санкт-Петербург ҡалаһындағы Рәсәй Фәндәр Академияһының Матди мәҙәниәт тарихы институты директоры, тарих фәндәре докторы, РФА профессоры:*** "Сергей Иванович Руденко - фәндәге бик олуғ шәхестәрҙең береһе, уның тикшеренеүҙәр диапазоны шундай киң һәм тәрән, шуға күрә уның мираҫын киләсәк быуын ғалимдары ла бик ҡыҙыҡһынып өйрәнәсәк. Ул Санкт-Петербург университетында физика-математика факультетының тәбиғи фәндәр бүлегендә уҡый, гидрология менән етди шөғөлләнә, репрессияға эләгеп, Беломор каналында гидроузелдар төҙөүҙә ҡатнаша, әммә гуманитар өлкә уны тағы ла ныҡыраҡ ҡыҙыҡһындыра башлай. Руденко, ғалим булараҡ, революцияға тиклемге фәндең академик мәктәбе һабаҡтарын үҙләштереп, классик тикшеренеүсе булып өлгөрә. Бына ул асҡан пазырык ҡургандары археология фәне өсөн үҙе бер сенсацион асыш була. Ә башҡорт этнографияһына килгәндә, ул бәләкәйҙән уҡ башҡорттар араһында үҫә, улар уның өсөн бик яҡын халыҡ була. Ул Харьковта тыуа, әммә Башҡортостан уның тыуған төбәгенә әйләнә, сит яҡтарҙа йөрөһә һәм эшләһә лә, бында йыш ҡайтып йөрөй, оҙайлы экспедицияларға етәкселек итә. Әйтергә кәрәк, ул олуғ ғалим ғына түгел: шул уҡ башҡорт халҡының яҙмышын һәм булмышын аң-зиһене һәм йөрәге аша уҙғара алған оло шәхес тә ул. Шуға күрә Башҡортостанда, Өфө ҡалаһында уның иҫтәлеген мәңгеләштереп, һәйкәл ҡуйыу ҙа урынлы булыр ине".

***Николай Николаевич Крадин, тарих фәндәре докторы, РФА академигы, Рәсәй Фәндәр Академияһы Алыҫ Көнсығыш бүлегенең Алыҫ Көнсығыш халыҡтарының тарихы, археологияһы һәм этнографияһы институты директоры (Владивосток):*** "Сергей Иванович Руденко - бөйөк ғалим, фән өлкәһендә ул үҙе бер ҡабатланмаҫ шәхес. Техник фәндәр докторы була тороп, гуманитар фәндәр өлкәһендә шундай ҙур ҡаҙаныштарға өлгәшкән башҡа бер ғалимды ла белмәйем. Тормошонда шундай ҡатмарлы шарттарға эләккән көйө иленә гидролог булараҡ хеҙмәт итә, ул тик шуның өсөн генә лә юғары баһаға лайыҡ. Ирекҡә сыҡҡас, ул үҙенең яратҡан өлкәһендә тикшеренеүҙәрен дауам итә, археологик ҡаҙыныуҙарҙа үҙенең техник белемдәрен һәм тәжрибәһен ҡуллана. Әйтергә кәрәк, ул осорҙа совет археологияһы ҡулланған технологиялар барса донъяла иң алдынғыларҙан һанала, ә бында С.И. Руденконың өлөшө бик ҙур - ул СССР Фәндәр академияһының Матди мәҙәниәт тарихы институтында 1953 - 1967 йылдарҙа археологик технологиялар лабораторияһын етәкләй. Ул бер үк ваҡытта теоретик та, ғәмәли тикшеренеүҙәр оҫтаһы ла булып танылa. Таулы Алтайҙа пазырык ҡургандарын, Чукоткала боронғо Беринг ҡомартҡыһы булған Кивак торағын, Монголияла һундарҙың Ноин-Улу ҡургандарында табылған артефакттарҙы тикшереп, номад (күсенселек) тәғлимәте буйынса етди һығымталарға килә. Руденконың ғилми хеҙмәттәрендәге һығымталар, идеялар һәр бер осраҡта ла ғәмәли эштәргә нигеҙләнеп яҙылған. Ә уның башҡорттарға арналған китабы хаҡлы рәүештә этнография өлкәһендә классик ғилми хеҙмәткә тиңләнә. Йәмғиәттәр, дәүләттәр бер урында тормай, XX быуат башындағы тормош менән XXI быуаттағы көнитмеш араһындағы айырма иҫ китерлек ҙур. Хәҙер беҙ яңы технологиялар заманында йәшәйбеҙ, әммә киләсәккә дөрөҫ ҡараш ташлар өсөн үткән тарихыбыҙҙы белеү кәрәк. Йәштәребеҙҙә тарих менән ҡыҙыҡһындыра алыу юлдарын табыу фарыҙ. Бына әле Өфөлә ойошторолған ғилми конференцияла төрлө этностарҙың боронғо тарихына, этнографияһына арналған сығыштар бар, бындай саралар фән өсөн бик мөһим. Шуға күрә С.И. Руденконың хеҙмәттәрен яңынан баҫтырыу бик урынлы булыр ине. Өфө ҡалаһында уға һәйкәл һалынһа, ул башҡорт тарихын, мәҙәниәтен бар донъяға танытҡан шәхескә тейешле йәмғиәт баһаһы итеп ҡабул ителер ине".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һуңғы йылдарҙа Башҡортостанда йәшәйешебеҙҙең төрлө өлкәләренә ҡараған халыҡ-ара саралар йыш уҙғарыла, Рәсәй төбәктәренән, сит илдәрҙән килгән ҡунаҡтарҙы баш ҡалабыҙ ихлас ҡабул итә. Күркәм тәбиғәтле төйәгебеҙ тарихи ҡомартҡыларға бай, ә халҡыбыҙҙың боронғо мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһыныусы ғалимдар артҡандан арта бара. Өфөлә ойошторолған ғилми конференцияларҙа бер тапҡыр булһа ла ҡатнашҡан ғалимдарҙы баш ҡалабыҙ магнит һымаҡ үҙенә тартып тора - һис шикһеҙ, улар алдағы йылдарҙа ла шундай күркәм сараларға бик теләп киләсәк.**

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләнә.**

✓ *Ҡатмарлы заман булыуға ҡарамаҫтан, бөгөн ауылдарҙа халыҡ йолаларын ҡәҙерләп һаҡлаған һәм киләсәк быуынға еткергән ағинәйҙәрҙең булыуы ҡыуаныслы күренеш.*



АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ



# ТӘРБИӘ ҺАБАҠТАРЫ ЭПОСТА ИНДЕ

**Республика райондарында, ҡалаларында мәктәп балалары араһында "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү конкурстары уҙғарылып тора. Ошо бәйгеләр аша "Урал батыр" эпосы - йәш быуынды тәрбиәләүҙә иң ҡеүәтле, үҙенсәлекле халыҡ педагогикаһы икәне ныҡлап раҫлана хәҙер.**

Мәңгелек ҡиммәттәрҙең асылына төшөндөргән, донъяны бары тик изгелек, рухи берҙәмлек ҡотҡарыуына инандырған эпосты балалар-йәштәр генә түгел, ә был әҫәрҙе әкиәт итеп кенә уҡып үҫкән оло быуын вәкилдәре лә өйрәнергә бурыслы, тигән урынлы һүҙ күтәргәйне быйыл Учалы ағинәйҙәре һәм "Урал батыр" эпосы буйынса бәйге башлап ебәргәйне. Шунан һуң башҡа райондарҙа ла дауам итте был матур йола - эпосты яңынан уҡып, ундағы хәҡиҡәти һүҙҙе ныҡлап аңға һеңдереп, яттан да һөйләп бәйге тоторға саҡырыуҙар.

Ошо көндәрҙә Ишембай районы һәм ҡалаһының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары ла ошондай бәйгегә йыйылды. Район хакимиәтенең мәғариф идаралығы менән берлектә ойошторолған сарала Кинйәбулат, Маҡар, Түбәнге Әрмет, Әхмәр, Ҡанаҡай, Ҡолғона, Байғужа, Ишәй, Смаҡай, Үрге Этҡол, Урманбишҡаҙаҡ ауылдарының, Ишембай ҡалаһының үткер һүҙле, отҡор зиһенле ағинәйҙәре һәм мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре төркөмдәре эпостың алдан билдәләнгән бүлектәрен сәхнәләштерҙе. Халҡыбыҙҙың сәсәнлек йолаларын тергеҙеп, сәхнәлә кем уҙарҙан бәйге тотто ағинәйҙәр. Уларҙың сығыштары аша эпоста сағылдырылған хәҡиҡәт - Урал батырҙың үткән юлы, шул юлда үҙләштергән ғилем-аҡылы, батырлығы, Шүлгәндең яуызлыҡ юлын һайлауының сәбәбе, Уралдың кешелеккә ҡалдырған васыяттары күҙаллланғандай булды.

"Урал батыр" эпосын яттан башҡарыусы йә сәхнәләштереүсе ағинәйҙәрҙе абруйлы жюри ағзалары - Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Мәрйәм Солтанова, "Ағинәй" республика йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Янбаева, "Аҡ тирмә" милли-мәҙәни үҙәге етәксеһе Рәйсә Күзбәкова, педагогия фәндәре кандидаты Гөлнур Аҙнабаева, муниципаль район хакимиәте башлығы урынбаҫары Илшат Исмәғилев, Ишембай районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты етәксеһе Салауат Солтанморатов, БРҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы Фаягөл Әмирханова һәм Үҙәк биләмә-ара китапхана хеҙмәткәре Миңзилә Мырҙабаева баһаланы.

- Райондан "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү бәйгеһендә барлығы 14 ағинәйҙәр коллективы ҡатнашты. Улар был сараға етди әҙерләнгән, күптәре сәхнә костюмдарын үҙ ҡулдары менән теккән. Сығыштарҙы баһалағанда сәхнәләштереү, яңғыҙ йәки коллектив башҡарыу кеүек критерийҙар күҙ уңында тотолдо, - тип ихлас уртаҡлашты Ишембай районының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы рәйесе Гөлнур Аҙнабаева. - Ҡатмарлы заман булыуға ҡарамаҫтан, бөгөн ауылдарҙа халыҡ йолаларын ҡәҙерләп һаҡлаған һәм киләсәк быуынға еткергән ағинәйҙәрҙең булыуы ҡыуаныслы күренеш. Дөйөм әйткәндә, бөгөн ағинәй тел, ғөрөф-ғәҙәт, халыҡ именлеге һағында һәм киләсәк быуын хәстәрлегендә тороусы кеше ул. Халҡыбыҙҙың тәрбиә мәктәбен тергеҙеүгә "Урал батыр" эпосы ярҙам итә лә инде уларға.

Бәйгелә сығыш яһаусы коллективтарҙың һәр береһе рухлы сығышы менән һоҡландырҙы һәм тамаша ҡылыусылар, жюри ағзалары һәр сығыштан һуң "Афарин!" тип йомғаҡ яһаны. Кинйәбулат ауылы ағинәйҙәре, мәҫәлән, районда иң оҫта, иң талантлы бәйге тотоусылар тип танытҡан инде үҙен. Шуға ла уларҙың был юлы ла бик шәп сығыш яһауы көтөлгән хәл ине. Ә бына Әрмет ауылы коллективының сығышы һәр кем өсөн көтөлмәгән ваҡиға булды, тийәйемме. Эпостың үҙҙәренә тәғәйен өлөшөн шул тиклем шәп сәхнәләштерҙе улар! Әрметтәрҙең сәхнә костюмдары ла, ролдәрҙе башҡарыу алымы ла, 33 йыл физкультура уҡытыусыһы булып эшләгән Әнүр Кәримовтың Урал батыр образын һынландырыуы ла бик үҙенсәлекле килеп сыҡты.

- Беҙ Үрге һәм Түбәнге Әрмет ауылдарынан сәхнәгә 16 кеше сыҡтыҡ. Бөйөк эпосты башҡарыусылар араһында мәктәп уҡытыусылары һәм тәрбиәләнеүселәре, мәҙәниәт йорто, китапхана, почта хеҙмәткәрҙәре, янғын хәүефһеҙлеге һағында тороусылар бар, - тине әҫәрҙе сәхнәгә сығарыусы режиссер Фәрзәнә Ғиззәтуллина. - "Урал батыр" эпосын сәхнәләштереүгә үҙ өлөшөбөҙҙө индереүгә бик шатбыҙ. Беҙгә әҫәрҙең 323-сө юлынан 645-се юлына тиклем ятларға бүлеп бирелгәйне. Әлбиттә, ҡытыршылыҡтар булманы түгел. Шуның өсөн дә конкурс хаталар өҫтөндә эшләп, камиллыҡҡа ынтылыу сараһы бит ул. Костюмдарға килгәндә, уларҙы Әрмет ағинәйҙәре етәксеһе Йәмилә Ғөбәйҙуллина әҙерләне. Музыкаль яҡтан Түбәнге Әрмет мәҙәниәт йорто мөдире Фәүзиә Абрар ҡыҙы яуаплы булды. Беҙ барыбыҙ ҙа ошо саранан оло ҡәнәғәтлек алдыҡ...

Маҡар ауылы ағинәйҙәре Урал батырҙың йылан илендәге мажараларын сәхнәләштергәйне, уларҙың сығышы иң юғары баһаға - Гран-приға лайыҡ булды. "Иң яҡшы режиссура" номинацияһы ла Маҡар ҡатын-ҡыҙҙар советы етәксеһе Лилиә Һиҙиәтоваға тапшырылды.

Жюри баһаламаһынан сығып, беренсе урынға Кинйәбулат һәм Әрмет ағинәйҙәре лайыҡ булды. Икенсе урынды ҡолғоналар, байғужалар яуланы. Өсөнсө урында - Ҡанаҡай, Смаҡай ауылдары, Ишембай ҡалаһы ағинәйҙәре.

Ҡанаҡай ауылынан Рәзилә Әминева эпостан 210 юл ятлап, яңғыҙ башҡарыусылар араһынан еңеүсе булды.

- Улым менән "Урал батыр" әҫәрен 4-се класстан ятлай башланыҡ. Артабан ул уҡыуын Стәрлетамаҡ ҡалаһы 2-се лицейҙа дауам итте, ләкин эпосты бергәләп ятлауҙан туҡтаманыҡ. Өс йыл элек дауаханала ятҡанда, ваҡыт үтә торһон, тип, әҫәрҙән юлдарҙы ятлап барҙым. Ағинәйҙәр араһында бәйге ойошторолғанын белгәс, ятланғандарҙы иҫкә төшөрөп нығытып ҡуйыуы еңел булды, - тип уртаҡлашты Рәзилә апай.

**Шулай итеп, милләтте милләт итеп танытҡан күрһәткес - ул туған тел. Һутлы туған телдә яңғыраған, символик образдарға бай, донъяуи ғына түгел, космоэнергетик проблемалар ҙа сағылдырылған "Урал батыр", "Аҡбуҙат", "Заятүләк һәм Һыуһылыу" кеүек эпостарыбыҙ йәшәй икән, беҙ асылыбыҙҙы юғалтмаясаҡбыҙ, ин шаа Аллаһ.**

**Айһылыу ВАХИТОВА.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Аҡҡанат һабан турғайы

**(Белокрылый жаворонок)**



Урал аръяғының урманлы дала, шулай уҡ тауҙарға яҡын урынлашҡан далаларҙа оя ҡора. Урал алдында осрағаны булманы.

Һабан турғайынан саҡ ҡына ҙурыраҡ. Ата ҡош төҫкә сағыуыраҡ: башындағы өлпөһө, ҡойроғоноң аҫты, ҡанаты ерән-һоро. Күҙәһенең аҫҡы яғы ап-аҡ тиерлек. Осоп барған ҡоштоң ҡанатының артҡы өлөшөндәге аҡ һыҙат бигерәк яҡшы күренә.

Һайрауы - һабан турғайыныҡы кеүек, туҡтауһыҙ йырлай ҙа йырлай. Шулай ҙа йыры айырым-айырым өлөштәрҙән тора.

Илдең дала өлөшөндә киң таралған. Һабан турғайынан саҡ ҡына һуңыраҡ, ҡар һыуҙары күренә башлау менән ҡайта. Бейек үләнде яратмай, мал тапаған урындарҙы, юлдарҙы, үләне һирәгәйеп бөткән ерҙәрҙе үҙ итә.

Сентябрь аҙағында осоп китә, Кавказ аръяғында, Үҙәк Азияла ҡышлай.

## Йүрелек

**(Лесной жаворонок, юла)**



Һирәк осрай торған ҡош, республикала осоп китеп барышлай ғына туҡтап китә. Башҡортостан ҡурсаулығында бер тапҡыр ғына, 1981 йылдың сентябрендә, И.С. Белянина тарафынан теркәлә.

Һабан турғайынан бәләкәйерәк. Ошо төргә ҡараусылар кеүек үк төҫлө, әммә таптары сағыуыраҡ. Аҡ төҫтәге ҡаштары асыҡ күренеп тора, улар елкәһенә барып тоташа. Сикәләре һәм ҡолаҡтарын ҡаплап торған ерән табы бар. Ҡанаттары киң һәм ҡыҫҡа, ситенән ҡаймалап торған аҡ һыҙаты юҡ. Әммә уның бөгөлгән ерендә генә ҙур ҡара һәм бәләкәйерәк ике аҡ тап бар.

Урман деүете тигән ҡош менән бутарға мөмкин, улар икеһе лә бер үк урында йәшәй. Уға ҡарағанда йүрелек кәүҙәгә ҙурыраҡ, башы ҙурыраҡ һәм ҡойроғо ҡыҫҡағыраҡ.

Йыры ябай, шулай ҙа моңло, "юли-юли-юли" тип ишетелә. Шуға ла уны рус телендә юла тип тә атайҙар.

Европала йәшәй. Республикаға ареалдың көнсығыш сиге яҡын, шуға ла Башҡортостанда ата йүрелекте осратырға мөмкин.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**



### 24 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.30, 1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.30 Д/ф "Майя Плисецкая. Фурия танца". [12+]
13.35, 14.20, 16.45, 17.15, 22.50 "Время покажет". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
18.45 "Большая игра". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Враг у ворот". [16+]
0.05 "Время героев". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.20, 3.30 Т/с "Каменская". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Х/ф "Призрак уездного театра". [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз). [12+]**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Специальный репортаж. [12+]**
**12.15, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Асыш. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Башкорттар. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**17.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Формула здоровья. [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 О чем молчат Памятники. [12+]**
**21.00 Креативный код. [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Кустәнәс. [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**0.00 Х/ф "Летучий отряд Скотланд Ярда". [16+]**
**2.00 Спектакль "Моя семья". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

### 25 НОЯБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.50 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Враг у ворот". [16+]
0.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.20, 3.30 Т/с "Каменская". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Х/ф "Призрак уездного театра". [12+]**
**11.00 Креативный код. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Преображение. [12+]**
**21.15 Формула здоровья. [12+]**
**22.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**23.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**23.45 Х/ф "Кодовое имя "Джеронимо". [16+]**
**1.15 Спектакль "Ночь, как вся жизнь". [12+]**
**3.00 Д/ф "Маленькая жемчужина большой страны". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

### 26 НОЯБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.50 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Враг у ворот". [16+]
0.05 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.20, 3.30 Т/с "Каменская". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Х/ф "От первого до последнего слова". [12+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 "Экологично". [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**17.00 Креативный код. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**18.00 Дустар. [16+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30, 3.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Деловая среда. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2025". [12+]**
**0.00 Х/ф "Отчаянный побег". [16+]**
**1.45 Спектакль "Суд матери". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

### 27 НОЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.50 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Враг у ворот". [16+]
0.05 Д/ф Специальный репортаж "Морпехи". Ко Дню морской пехоты. [12+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Каменская". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20 Церемония вручения Открытой Евразийской кинопремии "Бриллиантовая Бабочка".
3.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Х/ф "От первого до последнего слова". [12+]**
**11.00 Формула здоровья. [12+]**
**11.15, 12.15 Квадратные метры. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Территория женского счастья. [12+]**
**16.15 Дознание. [16+]**
**17.00 Деловая среда. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 "Йома". [6+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Барыс" (Астана). КХЛ.**
**22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Безумно влюбленный". [16+]**
**1.45 Спектакль "Подарок". [12+]**
**3.00 Креативный код. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

### 28 НОЯБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.30, 17.00 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.10, 14.15 "Время покажет". [16+]
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45, 1.55 "Сегодня вечером". [16+]
23.45 "Голос. Дети". Новый сезон. Финал. Прямой эфир. [0+]
2.30 "30 лет вместе". "Магия кино". [12+]
4.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Х/ф "Соучастники". [12+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Ну-ка, все вместе!" [12+]
0.25 "Истории Большой Страны". [12+]
1.25 Х/ф "Поезд судьбы". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Х/ф "От первого до последнего слова". [12+]**
**11.00 "Йома". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Тирмәкәй. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Хазина. [6+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**17.45 Специальный репортаж. [12+]**
**18.00 Башкорттар. [12+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 "Мама". [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Башкорт йыры-2025". [12+]**
**22.00 Своих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Дустар. [16+]**
**23.30 "Курай-шоу". [12+]**
**0.00 Х/ф "Моя жизнь без меня". [16+]**
**1.45 Спектакль "Плачу вперед!". [12+]**
**4.15 Колесо времени. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

### 29 НОЯБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Одна роль на всю жизнь". К 100-летию со дня рождения Нонны Мордюковой". [12+]
11.10 "Вспомнить всё". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Поехали! [12+]
13.10 Х/ф "Женитьба Бальзаминова". К 100-летию со дня рождения Нонны Мордюковой". [0+]
15.00 Спецпроект "30 лет вместе". "Русский проект". [12+]
16.05 Д/ф "Жди меня, и я вернусь". К 110-летию со дня рождения Константина Симонова". [16+]
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Михаил Задорнов". [16+]
18.55 "Голос. Дети". Новый сезон. Финал. [0+]
21.00 "Время".
21.35 "Что? Где? Когда?" Зимняя серия игр. [16+]
22.55 Премьера. "Команды". [16+]
23.55 Х/ф "Дождливый день в Нью-Йорке". К юбилею режиссера". [16+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Юморина-2025". [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Всё хорошо будет..." [16+]
23.10 Х/ф "Море. Солнце. Склифосовский". [12+]
2.40 Х/ф "Соседи по разводу". [12+]
4.20 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Хазина. [6+]**
**8.15 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**9.15 "Сәләм представляет". [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 Своих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Әкиәтсе. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 "Курсак". [6+]**
**11.30 Зерно. [6+]**
**12.00 Преград. Net. [6+]**
**12.30 "Башкорт туйы". [12+]**
**13.30 Башкорттар. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Д/ф "Ирякте". [12+]**
**18.00 Генералы Башкортостана. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Территория женского счастья. [12+]**
**19.15, 4.30 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Байык-2025". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башкорт йыры-2025". [12+]**
**0.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.30 Х/ф "Смерть на острове". [16+]**
**2.15 Спектакль "Кавардак Forever". [12+]**
**5.15 Новости недели (на баш. яз). [12+]**

### 30 НОЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь других". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Будем жить!" [16+]
13.10 "Видели видео?" [0+]
14.00 Х/ф "Звезда пленительного счастья". К 50-летию фильма". [12+]
17.05 Д/ф "Геннадий Хазанов. "Я и здесь молчать не буду!" [12+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 Премьера. "Две звезды". Семейный подряд. Финал. [12+]
21.00 "Время".
23.00 "30 лет вместе". "Время, вперед!" [12+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.35, 1.40 Х/ф "Опять замуж". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Парад юмора". [16+]
17.00, 19.00 "Песни от всей души". [12+]
18.00 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица".
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.15 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.30 Кустәнәс. [12+]**
**9.00 "Мама". [12+]**
**9.15, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45 "Читаем с Грамотейкой". [6+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Концерт ко Дню матери. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.30 "Сулпылар". [6+]**
**12.00 Детей много не бывает. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**14.45 Дорога к храму. [6+]**
**15.15 Башкортостан #вместе. [12+]**
**15.45 Честно говоря. [12+]**
**16.30 Креативный код. [12+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**17.45 "Мама". Концерт, посвященный матерям участников СВО. [12+]**
**19.45 Әлләсе... [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15 Подкаст. Интонации. [12+]**
**22.45 Концерт ко Дню национального танца Республики Башкортостан. [12+]**
**0.45 Х/ф "Синг-Синг". [16+]**
**2.45 Спектакль "Шестая жена Ивана Грозного". [12+]**
**5.15 Письма солдатам. [12+]**
**5.30 Дустар. [16+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1447 һижри йыл.*

| Ноябрь (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 24 (3) дүшәмбе | 7:17 | 9:04 | 13:30 | 15:13 | 17:01 | 18:48 |
| 25 (4) шишәмбе | 7:19 | 9:06 | 13:30 | 15:12 | 17:00 | 18:47 |
| 26 (5) шаршамбы | 7:21 | 9:07 | 13:30 | 15:11 | 16:59 | 18:46 |
| 27 (6) кесе йома | 7:22 | 9:09 | 13:30 | 15:10 | 16:58 | 18:45 |
| 28 (7) йома | 7:24 | 9:11 | 13:30 | 15:09 | 16:57 | 18:44 |
| 29 (8) шәмбе | 7:25 | 9:12 | 13:30 | 15:08 | 16:56 | 18:43 |
| 30 (9) йәкшәмбе | 7:27 | 9:14 | 13:30 | 15:07 | 16:55 | 18:42 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

ҠЫҘЫҠ ТАҺА!

# СЕБЕНДЕҢ...

## бер ҡанатында - ауырыу, икенсеһендә - дауа



**Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт саллаллаһу-ғәләйһис үә сәлләм әйткән: "Әгәр бер һауытҡа себен төшһә, кеше шул себенде тәүҙә батырып алһын, һуңынан ғына алып ырғытһын үә ашын ашаһын. Дөрөҫлөктә, уның бер ҡанатында ауырыу булһа, икенсеһендә дауаһы" (Бохари йыйынтығынан).**

Был хәҙисте күптәр аңламай. Хатта мүғтәзилиттәр ваҡытында "Аллаһ илсеһе Мөхәммәт яңылышҡандыр", тип уйлағандар. Әле лә күптәр был юлдарҙы уҡығас, "Себен төшкән аш-һыуҙы нисек ашарға була?" тип аптырай. Ҡасим университетының микробиолог-талиптары Бәйғәмбәрҙең һүҙҙәрен тәжрибә ярҙамында һынап ҡарай. Таҙа (стериль) һыуға себенде яртылаш төшөрөп үә тулыһынса сумырып, һыуҙарҙы Петри һауыттарына һалалар. Себен яртылаш сумырылған Петри һауытында кеше өсөн хәүефле сальмонелла, стафилококк һәм башҡа бактериялар булыуы асыҡлана. Ә икенсеһендә, себен тулыһынса сумырып алынған Петри һауытында, бактерия түгел, ә антибиотик эшләгәндә ҡулланылған актиномицет булыуын күрәләр. Эксперимент Бәйғәмбәребеҙҙең хәҙисен иҫбатлай.

Доктор Мөхәммәд әс-Сәмәхи, тикшереү үткәреп, себен эсендә күҙәнәктәр (продольные дрожжевые клетки) барлығын асыҡлаған. Ул күҙәнәктәр һыуһыҙ хәрәкәткә килмәй, ә шыйыҡсаға барып эләгеү менән бөтә зарарлы бактерияларҙы юҡ итә. Шуға күрә себен бысраҡ урында йөрөһә лә, үҙе ауырып үлмәй. 1932 йылда, Һиндостанда ваба киҙеүе барса халҡын үлтереп бөтә яҙғанда, бер ауыл халҡы ғына һаҡланып ҡалған. Ғалимдар ауыл халҡын тикшергәс, уларҙың себендәр йөҙөп йөрөгән ҡоҙоҡтан һыу эсеүен белгән. Шул һыу уларҙы ҡотҡарып ҡалған да инде.

Был феноменды Австралиялағы Маккуори университеты профессоры Энди Битти ҙа тикшергән. Тикшеренеүсе шуны күрһәткән: себендә, уны һыуға сумырғанда, бактериофаг бүленеп сыға. Ул бактериофаг башҡа зарарлы бактерияларҙы ашай. Бактериофагтың ҙурлығы - 20-25 микрон, уны үтә көслө микроскоптар аша ғына күрергә мөмкин. Себен бактериофагтарынан бик көслө антибиотиктар ҙа эшләй башлағандар.

Быларҙы бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт саллаллаһу-ғәләйһис үә сәлләм нисек белгән, тигән һорау тыуыр. Ябай кеше түгел, хатта ғалимдар ҙа бактериофагтар барлығын яңы асыҡланы бит. Әлбиттә, уның белеме - Аллаһтан.

БӘЙГЕ!

# "МИНЕҢ АТАЙЫМ"




**Башҡортостан юлдаш телеканалы (БЮТ) өр-яңы проект өҫтөндә эш башланы. Ул "Матур фатир" тип атала.**

Тапшырыуҙың геройы булыр өсөн "Минең атайым" конкурсында еңеү яуларға кәрәк. Бәйгелә Махсус хәрби операция яугирының 3 йәштән 14 йәшкә тиклем Өфөлә йәиһә Өфө районында йәшәгән балалары ҡатнаша ала. Улар атаһы тураһында телефонға видеояҙма төшөрөп, БЮТ-на ебәрергә тейеш. Жюри ағзалары 10 еңеүсене билдәләй. Ярыш 28 ноябргә тиклем дауам итә. Еңеүсене БЮТ телеканалынан шәп бүләк көтә - балалар бүлмәһендә ремонт. Бар процесс видеоға төшөрөлөп, тапшырыуҙар шәлкеме әҙерләнә. Балалар бүлмәһендә иҙән, стена, түбә, тәҙрә, мебель алмаштырыу ҡаралған. Яңы тәҙрә ҡорғандары, плед һәм башҡа матур әйберҙәр ҙә фатирҙы йәмләйәсәк. "Тәү сиратта беҙҙең менән эшләргә теләк белдергән бағыусыларға ҙур рәхмәт. Республиканың башҡа район-ҡалаларында ярҙам итергә теләүселәр булһа, киләсәктә проекттың географияһын киңәйтергә әҙербеҙ", - тип пландары менән бүлешә проект етәксеһе, БЮТ телеканалының баш мөхәррире Гәүһәр Батталова.

ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!



# ҒҮМЕРҘӘР ӨҘӨЛӘ

**Республика Хөкүмәтендә ҡышҡы осорҙа янғындарҙы иҫкәртеү буйынса кәңәшмә үтте.**

Премьер-министр Андрей Назаров билдәләүенсә, һуңғы биш йылда уттан үлем осраҡтары республикала 24 процентҡа кәмегән, әммә фажиғәле хәлдәр ҡабатланып тора. Быйыл янғындарҙа 173 кеше һәләк булған.

Һыуыҡтар башланыу менән электр селтәрҙәренә, мейестәргә һәм газ ҡоралмалдарына көс төшә. "Тәжрибә күрһәтеүенсә, иң ауыр әҙемтәләр техниканың боҙолоуы арҡаһында ғына түгел, ә кешеләрҙең вайымһыҙлығына бәйле лә килеп тыуа. Башҡарма власть органдары тейешле барлыҡ саралар ҙы ла күрә. Әммә һәр кемдең шәхси яуаплылығы мөһим икәнен дә оноторға ярамай. Электр үткәргес сымдарҙы тикшереү, мейес торбаларын ваҡытында ҡоромдан таҙартыу, янғын һүндергестәрҙең булыуы, электр селтәрҙәренең артыҡ көсөргәнешенә юл ҡуймау - былар барыһы ла кеше ғүмерен һаҡлап алып ҡалыуға йүнәлтелгән ябай ғәмәлдәр", - тине Премьер-министр.

Ул муниципалитеттарға һәм яуаплы ведомстволарға иҫкәртеү эшен көсәйтергә, янғынға ҡаршы пропаганданы әүҙем алып барырға һәм торлаҡ фонды торошона контролде арттырырға ҡушты. Билдәләнеүенсә, быйыл халыҡҡа 40 меңдән ашыу автономлы янғын хәбәрсеһе таратылған һәм был практика дауам итәсәк.

### Теманы дауам итеп...

- Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы баш идаралығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, янғын һүндереүселәр ошо арала Нефтекамала биш кешене, Стәрлетамаҡта дүрт кешене янғын фажиғәһенән ҡотҡарҙы.
- Өфөнөң Ферин урамындағы туғыҙ ҡатлы йорттан ашығыс рәүештә 50 кеше эвакуацияланды. Асыҡланыуынса, 4-се ҡат коридорында сүп-сар янып киткән. Подъезды төтөн ҡаплай. Янғын һүндереүселәр ете кешене, шул иҫәптән ике баланы ҡотҡара, тағы ла 50 кешене, шул иҫәптән 5 баланы хәүефһеҙ урынға сығара. Янғын 2 кв. м. майҙанда биләп алған бул
- Өфөлә Бәҡалы урамындағы кафела май янып китеүе арҡаһында хеҙмәткәр зыян күрә. Ул утты ҡотҡарыусылар килеп еткәнгә тиклем һүндерә. Кафела булған кешеләр һәм хеҙмәткәрҙәр - бөтәһе йөҙгә яҡын кеше, шул иҫәптән биш бала үҙаллы урамға сығып өлгөрә.
- Ҡыйғы районы Үрге Ҡыйғы ауылындағы ағас өйҙөң мансарда ҡатында янғын башланған. Һанаулы минуттар эсендә ваҡиға урынына Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының янғын һүндереүселәре килеп еткән. Йорттa дүрт балалы ғаилә йәшәй. Мансарда ҡатында йоҡлап ятҡан 16 йәшлек үҫмер әсе төтөн еҫенә уянып киткән һәм башҡаларҙы ла уятҡан. Бер кем дә зыян күрмәгән.

**Рәзил ШӘМСЕТДИНОВ** әҙерләне.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**21 ноябрь "Ай тотолған төндә"** (М. Кәрим, А. Абушахманов), драма. 12+

**22 ноябрь "Яратам, тип әйтеп өлгөрмәнем"** (Г. Ғиззәтуллина, А.Абушахманов), кинодрама. 12+

**27 ноябрь "Фарман ханым"** (С. Әхмәт, У. Ҡарыпбаев), музыкаль комедия. 12+

### М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**21 ноябрь "Диңгеҙ ярын иңләй ала эт"** (С. Айтматов, М. Күлбаев), притча. 11:00. 12+

**21 ноябрь "Хужа Насретдин мажаралары"** (Л. Соловьев, В. Виткович, М. Күлбаев), комедия. 19:00. 12+

**25 ноябрь "Цирк на поляне"** (М. Непряхин, О. Мусина), әкиәт. 11:00. 0+

**25 ноябрь "Седина в бороду или невеста из Иеретии..."** (Б. Рацер, В. Константинов, М. Күлбаев), музыкаль комедия. 19:00. 12+

**26 ноябрь "Пеппи длинныйчулок"** (А. Линдгрен, О. Пронин). 11:00. 0+

**26 ноябрь "Дни Савелия"** (Г. Служитель, М. Күлбаев). 19:00. 12+

**27 ноябрь "Поджигатель"** (Г. Горин, М. Күлбаев), трагикомедия. 19:00. 16+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**22 ноябрь "Вечно эта 345-я"** (Ж. Кусаинова), музыкаль спектакль. 12:00 һәм 15:00. 6+

**23 ноябрь "Доктор Айболит һәм уның дуҫтарының мажаралары"** (К. Чуковский). 12:00 һәм 15:00. 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**21 ноябрь "Ҡатын-ҡыҙҙың тормошо һәм мөхәббәте"** Галина Халдеева (меццо-сопрано) һәм Рөстәм Гәбәйҙуллин (фортепиано) концерты. 12+

**22 ноябрь "Тәҙрәнә төшкән ай нурҙары һағыныу сәләмемде илтһәсе"** композитор Абрар Ғабдрахмановтың хәтер кисәһе. 12+

**25 ноябрь "Йылдарымда йырҙарым"** Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Рәмил Хәзиевтың концерты. 12+

**27 ноябрь "Чайковский. Дебюсси"** камера оркестры концерты. 12+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**25 ноябрь "Ҡыҙҙар килде ауылға"** (Н. Ғәйетбаев), музыкаль комедия. 12+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**21 ноябрь "Иллелә лә тормош елле, ҡурайсы булһаң әгәр!"** "Ашҡаҙар" фольклор-эстрада төркөмө концерты. 6+

**22 ноябрь "Ятка бирер йәрем юк!"** (В. Красногоров), комедия. 16+

**23 ноябрь "Жизнь за други СВОя"**, МХО-ла ҡатнашыусылар тарихы тураһында спектакль. 12+

**27 ноябрь "Дунаевские. Концерт-приношение"** филармония артистары концерты. 6+

### А.Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**21 ноябрь "Әстәғәфриулла!"** (Н.Ғәйетбай), комедия. 16+

**26 һәм 27 ноябрь "Ҡанатлы генерал"** (Х.Ирғәлин, Д. Нурғәлин), драма. 12+

### Сибай концерт-театр берекмәһе

**21 ноябрь "BABY Ti"** Арыҫлан Тимеровтың концерты. 6+

**24 ноябрь "Көтәм!"** Рөстәм Ғиззәтуллиндың концерты. 6+

**25 ноябрь** Ислам Малсуйгенов һәм Зөлфиә Нотчаеваның концерты. 6+

### БР Милли музейы

**21 ноябрь "Яныбай Хамматов. Тарихҡа алтын күпер"** тыуыуына 100 йыл айҡанлы яҙыусыға арналған күргәҙмәне асыу. 15:00. 0+

**26 ноябрь "Снайпер батырлығы"** Советтар Союзы Герой Н.В. Ковшеванның тыуыуына 105 йыл айҡанлы ҡаһарманлыҡ дәресе. 11:00. 6+

ЗАУЫҠ

Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНА

# ТЕШКӘЙҘӘРЕН ҠЫҪЫП ЫҢҒЫРАША, ИШЕТЕГЕҘ ӘЛЕ ЕР ЗАРЫН!



## Аһ, был йөрәк!

Ҡистәр бөгөн шундай тыныс,
Йондоҙҙар шундай бейек!
Мин ана шул бейеклектән
Утынан ҡурҡҡан кейек.

Ерҙән айырылғы килмәй,
Саҡырма мине, Йыһан.
Күнелемә былай ҙа бит
Күпме тетрәүҙәр һыйған!

Саҡырма.
Сабырлыҡ еңһен,
Төндөң һил олпатлығы.
Аһ, был йөрәк!
Үҙ-үҙенән
Еңелде инде тағы!

Сыҡты ла осто бит, ана,
Йондоҙҙар араһына.
Даулар булып яғылһын
Йыһандың яраһына.

## Ташбаҡалар

Ус аяһы тиклем ташбаҡалар
Үҙ көйҙәрен булды көйләтмәк.
Ғәжәп икән улар донъяһы ла -
Ҡарап тороу үҙе әкәмәт.

Икәү улар.
Береһе - зөмрәт йәшел,
Ҡарағусҡыл һоро береһе.
Береһе - йыуаш, күндәм, сабыр ғына,
Икенсеһе - уның киреһе.

Яраҡлашҡан донъялары икәү:
Һыу өҫтө һәм һыуҙың аҫты ла.
Бына рәхәт: ерҙән туялар ҙа,
Сума улар ерҙең аҫтына.

Күп түгелме?
Береһе лә еткән.
Ус аяһы тиклем йәндәргә.
Ер өҫтөндә ерһеҙ әҙәмдәр бар,
Өйһөҙҙәр бар.
Ожмах - кемдәргә?..

Миңә йәл түгел ул.
Былай ғына...
Булдыралғас, әйҙә, йөҙһөндәр.
Утрауына сығып ял итһендәр,
Әҙер генә тәғәм ейһендәр.

Берәүһенең холҡо аптырата,
Төҫтәренә ҡарап айырам.
Иптәшенең ҡапҡан тәғәмен ул,
Ауыҙынан ала ҡайырып.

Йәм-йәшеле - йыуаш, һоро - усал,
Ни билдәләй икән холоҡто?
Ҡайҙан белә һуң ул
Тәмле өлөш -
Көслөнөкө, тигән ҡылыҡты?

Ус аяһы тиклем, ә үҙенә
Ике донъяла ла урын тар.
Ер өҫтәре генә тарҙыр, тиһәм,
Ерҙең аҫтында ла тарлыҡ бар.

Туйғансы йөҙ, аша, сыҡ та - ял ит,
Хужаң йомарт, емең етерлек.
Йән аҫырау ҡанундарын бынау
Тәтәй ташбаҡалар хәтерләйҙәр!
Уйлай-уйлай иҫең китерлек...

## Кемгә нимә етмәй?

*Ер иланы ҡыҫып тештәрен...*
*Муса Йәлил "Вәхшәт".*

Беҙ "Вәхшәт"те уҡып үҫкән быуын
Илай-илай, йомоп күҙҙәрҙе.
Күҙ асып, күҙ йомған араларҙа
Нимә һуң был - донъя үҙгәрҙе.

Нимә һуң был?
Мейе был мәхшәрҙе
Аңлауҙан баш тарта.
Илаһым!
Тарих биргән һабаҡ аҙ булдымы?
Туҡтатығыҙ Донъя болаһын!

Туҡтатығыҙ!
Ут ҡулсаһы ялмап
Алып бара бит һуң Ер шарын.
Әҙәм башҡайҙары йәл булмаһа,
Ишетегеҙ әле Ер зарын.

Тешкәйҙәрен ҡыҫып ыңғыраша,
Ишетегеҙ әле Ер зарын!
Йәшәп буламы ни тоймайынса,
Табан аҫтарында ер барын...

Тере ере ҡалды микән уның,
Баҫып ҡына тороп әмәл юҡ.
Кемгә нимә етмәй?
Беҙгә Ерҙә
Тыныслыҡтан ҡиммәт әләм юҡ!

Ул вәхшәтте ҡабатланмаҫ, тинек...
Ҡабатланмаҫ тинек. Ышандыҡ.
Океан аръяғынан йыллы елдәр
Иҫкәненә нисек ҡыуандыҡ!

Емерелде бына шул ышаныс,
Ҡотоп һалҡынлығы арала.
Эй Илаһым!
Ерҙе урталайға
Ярылыуҙан берүк арала.

## Белгәндәрем, күргәндәрем

*(Ҡыҙыма нәсихәт)*

Шатланаһың, ҡыҙым, ҡыуанаһың:
"Миңә ун биш бөгөн, миңә - ун биш!"
Табын хәстәрләшә берәү йәнә:
"Бөтәһе лә микән, әсәй, етеш?"

Ә мин, ҡыҙым, был хәстәргә түгел,
Хәсрәтләнәм иртәгәһе көнгә.
Донъя хәлен белеп буламы ни,
Көн дә бағам Күккә, Айға, Көнгә.

Һиңә инселәгән теләктәрҙе
Артыҡ тимәһен, тим, Күктең үҙе.
Аҡтан, Хаҡтан ғына балҡып торһон
Ғәмәл тигән дәфтәреңдең йөҙө.

Ҡырыҡ ерҙән һәр саҡ тыйып торам,
Һеңһен, тим буйына, тыйғандарым.
Ҡулым белгәндәре, биҙгәндәре,
Аңлағаным менән тойғандарым.

Артыҡ, тимә, берүк, һин уларҙы,
Ҡырыҡ ерҙән тыйған тыйыла ул.
Тыйылғанға ғына тәүҙә - тәүфиҡ,
Шунан, яйлап, Бәхет һыйына ул.

Уй-зиһенең самалайҙыр әле,
Ниҙәр яҙылғанын маңлайыңа.
Юл сыҡҡанда, башлап Әҙәп төшһөн,
Әҙәп илтер Бәхет һарайына.

Бәхет күберәк офоҡ һыртында ул,
Ҡул һелтәһәң, булмай ҡыуып етеп.
Юлдан тайпылғанды әүрәтергә
Әҙер генә торалар бит көтөп.

- Барып етһәм, танырмы ул мине,
Ә таныһа, ҡалырмы ул оҙаҡ?
- Бәхет илен асып инеп була,
Элеп кенә ҡуйып булмай йоҙаҡ...

Нотоҡ түгел былар - күргәндәрем,
Белгәндәрем генә ни барыһы.
Бәхет һарайының сере, ҡыҙым,
Әҙәп, Һин һәм Хыял араһы.

## Көтәм әле...

Әкиәткә ышанам мин -
Көтәм әле.
Офоҡ буйлап елеп кенә
Үтәм әле.
Өмөтөмдө йәшерәйем -
Төңөлмәһен.
Әкиәтһеҙ донъя уйға
Өңөлмәһен.
Көтәм әле. Әкиәтһеҙ
Йәшәү ҡыйын...
Хыялый ҙа йөрәгемә,
Донъя, һыйын...
Тормоштоң бар Алдары ла,
Таҙҙары ла.
Алдыҡ ҡына булмаһын был
Яҙҙары ла...

## Төңөлмәйек әле...

Араларға ҡарҙар ятты микән,
Ҡыш һалҡыны керҙе күңелгә...
Әле генә йәй ине бит әле,
Нисек күтәрербеҙ...
Донъя ҡапыл
Ҡояш нурҙарынан төңөлһә?
Үтмәҫ кеүек ине...
Күңел ҡалһын,
Ҡала бирһен ине йәйҙәрҙә...
Ҡыш китмәҫкә килһә,
Беҙҙе йәнә
Йәнебеҙгә яҙҙар бүләк иткән
Ал ҡояшлы йәйгә әйҙәргә.
Төңөлмәйек әле...
Һалҡындарға
Күңел һиҙгер, шуға бошона.
Ғүмер инеп бара ҡышын - йәйҙе,
Яҙын - көҙҙө,
Көҙөн... йәнә йәйҙе
Һығ(ы)лып ҡына
һағ(ы)нып ҡышына...

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйләреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠОШ ТУПТАРЫНЫҢ... ҡанундары ҡаты

Халҡы ямандың бейе аҙыр, ҡатыны ямандың өйө аҙыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ваҡыт ҡоштар тубында барыһынан да бейегерәккә осоп, болоттар өҫтөндә ни барын белергә теләгән бер Ҡош пайҙә булған. Ул үҙ артынан башҡа ҡоштарҙы ла әйҙәгән. Барыһы ла ризалашмаған быһдай ауыр һынауға: берәүҙәр ерҙә эштәре күп булыуға һылтанған, икенселәр ҡанаттары хәлһеҙ булыуын дәлил итеп килтергән. Әммә был Ҡош артынан юғарыға уҡталған ҡоштар ҙа булған. Улар йәшенле болоттарға, ҡояш көйҙөрөүенә, башҡа ауырлыҡтарға ла ҡарамай, юғарыға күтәрелгән дә күтәрелгән. Шулай улар бар болоттарҙы артта ҡалдырып, йыһан киңлегенә килеп сыҡҡан. Ләкин ҡояш яҡтыһы күҙҙәрен шул ҡәҙәре сағылдырған, күҙ алдары ҡараңғыланып, баштары әйләнеп, ҡоштар йүнәлеште юғалтҡан. Шуға ла уларҙың ҡайһы берҙәре кирегә табан уҡтай атылған һәм ергә таш һымаҡ барып төшөп, һәләк булған.**

**Ә юл башлаусы Ҡош юғарыға осоуҙы дауам иткән. Уның артынан осоусы ҡоштар ҡанаттары көйгәнен һиҙеп, шулай уҡ кирегә боролған. Әммә ҡанаттары көйөп бөтөп, ергә ялanғас көйө барып төшкәндәр.**

**Ә Ҡош осҡан да осҡан. Бер саҡ уның күҙ алдында ғәжәп матур күренеш асылған. Матурлыҡ ҡына түгел, саф һауа ла әсир иткән уны. Тәьҫораттары менән уртаҡлашырға тип, артына әйләнеп ҡараһа, берәү ҙә юҡ. Шунан Ҡош ошо матурлыҡ тураһында һөйләргә тип, ергә уҡталған. Ҡояштың ҡыҙыу нурҙары аҫтында ҡанаттарын өтә-өтә осҡан ул: тиҙерәк ҡайтып етеп, ырыуҙаштарына ошондай гүзәл донъя барлығы, ҡыйыуҙарҙың унда табан осоп менә алыуы, ә билдәһеҙлек алдында ҡурҡып төшкәндәргә, үҙенең һаҙлығын өҫтөн күргәндәргә уның буй еткеһеҙ булыуы тураһында һөйләргә теләгән ерҙәге ҡоштарға. Ләкин Ҡош ергә тиклем осоп етә алмаған, уны йыртҡыс ҡоштар һауала уҡ өҙгөсләп ташлаған.**

**- Ниңә һеҙ барығыҙҙан да юғарыраҡ осорға теләгән ғәйепһеҙ ҡошто улай өҙгөсләнегеҙ? - тип һораған туп юлбашсыһы йыртҡыс ҡоштарҙан.**

**- Беҙ уның бик бейеккә осоп менгәнен беләбеҙ, уның менән бергә осҡандарҙың үле кәүҙәләре генә ҡайтҡанын да күрҙек. Беҙ Ҡоштоң үле кәүҙәһе генә осоп килә, моғайын, болоттар араһында тотҡарланғандыр, тип уйланыҡ. Йәшен болоттарына эләкһәң, ергә тере ҡайтмаясаҡһың икәнде һәр ҡош белә бит. Шуға ла беҙ уны үлелер тип уйлап өҙгөләнек. Унан һуң, ул бит беҙҙең табыш ине, - тип аңлатҡан йыртҡыс ҡоштар.**

**Улар менән барыһы ла килешкән, сөнки "унан" берәүҙең дә тере ҡайтҡаны булмағанын белгәндәр.**

**Ҡош туптарының да ҡанундары ҡаты. Улар йыш ҡына ошо закондарҙы аша сыҡҡандарҙы өҙгөсләп ырғыта..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

1 582218 911006 25046

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 20.11.2025 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 20.11.2025 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 21.11.2025 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2707
Заказ - 2160